ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 апрель (алағарай) 2024

№ 14 (1107)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Рәсәй Президенты хупланы!

4

Һаҡланғандар имен ҡалыр

6

Донъя менән, аңың менән... ижадилыҡ идара итә

8-9

Ҡушһондоғом - ҡәртнәйем...

11










@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡал!*** ***8 апрелдән 18 апрелгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индексы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 786 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Йәмғиәтебеҙҙә бөгөн әхлаҡлылыҡ кимәле ниндәй дәрәжәлә һәм был юҫыҡта һеҙҙе борсоған йәки ҡыуандырған мәсьәләләр бармы?*

***Раушания БИКБУЛАТОВА, персонал менән идара итеү буйынса йәш белгес:*** Бөгөнгө көндә әхлаҡлылыҡ, мораль, этика тураһында һүҙ барғанда, яҙылмаған ҡағиҙә булараҡ, өлкән быуын вәкилдәре нишләптер йыш ҡына йәш быуынды миҫал итеп алып, уларҙың тетмәһен тетергә ғәҙәтләнеп китте. "Йәштәр" төшөнсәһе улар телендә әр һүҙе булып яңғырай, ахыры һәм, ысынлап та, улар бер тауыштан йәштәрҙе ғәйепләй, уларҙан "кер" эҙләй, зарлана башлай. Йәнәһе, элек йәштәр тәртипле, тыңлаулы, эш һөйөүсән ине, тип ҡабатларға ярата улар. Ысынлап та шулаймы был? Өлкәндәр ризаһыҙлығының сәбәптәре низә?

Бөгөнгө миллениал, йәғни, ябай тел менән әйткәндә, 1981-1996 йылдарҙа тыуған быуын йәштәренең айырылып торған сифаттары: үҙаллы фекерләү һәләте, үҙ үҙлектәрен белдереүгә, тиң хоҡуҡлылыҡҡа ынтылыштары, толерантлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ. Улар һәр яңылыҡҡа асыҡ, аралашыусан. Ләкин ни өсөн өлкән быуын уларҙы ҡайһы саҡ өнәп бөтмәй һәм йыш ҡына әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләргә генә тырышып тора икән? Быға бер төрлө генә яуап биреүе лә ауыр. Әхлаҡһыҙлыҡ күренештәре һәр заманда ла булған, буласаҡ. Өлкәндәр ҙә ҡасандыр йәш быуын булған һәм улар йәшәгән осорҙа ла әхлаҡһыҙлыҡ, енәйәтселек булған, ләкин ул замандарҙа мәғлүмәт сығанаҡтары өҫтөнән хакимлыҡ иткән цензура был хаҡтағы хәбәрҙәрҙең таралыуына юл ҡуймаған, шуға күрә улар заманындағылар тыныс һәм тәртипле булған кеүек тойола. Әле иһә саҡ ҡына яҙа баҫҡанынды ла интернет һәм социаль селтәрҙәр эләктереп ала һала. Шуға күрәлер ҙә бөгөн "ҡырын эш"тәр күберәк ҡылына кеүек күренә, ахырыһы.

Йәштәрҙе тәнҡитләргә яратыусы бумерҙар, йәғни 1946-1964 йылғылар, бөгөнгө йәштәрҙән коллективизм тойғоһо, түҙемлек, һаҡсыллыҡ, дөйөм эшкә бирелгәнлек, карьераға ынтылыштары менән айырылып тора, тип әйтер инем. Шуға күрә улар: "Беҙҙең быуын йәштәре баҫалҡылыраҡ та, изгелеклерәк тә ине; беҙ уҡырға ла, эшләргә лә тырышып торҙоҡ, ә бөгөнгө йәштәр уҡырға ла, эшләргә лә теләмәй",- тип ҡабатлай. Ләкин мин былдай ҡараш менән килешмәйем, сөнки бөгөнгө йәштәрҙең үҫкән һәм уҡыған йылдары илдә барған ҡатмарлы осорға тап килде, йәмғиәтебеҙҙең ҡайһы юлдан барыры ла асыҡ түгел ине.

Шуғалыр ҙа, күрәһең, беҙҙең тиҫтерҙәрҙе "юғалған быуын"ға ла иҫәпләп ҡуялар, сөнки ваҡытында уларҙың күбеһе ата-әсәһе теләге буйынса диплом өсөн генә вуз тамамланы, ә һөнәр һайлау, тормошта үҙ маҡсатыңды табыу тураһында күптәр уйланманы. Шул арҡала вузда уҡыған һөнәре буйынса эшләмәгән йәштәр бик күп.

Ҡыҫҡаһы, заманы шулай тура килде, ләкин был бөгөнгө йәштәрҙең әхлаҡлылыҡ йә булмаһа әхлаҡһыҙлыҡ сифаттарын билдәләүсе үлсәм түгел. Бөгөнгө йәштәр тормошто, илебеҙҙе һөйә, донъяны күберәк танып-белергә, сәйәхәт итергә ярата; кәрәк булып, ил саҡырғанда, тыныс тормош, Ватаныбыҙ һағына баҫырға ла әҙер тороуҙарын иҫбат иттеләр; именлек, матур киләсәк өсөн хатта ғүмерҙәрен дә йәлләмәгән йәштәребеҙ барлығын күрҙек һәм улар менән ғорурланабыҙ, уларҙың яҡты образдары мәңгелеккә хәтеребеҙҙә һаҡланыр.

## БАШ ҠАЛАМ

# АЛТАҠТАЛАР ДӨРӨҪ ЯҘЫЛҺЫН!

**Беҙ республиканың төрлө райондарынан баш ҡалаға таксиҙа Үҙәк баҙар эргәһенә килеп төшәбеҙ һәм ошонан ултырып ҡайтып китәбеҙ. Шуға күрә был тирәләге хәл-торош иң беренсе күҙгә сағыла.**

Баш ҡаланың Үҙәк баҙар районындағы уралтма юл әллә нисә быуындың хәтирәләрендә йәшәй, ул Өфөнөң башҡа иҫтәлекле урындары менән бер рәттә тора. Шуға күрә уны боҙоп, машиналарҙы "П" рәүешендәге юлдан ебәрергә ҡарар итеүҙәре күңелгә бер аҙ моңһоулыҡ бирҙе. Шулай ҙа, әгәр был хәүефһеҙлек өсөн мөһим икән, тимәк, был эште атҡарып сығырға кәрәктер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ДУҪЛЫҠ БИЛДӘҺЕ ИТЕП...

**Дуҫлыҡ Монументы янындағы Ағиҙел буйында колоннада төҙөлә башланы. Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостан-Абхазия дуҫлығы хөрмәтенә колоннадаға тәүге нигеҙ ташы 2023 йылдың октябрендә һалынды.**

Колоннаданың бейеклеге - 12 метр, оҙонлоғо - 30 метр, киңлеге - 6 метр. Материалдарҙан фельзит ташы йәки гранит ҡулланыла. Дизайны буйынса ул Сухум ҡалаһындағы яр буйы колоннадаһын хәтерләтә. "Һәр ваҡыт дуҫ, бер-беребеҙгә ярҙам итеп, уңыштарға һөйөнөп йәшәү мөһим. Беҙ абхаз халҡы менән шулай йәшәргә тырышабыҙ. Колоннада - күптәнге тарихы булған мәңгелек дуҫлыҡ билдәһе. Уҙған быуаттың 20-се йылдарында, Волга буйында аслыҡ булған саҡта, Абхазия беҙгә аҙыҡ-түлек менән ярҙам иткән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яугирҙарыбыҙ Абхазия дауаханаларында һәм госпиталдәрендә дауаланған, ә 90-сы йылдарҙа беҙ, башҡорттар, абхаздарға гуманитар ярҙам күрһәттек. Ғорурланырға хаҡыбыҙ бар. Республика көнөндә килеүегеҙ - беҙҙең өсөн оло мәртәбә. Колоннаданы теүәл бер йылдан, 11 октябрҙә асабыҙ", - тип вәғәҙәләне Радий Хәбиров.



12+

✓ *Ошо күңелле мәшәҡәттәр араһында Өфө урамдарындағы адрес алтаҡталарын яңыртыу ҙа буласағын уҡып шатландым. Өфөлә кәрәкле урамды һәм йортто табыуы еңел түгел, сөнки алтаҡталар бик бәләкәй...*



БАШ ҠАЛАМ

# АЛТАҠТАЛАР ДӨРӨҪ ЯҘЫЛҺЫН!

**(Башы 1-се биттә).**







Был урынға ҡағылышлы тағы бер тема күтәрелде ошо арала: ҙур сауҙа магазины алдындағы машиналар туҡталҡаһы урынына Урал тауынан алып киленгән ҙур таштар ҡуйылған, ағастар үҫкән, йәшеллеккә төрөнгән яңы сквер эшләйәсәктәр икән. Бик мәслихәт. Шул тирәлә йәшәгәндәр айырыуса ҡыуаналыр был яңылыҡҡа, сөнки көнөтөнө машина төтөнө араһында йәшәү ялҡыталыр, билләһи.

Юлдағы хәүефһеҙлек мәсьәләһен дауам итеп, Өфө водителдәренең тәртипһеҙлеген билдәләп үткем килә. Әлбиттә, барыһын да ғәйепләп булмай, шулай ҙа күптәр юл ҡағиҙәләрен боҙа, ҙур тиҙлектә йөрөй, йәйәүлеләрҙең хәүефһеҙлегенә төкөрөп ҡарай.

Өфөнөң йөҙө йылдам үҙгәрә. Айырыуса урындағы хакимиәттең милли колоритты һаҡлап ҡалыуға, уны пропагандалауға, урындағы эшҡыуарҙарға үҫергә булышлыҡ иткән проекттары оҡшай. Мәҫәлән, бер килгәндә М.Кәрим менән Чернышевский урамдары киҫелешендәге этно-ауылды махсус барып ҡараныҡ. Бик матур итеп эшләнгән. Бындай проекттар ҡаланың һәр районында ла тормошҡа ашырылһа, ниндәй шәп булыр ине.

Баш ҡалала һуңғы йылдарҙа спортҡа ҙур иғтибар бүленә. Төрлө түңәрәктәр гөрләп эшләп тора, йәш спортсылар ярыштарҙа юғары урындар яулай. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тип бушҡа әйтмәгәндәр. Дөрөҫ юл, яҡшы үрнәк күрһәтелә балаларға, йәштәргә. Әле күптән түгел ҡаяға үрләү спорт секцияһына йөрөгән (скалолазание) ейәнем шатлығы менән бүлешеп шылтыратты - йорттарына яҡын ғына ерҙә "Октябрьский" үҫтереү һәм спорт үҙәге асылған. Быға тиклем яратҡан түңәрәгенә автобуста йәки таксиҙа ғына йөрөргә мөмкин булһа, хәҙер ҡул еткән ерҙә урынлашҡан үҙәккә йөрөүе уңайлы ла, ваҡытты ла күп алмай.

Өфө оҙаҡламай үҙенең 450 йыллыҡ матур юбилейын ҡаршылаясаҡ. Шуға күрә баш ҡалала алып барылған төҙөкләндереү, төҙөү, үҙгәртеү, яңыртыу һәм башҡа эштәр көндән-көн ҡыҙа бара. Ошо күңелле мәшәҡәттәр араһында Өфө урамдарындағы адрес алтаҡталарын яңыртыу ҙа буласағын уҡып шатландым. Дөрөҫөн әйткәндә, Өфөлә кәрәкле урамды һәм йортто табыуы еңел түгел, сөнки алтаҡталар бик бәләкәй һәм уны күреү өсөн йорт төбөнә үк барып торорға кәрәк. Йәки улар ҡайһы бер урында бөтөнләй юҡ. Шуға күрә әлеге яңыртыу был йәһәттән хәлдәрҙе көйләр, тип өмөт итәм. Иң мөһиме, адрес алтаҡталарындағы яҙыуҙарҙың республиканың ике дәүләт телендә лә булыуы һәм башҡортса дөрөҫ яҙылыуы. Был мәсьәләне тәрәнәтәйтеп һүҙ йөрөткәндә, әле булһа башҡорт телендәге яҙыуҙарҙың хаталы булыуын күреп йөрәк әрней. Бәләкәй ойошмаларҙа ғына түгел, ҙур магазин һәм хатта дәүләт учреждениеларында ла хаталы тәржемәләргә урын булыуы аптырата ла, көйөндөрә лә. Был йәһәттән хәлдәр яҡшырыр, тип өмөтләнәм.

**Марс НӘҘЕРШИН.**
**Күгәрсен районы.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Өфө ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейына әҙерләнеү айҡанлы алып барылған төҙөкләндереү барышында биналарға һәм юл саттарына ҡуйылған адрес алтаҡталарын күпләп алыштырыу күҙаллана. Дәүләт һатып алыуҙары сайтындағы мәғлүмәткә ярашлы, баш ҡалабыҙҙың тарихи урамдарына 4 төрлө алтаҡта ҡуйыласаҡ. Ҡаланың 686 урамына - 744, 22 юл саты өсөн 100 алтаҡта кәрәк буласаҡ. Бынан башҡа, 38 алтаҡта башҡорт телендә эшләнергә тейеш. Адрес алтаҡталарын яңыртыу эштәрен 2024 йылдың 31 июленә тиклем тамамлау талап ителә. Эштәр ҡала бюджетынан финанслана.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Йәмғиәтебеҙҙә бөгөн әхлаҡлылыҡ кимәле ниндәй дәрәжәлә һәм был юҫыҡта һеҙҙе борсоған йәки ҡыуандырған мәсьәләләр бармы?

***Хәкимйән ИБРАҺИМОВ, инженер, Өфө моторҙар производство берекмәһе хеҙмәткәре:*** Нимә ул әхлаҡ һәм әхлаҡлылыҡ - тәүҙә ҡыҫҡаса ғына шуны иҫкә төшөрәйек, сөнки был төшөнсәләр хаҡында яйлабыраҡ һәм иркенләп бик күп һөйләргә кәрәк булыр ине, юҡҡа ғына был турала ҡалын-ҡалын хеҙмәттәр, китаптар яҙылмаған бит, ә гәзит бите ҡыҫҡа һәм аныҡ һүҙҙе ярата. Ғилми әҙәбиәттә был төшөнсәгә ҡыҫҡа ғына бер һөйләм менән аңлатма бирелә: "Әхлаҡлылыҡ - ул кеше ҡылығының теге йәки был тәртип сиктәренә ярашлылығы йәки ярашлы булмауы". Быға өҫтәп, ябайыраҡ тел менән әхлаҡлылыҡты кеше ғәмәлендәге аңлы рәүештә башҡарылыусы тәртибе, намыҫ эше, тип әйтергә лә булалыр. Кешенең изгелек идеалына ынтылышында сағылыусы эске донъяһы һәм холоҡ сифаттары. Фәндә әхлаҡлылыҡ мораль һәм этика төшөнсәләренең синонимы тип тә ҡарала. Ә мин үҙемсә әхлаҡлылыҡты кеше ҡылығына баһа биреүсе намыҫ мыҫҡалы (үлсәүе) тип әйткем килә. Ә был намыҫ мыҫҡалы кешенең эске тәрбиә кимәлен, уның күңел ынтылышын билдәләп тора. Йәмғиәтебеҙҙәге әхлаҡлылыҡ кимәле, шулай итеп, тап ана шул кешеләр күңелендәге намыҫ дәрәжәһенә бәйле лә инде.

Тик ул үлсәүҙең ҡайһы яғы тосораҡ тарта бөгөнгө йәмғиәт тормошонда? Был һорауға яуап биреп, ғалимдар, социологтар бөгөнгө Рәсәй йәмғиәтенең әхлаҡи көрсөк кисереүен билдәләй һәм бының сәбәптәре итеп улар баҙар мөнәсәбәттәренән башлап, сит ил ҡиммәттәренә йүнәлеш алыуҙы, үҙебеҙҙең әхлаҡ нигеҙҙәрен һанламауҙы, күптәрҙең үҙ тормошонда мораль терәк булырҙай яҡшылыҡҡа, изгелеккә, тотороҡлолоҡҡа булған өмөттәрҙең юҡҡа сығыуын иҫәпләй. Бөгөн илдә генә түгел, ә халыҡ-ара кимәлдә барған идеялар һәм ҡиммәттәр бәрелеше, иҡтисади һәм сәйәси көрсөк, ыҙғыш һәм һуғыштар изгелек менән яуызлыҡ сиктәрен, кешелек өсөн тормош мәғәнәһенең асылын юҡҡа сығара, тотороҡлолоҡ менән әхлаҡлылыҡ нигеҙҙәрен ҡаҡшата.

Ә бит һәр бер йәмғиәт нигеҙендә әхлаҡлылыҡ принциптары ята. Тимәк, ул ҡаҡшай икән, йәмғиәткә лә хәүеф ҡурҡынысы янай, был айырыуса йәш быуын, балаларға ҡағыла. Шуның өсөн дә бит Рәсәй Президенты Владимир Путин һуңғы йылдарҙа йәмғиәтебеҙҙә әхлаҡлылыҡ нигеҙҙәрен нығытыу буйынса һәр бер сығышында һөйләй, йәштәр менән осрашыуҙар ошо темаға йүнәлтелә, белем биреү учреждениеларында әхлаҡ тәрбиәһен тергеҙеү бурысы ҡуйылды. Ниһайәт, йәмғиәтебеҙҙә рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм нығытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәре билдәләнде - 2022 йылдың 9 ноябрендә тап ошо хаҡта Указға ҡул ҡуйылды һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙең төп 17 йүнәлеше тылҡып бирелде. Юғары әхлаҡлылыҡ - тимәк, ул илһөйәрлек, Ватанға хеҙмәт итеү һәм уның яҙмышы өсөн яуаплылыҡ, коллективлыҡ тойғоһо, ғәҙеллек, изгелек, тарихыңды белеү, матур, татыу ғаиләле булыу.

Бөгөнгө көндә илебеҙ Көнбайыштың зарарлы йоғонтоһонан арынып, үҙенең суверенитеты өсөн көрәшә. Ошо маҡсаттарҙа алып барылған Махсус хәрби операция - ил халҡы өсөн лакмус ҡағыҙы ролен үтәне. Йәмғиәтебеҙҙәге әхлаҡлылыҡ кимәле бына шунда асыҡ күренде лә инде: шоу-бизнес әһелдәре, артистар сит илгә, күптәре Израилгә сығып китте, берәүҙәр МХО-нан ҡасты, ә кемдәрҙер үҙ теләктәре менән ил һаҡларға китте, тылдағылар ватан азатлығы өсөн көрәшеүселәргә гуманитар ярҙам ойошторҙо...

Күренеүенсә, урта һәм өлкән быуын вәкилдәре өсөн намыҫ, илһөйәрлек, фиҙаҡәрлек тойғолары ят түгел, улар - илгә ҡеүәт һәм терәк. Мине бөгөнгө йәштәребеҙҙең әхлаҡ кимәле борсой. Көн дә тиерлек эргәбеҙҙәге мәктәптең спорт майҙанында шөғөлләнәм. Бына шунда күренә лә инде бөгөнгө уҡыусыларҙың тәртип һәм "мәҙәнилек" кимәле. Иң тәүҙә уларҙың телмәр "байлығы" һушты ала: һәр һүҙ һайын эт ашамаҫ шаҡшы һүгенеүҙәренән, ихахайлап ҡысҡырып көлөүҙәренән ҡолаҡ япраҡтарың шиңерлек! Ошо көндәрҙә йәмәғәт урындарында, урамдарҙа Өфө үҫмерҙәренең төркөмдәргә тупланып, үтеп барыусы бер ғәйепһеҙ кешеләргә бәйләнеүҙәре, хатта туҡмап китеүҙәре хаҡында ҡот осмалы хәбәрҙәр таралды. Күрәһең, улар буш ваҡыттарын нисек үткәрергә белмәй, ә ниңә улар уҡыған мәктәп йә колледж уларҙы спорт залдарына йәлеп итмәй? Ниндәй мәктәптән улар?

Әйткәндәй, был бөгөнгө "сәнғәт әҫәре" - күптән түгел телеканалдарҙа, кинотеатрҙарҙа премьераһы булып үткән "Пацан һүҙе. Асфальттағы ҡан" фильмының йоғонтоһо булыуы ла бик ихтимал. Ә ниңә беҙҙең кино индустрияһы МХО ҡаһармандары хаҡында фильмдар төшөрмәй? Ҡасандыр, ҡайҙалыр булған урам һуғыштары хаҡындағы фильм ни өсөн бөгөн, йәмғиәтебеҙҙә тап әхлаҡлылыҡ принциптары хаҡында һүҙ алып барғанда күрһәтелә һәм ҡанһыҙлыҡ, аяуһыҙлыҡ күренештәрен пропагандалай?..

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы ташҡындан зыян күргән күрше Ырымбур өлкәһенә ярҙам итеү мәсьәләһен күтәрҙе. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Орскиҙа Ерекле һыу һаҡлағысында дамба йырылған. Ике мeңдән ашыу кеше өйҙәрен ҡалдырып китергә мәжбүр булған. Ырымбур өлкәһендә 3,9 мең самаһы өй һәм 8,7 мең йорт яны участкаһы һыу аҫтында ҡалған, 6,1 меңдән ашыу кеше эвакуацияланған.

✓Башҡортостанда 1 июндән етем балаларға кеҫә сығымдарына аҡса бирелә башлай. Тейешле закон Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының һуңғы ултырышында ҡабул ителде. 1 июндән 7-10 йәшлек балаларға айына 700 һум, ә өлкәнерәктәренә 1000 һум бирелә. Яңы закон финанс грамоталылығын тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Балаларҙы бәләкәй саҡтан уҡ аҡсаны дөрөҫ тоторға өйрәтергә кәрәк.

✓Башҡортостан Дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министрлығы "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам саралары реестры" дәүләт мәғлүмәт системаһы тураһында положениены раҫлау тураһында Хөкүмәт ҡарары проектын әҙерләп, йәмәғәтселеккә фекер алышыуға сығарҙы. Тәҡдимдәр 15 апрелгә тиклем ҡабул ителә. Һанлы үҫеш министрлығы был системаның технологик операторы, ә "Башҡортостан" махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға республика ярҙам үҙәге уның операторы булыр тип күҙ уңында тотола.

✓Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығы хәбәр итеүенсә, мессенджерҙарҙа крандан аҡҡан һыу аша холера йоҡтороу тураһында хәбәрҙәр килә. "Ялған хәбәргә Рәсәйҙең баш санитар табибының холераны иҫкәртеү буйынса өҫтәмә саралар тураһында ҡарары сәбәпсе булды. Үтә иғтибарлылар документтың ғәмәлдә түгеллеген билдәләй алды. Бындай имеш-мимештәр тәүге тапҡыр таралмай. Республика халҡын рәсми мәғлүмәттәргә генә ышанырға саҡырабыҙ", - тип белдерҙеләр ведомствола.

✓Белорет районында яҙғы ташҡынға бәйле Ноҡат, Арышпар һәм Айыс ауылдарына машина менән барыу ауырлашты. "Беҙ Инйәр ауыл советы башлығы менән бәйләнештә торабыҙ. Халыҡҡа әлегә был йүнәлештә юлға сыҡмаҫҡа кәңәш итәбеҙ", - тип белдерҙе район властары. Шулай уҡ Ғәбдүк һәм Зөйәк ауылдарында Инйәр йылғаһы боҙҙан әрселде. Район хакимиәтендә әйтеүҙәренсә, ваҡытында шартлатыу эштәрен башҡарыу боҙ тығынын булдырмаҫҡа мөмкинлек бирҙе.

✔ ***Шул уҡ ваҡытта тәртипле, айыҡ аҡыл менән йәшәүсе белемле йәштәребеҙ барлығын да беләм, күрәм һәм ҡыуанам. Йәш быуынға патриотик тәрбиә биреүгә иғтибар артыуы яҡшы.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Йәмғиәтебеҙҙә бөгөн әхлаҡлылыҡ кимәле ниндәй дәрәжәлә һәм был юҫыҡта һеҙҙе борсоған йәки ҡыуандырған мәсьәләләр бармы?*



***Ғәли ФӘХРЕТДИНОВ, Башҡортостандың мәғариф отличнигы, Баймаҡ ҡалаһы:*** Беҙ ауылда тыуып-үҫкән, совет осоронда йәшәгән һәм эшләгән быуын булараҡ, ирекһеҙҙән шул ваҡыттағы тормош рәүеше менән бөгөнгөнө сағыштырырырға ғәҙәтләнгәнбеҙ һәм был үҙе үк һеҙҙең һорауығыҙға яуап бирә һымаҡ. Эйе, ирекһеҙҙән шундай сағыштырыу яһарға тура килә, сөнки беҙҙең заман менән хәҙерге йәшәү рәүешендә генә түгел, кешеләрҙең бербереһенә, Тыуған илебеҙгә, тәүтөйәгебеҙгә, хеҙмәткә, ғаилә ҡиммәттәренә - бер һүҙ менән әйткәндә, беҙ күҙ ҡараһылай күреп һаҡлаған рухи-әхлаҡи ҡиммәттәребеҙгә мөнәсәбәттең күҙ алдында үҙгәреүе йыш ҡына ике быуындың айырмаһы ер менән күк араһылай тойолоп китә һымаҡ.

Ябай халыҡ беҙҙең осорҙа "Кеше кешегә - дуҫ, иптәш һәм туған" тигән әхлаҡ кодексы менән йәшәне һәм эшләне. Хеҙмәт коллективтарында берҙәмлек, ярышып эшләү, йәштәргә ярҙам ҡулы һуҙыу, уларға наставниктар беркетеү кеүек матур күренештәр бар ине һәм улар һәр ваҡыт ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Әлбиттә, беҙҙең замандарҙа бөтәһе лә ал да гөл булды, тип әйтмәйем. Юғары һәм урта власть эшелондарында шул уҡ коррупция ла, ришүәтселек тә, "ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ"тар ҙа булды һәм был күренештәр үҙенекен эшләй ине. Тимер-бетон системаға әйләнгән бындай әхлаҡһыҙлыҡ бөгөнгө осорҙа тағы ла ҡотороборaҡ үҫеште һәм киңерәк ҡолас йәйҙе.

Ләкин һуңғы осорҙа ваҡытында закон боҙоу юлы менән хосусилаштырылған предприятие һәм компаниялар хужаларының миллиардтарса күләмдә закондһыҙ байығыуы, килемдәрен сит ил банкыларына сығарыу, беҙгә дуҫ булмаған илдәрҙә күсемһеҙ милек һатып алыу кеүек әхлаҡһыҙлыҡ ҡына түгел, енәйәти күренештәргә ҡаршы Рәсәй Прокуратураһы һәм Тәфтиш комитеты тарафынан тикшеренеүҙәр алып барыла, ҡайһыларының акциялары тартып алына һәм шәхси предприятиеларҙы дәүләт ҡарамағына күсереү буйынса эштәр башланды. Мәҫәлән, бер-ике генә миҫал: ошо араларҙа ғына Силәбе металлургия комбинатының өс заводы төбәк Арбитраж суды тарафынан дәүләт милкенә ҡайтарылды, әле "Макфа" акционерҙар ойошмаһы акцияларын дәүләт бюджетына күсереү буйынса эштәр алып барыла. Бындай үҙгәреш- тәр ҡыуандыра, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта бөгөн белем биреү учреждениелары һәм ғаиләләр иңенә йәш быуынды юғары рухи-әхлаҡ нигеҙҙәрендә тәрбиәләү бурысы йөкмәтелә. Бына был бурысты атҡарыу, минеңсә, еңелдән булмаясаҡ, сөнки үҫмерҙәрҙең күпселеге Ватаныбыҙ тарихын насар белә, әхлаҡ нигеҙҙәре өлгөһө булған классик әҫәрҙәрҙе уҡымай, бөтөн иждиһаттарын виртуаль донъя селтәрҙәренә йүнәлткән. Шуға ҡарамаҫтан, улар аңында данлы тарихыбыҙҙы тергеҙеү, Ватаныбыҙға һөйөү тәрбиәләү буйынса эш башланды. Ватан тарихын балалар хәҙер яңыртылған, объектив факттар менән тулыландырылған һәм хәҡиҡәтте раҫлаусы дәреслектәрҙән өйрәнәсәк.

Ә беҙ уҡыған осорҙа илебеҙ тарихын сағылдырыусы ниндәй шәп фильмдар күрһәтелә ине! Бөйөк Ватан һуғышы хаҡында ғына ла илһөйәрлек миҫалы булырлыҡ бихисап шәп кинофильмдар күп ине. Ҡайҙа улар хәҙер, архив кәштәләрендә саңланып ятамы? Ниңә бөгөн балаларға шул фильмдарҙы күрһәтмәҫкә? Әйткәндәй, телевидениела ла, социаль селтәрҙәрҙә лә бөгөн гел генә насар хәбәрҙәр, атыш-үлтереш, һуғыш тураһында күрһәтелә. Кескәйҙәр өсөн йәнһүрәттәр ҙә аңлайышһыҙ тамашаға әйләнде: уның геройҙары ни кешегә, ни хайуанға оҡшамаған. Ә инде "Маша менән айыу" мультфильмы балаға нимә бирә? Элекке йәнһүрәттәрҙән йылылыҡ, изгелек нурҙары бөркөлә ине, улар бәләкәстәрҙе яҡшылыҡҡа өйрәтә, ярҙамсыл булырға, матур кешелек сифаттарына эйә булырға саҡыра ине...

Илдәге тыныcһыҙлыҡ, һуғыш һәм терактар йәштәр араһында кешелек сифаттарының юғалыуына, енәйәткә килтерә, еңел аҡсаға өмөт итеп йәшәүселәрҙе арттыра һәм был мине хәүефкә һала. Шул уҡ ваҡытта тәртипле, айыҡ аҡыл менән йәшәүсе белемле йәштәребеҙ барлығын да беләм, күрәм һәм ҡыуанам. Йәш быуынға патриотик тәрбиә биреүгә иғтибар артыуы яҡшы. Элек бит мәктәптәрҙә башланғыс хәрби әҙерлек (НВП) дәрестәре уҡытыла ине. Үҙгәртеп ҡороу осоронда уны юҡҡа сығарыуҙың касафатын бөгөн күрәбеҙ. Хеҙмәт тәрбиәһен кире ҡайтарыу ҙа файҙаға ғына буласаҡ, һәм был ҡыуандыра.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ДУҪ ҠӘҘЕРЕ ЯУҘА БЕЛЕНЕР

**Евроберләшмә Урсула менән Макрон, уларҙан ҡала НАТО альянсы етәкселәре йоғонтоһонан айный барғандай. Ыңғай фекер итеүсе, тыныслыҡ яҡлы һәм бөгөнгө ҡапма-ҡаршы донъяның айышына төшөнөп, Рәсәйгә теләктәшлек белдереүсе "шытымдар" яҙғы йылы ел иҫкәнен көткән, тиерһең.**

Еврокомиссияның үҙһүҙле, сиктән тыш ҡәтғи булып күренергә яратыусы, тәкәббер башлығы фон дер Ляйен ханым битлек аҫтындағы ысын йөҙөн күрһәтте. Әйтеүҙәренсә, уны хөкөм сараһы көтә, имеш. Ул Pfizer компанияһынан COVID-19 сиренән вакциналар һатып алыу менән бәйле ниндәйҙер коррупцияла ғәйепләнә. Әммә Урсуланың АҠШ йөҙөндә ҡеүәтле яҡлаусыһы бар, шул арҡала ул яуаплылыҡтан ҡотолоп ҡалған хәлдә лә, уны икенсе мөҙҙәткә Еврокомиссия башлығы вазифаһына күрһәтеүҙә ҡаршылыҡтар тыуыуы ихтимал, тиҙәр, сөнки был ханым үҙ партиялаштары тауыштарын да йыя алманы хатта.

Украина президенты Владимир Зеленскийҙың да власть башында ҡалыу-ҡалмау мәсьәләһе шик аҫтында тора. АҠШ Ҡораллы көстәренең элекке разведчигы Скотт Риттер анализлауынса, вәкәләтлек мөҙҙәте үткәндән һуң Зеленскийҙы тәхетенән бәреп төшөрөүҙәре бик ихтимал. Риттер фекеренә ҡарағанда, "Украина бөгөн - ғәмәлгә яраҡһыҙ иҡтисады һәм булыр-булмаҫ ғәскәре менән ғәмәлгә яраҡһыҙ ил булып ҡалды". Был хәлендә уға НАТО ла ярҙам итә алмаҫ, ахыры, тип өҫтәне ул.

Украинаның сит ил эштәре министры Дмитрий Кулебаның танырға мәжбүр булыуынса, Рәсәй авиабомбалары Украина Ҡораллы көстәре (ВСУ) позицияларын даими утҡа тота. Баш командующий Александр Сырский ҙа яңыраҡ Financial Times гәзитенә әңгәмәһендә Украина армияһының һуғыш яланындағы ауыр хәлен тасуирланы һәм Рәсәй снарядтарынан "ҡасыу мөмкин түгел" тип белдерҙе. Кешелек сифатын юғалтҡан Украина властары халыҡ-ара тыйыу һалынған химик ҡорал файҙаланыуға күсте һәм Клещеевкаға (ДНР) үлем хәүефе янаусы колбалар ташланы.

АҠШ-тан ярҙам көтөп, көтөк булған Зеленский ахырҙа Франция президенты Макрондың Украинаға ғәскәр ебәреү хаҡында нисә ай инде хәбәр һатҡан "идеяһы"на йәбеште: беҙгә хәрби инструкторҙар һәм механиктар кәрәк, ти ул. Ә беҙгә мәғлүм булыуынса, Макрондың был "идея"һына НАТО-ның ҡайһы бер ағза-илдәре, шул иҫәптән Германия һәм Францияның үҙенең сәйәси партиялары башлыҡтары ҡаршы сыҡты.

Шул арала Германияның элекке канцлеры Герхард Шредер илдең социал-демократик партияһына (СДПГ) Украиналағы конфликтты хәл итеү буйынса дипломатик варианттар эшләү менән әүҙемерәк шөғөлләнергә саҡырып мөрәжәғәт итә. "Нисек кенә булмаһын, беҙ был конфликттың хәл ителеүенә булышырға тейешбеҙ",- ти ул. Шредер фекеренсә, ошо йүнәлештә эш социал-демократик партияға үҙен һуғышҡа ҡаршы партия булараҡ күрһәтеп, абруйын ҡайтарырға ярҙам итәсәк.

Венгрия премьер-министры Виктор Орбанды ла беҙ Украинаға көнбайыш ҡоралы һәм ғәскәре ебәреүгә ҡаршы ныҡышмал көрәшсе итеп беләбеҙ. Уның фекерҙәше, Венгрия сит ил эштәре министры Петер Сийярто ошо көндәрҙә генә Словакия президенты һайлауҙарында еңеп сыҡҡан Словакия парламенты башлығы Петер Пеллегринины социаль селтәрҙә ҡотлап, уның фотоһүрәтен урынлаштырҙы. "Ҡотлайым, президент әфәнде! Суверенитет һәм тыныслыҡ яҡлы көстәр сафының тулыланыуы менән!"- тип яҙҙы ул. Һәм, ысынлап та, Пеллегрини белдереүенсә, Словакия һуғыш тарафында түгел, ә тыныслыҡ яғында ҡаласаҡ. "Бының өсөн мин бөтәһен дә эшләйәсәкмен",- тип белдерҙе НАТО илдәре араһындағы тағы бер тыныслыҡ утрауы башлығы.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән бер нисә мәктәпкә исем бирелде. Бөрө ҡалаһының 8-се мәктәбе Рәсәй Федерацияһы Геройы, Сүриәлә һәм Украинала махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Борис Дудконың исемен йөрөтә. Өфөнөң 42-се мәктәбенә 35 йыл - 2020 йылға тиклем ошо учреждениены етәкләгән Рауил Кәримовтың исеме бирелде. Белореттың 10-сы мәктәбе СССР Хәрби-һауа көстәре баш командующийының элекке урынбаҫары, ошо белем усағын тамамлаған Борис Корольковтың исемен алды. Өфөнөң 114-се мәғариф үҙәгенә Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 36 йыл ошо мәктәпкә етәкселек иткән Лев Пейсахович исеме бирелде.

✔4 апрелдән "ИрАэро" авиакомпанияһы Өфө аэропортынан Әзербайжандың баш ҡалаһы Баҡыға осоштарҙы тергеҙҙе. Каспий диңгеҙе буйындағы ошо ҙур ҡалаға Өфөнән рейстар һәр кеcаҙна Sukhoi Superjet 100 самолеттарында башҡарыла. Самолет урындағы ваҡыт буйынса иртәнге 11-ҙә һауаға күтәрелә. Юлға 2 сәғәт 40 минут ваҡыт талап ителә. Azerbaijan Airlines һәм Utair авиакомпаниялары ла Өфөнән Баҡыға осоштар программаһын туҡтатмай, тип белдерҙеләр баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтендә.

✔Ойоштороусылар "Рәхмәт-2024" акцияһына йомғаҡ яһаны. Башҡортостанда йәмғеһе 400-гә яҡын кеше телевизор, электр самокаты, кофемашина, телефон, яндекс-станция, робот-саң һурҙырғыс һәм башҡа ҡиммәтле бүләктәргә эйә булды. Саҡмағош ауылынан күп балалы Латиповтар ғаиләһе Өфөләге бер бүлмәле фатир хужаһы тип танылды. Икенсе суперприз - ике өрәңы "Нива" автомобиле аҫҡыстары Руслан Ковригин һәм Благовещендан хаҡлы ялдағы ханым Әлфиә Антипинаға тапшырылды.

✔Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин Дәүләт Думаһында Хөкүмәттең эше тураһында отчеты менән сығыш яһаған ваҡытта сентябрь айынан мәктәп һәм колледж директорҙарының тәрбиә буйынса кәңәшселәренә өҫтәп 5 мең һум аҡса түләнә башлауын әйтте. Власть органы рәйесе билдәләүенсә, хәҙер уҡытыусылар ай һайын класс етәкселеге өсөн 5 мең һум аҡса ала. "Марттан 100 меңдән аҙыраҡ кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙың уҡытыусылары өсөн түләү ике тапҡырға арттырыла", - тине Мишустин.

ҠЫҪҠАСА

## ӘРМЕГӘ КИТӘ ЕГЕТТӘР

**1 апрелдә Рәсәйҙә яҙғы хәрби хеҙмәткә саҡырыу башланды. Башҡортостандан 5,5 меңдән ашыу егет хеҙмәткә алынасаҡ.** Төбәк хәрби комиссары, полковник Михаил Блажевич белдереүенсә, призывниктар махсус хәрби операция барған урындарға ебәрелмәйәсәк, улар төрлө хәрби частарҙа хеҙмәт итәсәк. Унан алда егеттәр әҙерлек үтәсәк, заманса хәрби техниканы өйрәнәсәк һәм хәрби-иҫәп белгесе һөнәрен үҙләштерәсәк. Республиканың йыйылыу пунктынан ғәскәрҙәргә оҙатыу апрель аҙағына планлаштырылған. Хәрби хеҙмәткә алыныусыларҙың барыһы ла хәрби кейем, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәкле әйберҙәр менән тәьмин ителәсәк. Илдә ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан хәрби хеҙмәткә саҡырылыу 30 йәшкә тиклем арттырылды. Хәрби иҫәптә торған һәм ағымдағы йылдың 1 ғинуарына 27 йәше тулған граждандар хәрби комиссариаттар тарафынан хәрби иҫәптән төшөрөлөп, запасҡа ебәрелгән. Шул уҡ ваҡытта 27 йәше тулған һәр кем теләге буйынса үҙенең конституцион һәм тыуған илен һаҡлау бурысын үтәргә мөмкинлек алған.

✓ **Башҡортостанда һуғыш балаларына бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр күләмен арттырырға ниәтләйҙәр.** Киләһе йылда, ил Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләгән ваҡытта, бюджетҡа тейешле суммалар һалына, тип хәбәр итте республика Премьер-министры Андрей Назаров, 7-се саҡырылыш Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары алдында Хөкүмәттең эше тураһында йыллыҡ отчет менән сығыш яһағанда. Уның билдәләүенсә, быға тиклем бер тапҡыр бирелә торған түләү 1 мең һум ине. Инфляцияны иҫәпкә алып, был сумма мөһимлеген юғалтты. "Һуғыш балалары киләһе йылда юбилейлы, еңеү йылын финанс яҡтан тойорға тейеш. Хөкүмәт көсөн шуға йүнәлтә", - тине Назаров. Башҡортостанда һуғыш балалары тураһында республика законы 2021 йылда ҡабул ителде.

✓ **Башҡортостанда республика тарихында иң юғары ғүмер оҙайлығына өлгәшелде. Былтыр ул 73,2 йәш тәшкил итте.** "Әммә быныһы менән генә туҡтап ҡалмайбыҙ, ил Президенты ҡуйған маҡсатҡа табан ынтылыусы барабыҙ. 2030 йылға уртаса ғүмер оҙайлығын 78 йәшкә еткереү бурысы тора, - тип билдәләне Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров Дәүләт Йыйылышында республика Хөкүмәтенең йыллыҡ отчеты менән сығышында. Уның һүҙҙәренсә, шуға бәйле Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереүгә айырыуса иғтибар бүленә. Ошо йүнәлешә финанс йәһәтенән тәьмин итеү 2018 йыл менән сағыштырғанда 1,5 тапҡырҙан ашыуға артҡан. Үҙған йыл йомғаҡтары буйынса ғына был сумма яҡынса 107 миллиард һум тәшкил иткән. Бөгөн республика халҡының 70 проценттан ашыуы профилактик тикшереүҙәрҙән барлыҡ төрҙәре менән тәьмин ителгән. Мәҫәлән, "Сәнәғәт диспансеризацияһы" проектын ғәмәлгә ашырыу башланды, уны производство урынында үтергә мөмкин.

КӨН ВАҠИҒАҺЫ

# РӘСӘЙ ПРЕЗИДЕНТЫ ХУПЛАНЫ!

**Был аҙнала Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Кремлдә Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашты. Ил Президенты менән әңгәмә республикала тормошҡа ашырылған инвестиция проекттарынан башланды. "Хөкүмәт линияһы буйынса булған күп кенә программаларҙа ҡатнашырға тырышабыҙ. Бөгөн Башҡортостан инвесторҙар йәлеп итеү йәһәтенән алдынғы урындарҙа - беҙҙә ер ҙә, хеҙмәт ресурстары ла бар, шуға ла кешеләр ҙә, предприятиелар ҙа күпләп килә", - тине Радий Фәрит улы.**



● Республика Башлығы билдәләүенсә, инвестициялар, тәү сиратта, нефтехимия өлкәһендә. "Күп кенә проекттар өҫтөндә әлеге мәлдә эш бара. Беҙҙең 5 социаль-иҡтисади зонабыҙ бар, эре предприятиеларға ғына түгел, бәләкәйҙәренә лә мөмкинлектәр бирәбеҙ. Республикала хәҙерге көндә инвестор - мөһим кеше, сөнки уның артынан аҡса, эш урындары һәм, дөйөм алғанда, иҡтисад үҫеше килә", - тип билдәләне Р. Хәбиров.

● Осрашыу барышында махсус хәрби операцияға ярҙам күрһәтеү мәсьәләһе лә ситтә ҡалманы. "Яугирҙарға ярҙам күрһәтеү - төп урында, яу эсендә Башҡортостан егеттәре күп кенә. Махсус хәрби операция башланғас та, ирекмәндәр отрядтары төҙөү тураһында тәҡдимдәр күп булыу сәбәпле, Шайморатов менән Достовалов исемендәге ирекмәндәр батальондары барлыҡҡа килде. Былтыр Оборона министрлығы менән бергә хеҙмәттәшлек итеү һөҙөмтәһендә "Башҡортостан" полкы төҙөлдө. Был полк башта Кременная йүнәлешендә бәрелештә үҙен батырҙарса тотоуы менән дан ҡаҙанды, һуңынан дошман оборонаһын йырып сығыуҙа ҡатнашты". Радий Хәбиров Донецк Халыҡ Республикаһында хәрби бурыс үтәүсе Росгвардияның ике батальоны тураһында ла һөйләне. "Батальондар тулыһынса комплектланып китте, хатта хәрби бронировкалы техника ла алдыҡ. Беҙҙең мобилизацияланыусыларыбыҙ ҙа, Оборона министрлығы менән контракт төҙөүселәр ҙә, ирекмәндәр ҙә күп. Уларҙың ғаиләләре беҙҙең ҡарамаҡта. Республикала аҡсалата ярҙам күрһәтеүсе 39 сара ҡаралған. 2 йыл эсендә 7 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленде", - тине әңгәмә барышында Радий Фәрит улы. Ул шулай уҡ Луганск Халыҡ Республикаһы территорияһында республика шефлыҡ алып барған Красный Луч тураһында ла бәйән итте.

Төбәк иҡтисады үҫеше тураһында әйтеп, Радий Хәбиров федераль линия буйынса килгән бөтөн ярҙамды әүҙем ҡулланыу тураһында һөйләне.

Башҡортостан аграр төбәк тә. "Былтыр өлкәне техник йәһәттән модернизациялау өсөн 56 миллиард һум һалынды. Ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүселәрҙе техника һатып алырға өндәйбеҙ. "Росагролизинг" ярҙамында башлыса Белоруссия техникаһы һатып алына", - тине республика Башлығы.

● Владимир Путин республикала торлаҡ төҙөлөшө үҫеүен дә билдәләне. "Һеҙҙең ҡушыуығыҙ буйынса 2030 йылға 4 миллион квадрат метр төҙөргә тейешбеҙ, әммә республика бөгөн уҡ 3 миллион 300 мең квадратҡа етте. Алданған өлөшсөләргә ярҙам өсөн айырыуса рәхмәт. 10 мең кеше ошо хәлдә ҡалғайны. 130 объекттың яртыһын төҙөп бөттөк, өлөшсөләрҙең яртыһына аҡсалата түләнек", - тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы.

● Тышҡы баҙар партнерҙары - Беларусь һәм Ҡаҙағстан республикалары тураһында һүҙ булды. "Рәсәй Минпромы менән Башҡортостан-Беларусь сәнәғәт кластеры формалаштырабыҙ. 9 ай эсендә орлоҡ киптерә торған машиналар төҙөүсе предприятие төҙөнөк. Ошо уҡ компания ярҙамында йыл аҙағында экскаваторҙар, грейдерҙар, тейәүсе машиналар, 40 тонналыҡ бульдозерҙар сығара башлаясаҡбыҙ. Ҡаҙағстан менән дә яҡшы хеҙмәттәшлек булдырылды. Өфөлә быйыл "Рәсәй-Ҡаҙағстан" XX Төбәк-ара форум үтәсәк. Унда һеҙҙең ҡатнашыуығыҙҙы ла көтәбеҙ".

● Республикала социаль-иҡтисади күрһәткестәр ҙә яҡшы. "Үткән йылда уртаса ғүмер оҙайлығы 73,17 йәшкә етте. Йөрәк сирҙәре, онкология, тышҡы факторҙар, сабыйҙар үлеме буйынса күрһәткестәр түбәнәйҙе. Тыуым кимәлен күтәрә алмайбыҙ, әммә күп балалы ғаиләләр һаны арта. Булған матди сараларҙы һөҙөмтәле эшләй", - тине Радий Фәрит улы. Ошо темаға ҡушылып, Владимир Путин тиҙ ярҙам табиптары һаныһына иғтибар итергә ҡушты.

● Радий Хәбиров ил Президентына Капиталь ремонт программаһына балалар баҡсалары һәм колледждар темаһын индергән өсөн рәхмәтен белдерҙе. "Колледждар мөһим урында буласаҡ, сөнки иҡтисадҡа хеҙмәт итергә теләгән һөнәр эйәләренә мохтажлыҡ бар. Шул уҡ Өфө моторҙар төҙөү берләшмәһенә 2 меңгә яҡын хеҙмәткәр кәрәк. Шуға ла колледждарға ярҙам итеү программаһын ҡабул итеп, йыл һайын ярты миллиард бүлә инек. Хәҙер федераль саралар ярҙамында ятаҡтарҙы, оҫтаханаларҙы, уҡыу корпустарын тәртипкә килтерергә мөмкин буласаҡ". Республикала юғары белем биреүгә лә иғтибар бүленә, тип, Радий Хәбиров кампус төҙөлөшө хаҡында ла мәғлүмәт бирҙе.

● Һөйләшеү аҙағында Башҡортостан Башлығы Рәсәй Президенты Владимир Путинға пландарҙы тормошҡа ашырыу өсөн республикала артабан да эшләргә ынтыла белдереүен һораны. Владимир Путин Радий Фәрит улының 2024 йылдың сентябрендә үтәсәк Башҡортостан Башлығы һайлауҙарында ҡатнашырға теләүен хупланы. "Мин Һеҙгә теләктәшлек белдерәм, ә һайлау халыҡ иркендә. Улар менән күберәк аралашырға, уларҙы тыңларға кәрәк. Дөйөм алғанда, һөҙөмтәләр яҡшы, пландар ҙа күп. Шуға ла уңыштар теләйем", - тине Владимир Путин осрашыуҙы йомғаҡлап.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев булып үткән оператив кәңәшмәлә Ырымбур өлкәһе Орск ҡалаһын һәм башҡа тораҡ пункттарҙы һыу баҫыу айҡанлы ярҙам акцияһы ойошторолоуы хаҡында мәғлүмәт бирҙе. "Өфөнөң барса районлдарында гуманитар ярҙам маҡсатында әйбер, аҙыҡ-түлек һ.б кәрәк-яраҡтар йыйыу башланды, төнгө сәғәт 12-гә гуманитар йөк тейәлгән машиналар Ырымбурға барып етте. Беҙ Ырымбурҙағы коллегаларыбыҙ менән бәйләнештәбеҙ, бәләгә тарыған үҙ кешеләребеҙгә артабан да ярҙам итеп торасаҡбыҙ", - тине хакимиәт башлығы.

✓Өфө ҡалаһы хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә был юлы Башҡортостан буйынса эске эштәр министры Александр Прядко ҡатнашты. Ул Өфө йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге директоры, отставкалағы полиция генерал-майоры Александр Овчинниковҡа Рәсәй Эске эштәр министрлығының "Хоҡуҡи тәртипте нығытыуға индергән өлөшө өсөн" миҙалын тапшырҙы. Билдәләнеүенсә, Александр Овчинников етәкләгән йәмәғәт ойошмаһы баш ҡалабыҙҙа йәмәғәт тәртибен тәьмин итеү һәм хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү йәһәтенән хоҡуҡ һаҡлау органдарына һәр даим булышлыҡ итә.

✓Өфөлә юғалған балаларҙы эҙләү эштәре менән шөғөлләнгән "ЛизаАлерт" отряды ирекмәндәре яңы урынға күсеүе тураһында белдерҙе. Хәҙер эҙләү штабы Шафиев урамы, 12/2 йортонда урынлашҡан. Отрядтың тәүлек әйләнәһенә эшләгән ҡыҙыу линияһы: 8 (800) 700-54-52 (буштай) йәки 112. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы эҙләү штабына килеп, 30 мартта Өфө ҡалаһында юғалған уҡыусылар Павел Паличев менән Дамир Әҙеһәмовтың ата-әсәләре менән аралашты. Радий Хәбиров шулай уҡ эштәрҙе туҡтатмаҫҡа ҡушты.

✓Өфө хакимиәте баш ҡаланың Калинин районындағы Ильич скверында урынлашҡан фонтанды реконструкциялау өсөн подрядсы эҙләй. Конкурс документацияһына ярашлы, эштәр 2025 йылдың 1 июненә тиклем тамамланырға тейеш. Ошо ваҡыт эсендә башҡарыусы алдында фонтандың бетон табағын реконструкциялау, мозаика түшәү, коммуникациялар һуҙыу һәм башҡа бурыстар тора. 1975 йылда Химик" мәҙәниәт һарайы алдында төҙөлгән фонтан совет модернизмы стилендә биҙәлгән. Ул 2000 йылдарҙан алып эшләмәй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Әгәр ҙә теләһәгеҙ, был минең һайлау алды вәғәҙәм тип ҡабул итегеҙ - киләһе мөҙҙәттә мәсетте төҙөп бөтөргә кәрәк. Әлбиттә, ниндәйҙер ҡатмарлыҡтар бар, тик дөйөм алғанда, конструкция үҙе лә, көмбәҙ ҙә яҡшы торошта.*



МӨҺИМ ХӘБӘР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсетендә төҙөлөштө тамамлауға арналған эшлекле осрашыу үткәрҙе. Хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары Алан Марзаев бинаны тотоп тороусы һәм һаҡлаусы конструкцияларҙың, шулай уҡ инженер селтәрҙәренә үткәрелгән тикшереүҙәрҙең һөҙөмтәһе менән таныштырҙы.**

# ИЗГЕ ЭШ ТУРАҺЫНДА...

## Изге байрам көндө әйтелде



Унының әйтеүе буйынса, монолит конструкциялар торошо тейешле кимәлдә. Мәсеттең үҙәк көмбәҙе тикшерелгән, ағастан яһалған япмалар алыштырылған. Төҙөүселәр хәҙер быға тиклем манараларҙың көмбәҙендә үткәрелгән эштәрҙе үҙәк көмбәҙҙә лә башҡарырға тура киләсәк. Ошо уҡ этапта ҡыйыҡтан аҡҡан һыу ағымын йәйлаусы ҡоролмаларҙы ҡарап, манараларҙы таш менән ҡаплап ҡуйырға кәрәк буласаҡ. 2024 йылдың икенсе кварталында фасад эштәре йәйләп тамамланасаҡ тип көтөлә.

Алан Марзаев билдәләүенсә, төҙөлөштө тамамлау өсөн этаплы план ҡаралған, подрядсы ойошма билдәләнгән. Шулай уҡ мәсетте биҙәү өсөн Грецияның "Тассос" яткылығынан мәрмәр килтереү өсөн халыҡ-ара контракт төҙөлгән. Әлегә уның 75 проценты әҙер һәм мәрмәр изделиелар 1-2 ай эсендә республикаға килеп етәсәк.

Республика Башлығы төҙөлөш эштәре планын ентекләп өйрәнәсәген белдерҙе һәм Башҡортостан Мосолмандары диниә назараты вәкилдәре, инвесторҙар менән мәсет территорияһын төҙөкләндереү буйынса мәсьәләләрҙе эшлекле ултырышта тикшерергә тәҡдим итте. "Беҙ хәҙер мәсет менән байтаҡтан шөғөлләнәбеҙ. Әгәр ҙә теләһәгеҙ, был минең һайлау алды вәғәҙәм тип ҡабул итегеҙ - киләһе мөҙҙәттә мәсетте төҙөп бөтөргә кәрәк. Әлегә химик һәм төҙөлөш анализдары башҡарылған. Әлбиттә, ниндәйҙер ҡатмарлыҡтар бар, тик дөйөм алғанда, конструкция үҙе лә, көмбәҙ ҙә яҡшы торошта. Проект-смета документацияһын да яңынан тергеҙҙек, ул экспертиза үтте һәм был объектты төҙөргә рөхсәт биргән юридик документ бар. Әле төҙөүселәр эште башланы. Биҙәү эштәрендә ҡулланылған бөтөн материалдар сит илдән, көпләү ташы - Грециянан. Материалдар килеп етеү менән тыштан биҙәү эштәре тағы ла әүҙемләшәсәк. Тәҙрәләр талаптарға яуап бирмәй, шуға ла уларҙы тулыһынса алыштырыу ҡаралған. Быйыл 700 миллиондан миллиард һумға тиклем сығымдар һалыу ҡаралған. Төҙөлөштө тамамлауҙың көнөн әйтә алмайым, әлегә бурыс - эшлектән сыҡҡан бөтөн нәмәне алып ташлап, фасадты төҙөкләндереү эштәрен атҡарыу", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы шулай уҡ Ураҙа байрамын яҡшы кәйефтә ҡаршылауы тураһында ла әйтте. "Беҙ мәсеткә тап ошо байрамда килергә булдыҡ, нисектер был эште ошо изге көндә башлау яҡшыраҡ кеүек. Беҙ бер ҡасан да үҙ һүҙебеҙҙән баш тартмайбыҙ, әйткәнбеҙ икән, эшләйәсәкбеҙ. Әммә изге эш изге көндә башланһын. Шуға ла кәйефем яҡшы", - тип билдәләне Радий Фәрит улы. Был осрашыуға тиклем республика Башлығы "Ләлә-Тюльпан" мәсетендә байрам намаҙында ҡатнашты.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсет төҙөлөшө 2006 йылда башланып, 2012 йылға тиклем төрлө инвесторҙар тарафынан дауам ителгәйне. 2012 йылда БР Мосолмандары диниә назараты "Урал" хәйриә фондынан ярҙам һорай, әммә инвестор һәм назарат етәкселеге араһында финанс-хужалыҡ мәсьәләләрендә аңлашылмаусанлыҡтар тыуып, 2016 йылдың йәйендә финанслау ҙа, һөҙөмтәлә төҙөлөш эштәре лә туҡтап ҡалғайны. Республика капиталь төҙөлөш идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2021 йыл аҙағына "Әр-Рәхим" мәсете төҙөлөшө сиктәрендә барлығы 1,8 миллиард һум аҡса тотонолған. 2023 йылдың сентябрендә Радий Хәбиров төҙөлөштө ҡабаттан тергеҙеү буйынса тәүге ултырыш уҙғарҙы.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## 9 МАЙ. ЕҢЕҮ ПАРАДЫ.

**Өфөлә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 79 йыллығына арналған традицион парад уҙғарыласаҡ.**

Һәр ваҡыттағыса, парад Октябрь проспектында, Ленин исемендәге майҙан алдында уҙасаҡ. Ошо байрам сараһын ойоштороу мәсьәләләре хоҡуҡ һаҡлау органдары, тейешле министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре ҡатнашлығында айырым кәңәшмәлә ҡаралды. Башҡортостан Хөкүмәтенең вице-премьеры Ирек Сәғитов белдереүенсә, парад барышында хәрбиҙәр, башҡарма властың федераль көс органдарында хеҙмәт итеүселәр, йәш армеецтар, кадеттар, уҡыу йорттары курсанттары, шулай уҡ боевой хәрәкәттәр һәм хәрби хеҙмәт ветерандары тантаналы марш менән үтәсәк. Быйыл парадта беренсе тапҡыр Башҡортостан буйынса яҙа үтәү Федераль хеҙмәте идаралығының ҡатын-ҡыҙ хеҙмәткәрҙәре ҡатнашасаҡ. Парадта барлығы 1567 кешенән торған 22 расчет һәм берләштерелгән тынлы оркестр ҡатнашыуы көҙаллана. Парад расчеттары составына хәрби техника ла индерелгән, шулай уҡ ретро һәм башҡа хәрби техника күргәҙмәһе ойошторола.

Башҡортостан Республикаһы Башлығының күрһәтмәһенә ярашлы, парадта ҡатнашыусы расчеттар араһында призлы урындар алыусыларҙы билдәләү өсөн баһалама комиссияһы булдырылған, еңеүсе расчетҡа БР Башлығы Кубогы һәм I дәрәжә диплом, икенсе-өсөнсө урын алғандарға II һәм III дәрәжә дипломдар тапшырыласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ЕҢЕҮ МЕНӘН!



**Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы комиссияһы Иждади юғары уҡыу йорттары һәм Алыҫ Көнсығыш буйынса ярҙамсы комиссиялар менән берлектә "Приоритет-2030"дәүләт программаһына кандидаттар һайлап алыуға йомғаҡ яһаны.**

Кандидат статусын алыуға дәғүә иткән 67 ҡатнашыусынан илдең 20 төбәгенән 24 юғары уҡыу йорто һайлап алынды. Башҡортостандан "Өҫтөнлөк-2030" кандидаттар төркөмөнә республиканың алдынғы юғары уҡыу йорттарының береһе - Башҡортостан дәүләт аграр университеты инде! Программаны университет ректоры Илдар Ғәбитов тәҡдим итте.

Юғары уҡыу йорто өс стратегик проектты тормошҡа ашырырға ниәтләй. Тулы цикллы ғилми-белем биреү мөхитен һәм унын Евразия кинлегендә тиҙләтелгән селекция һәм конкуренцияға һәләтле ауыл хужалығы культуралары сорттарын булдырыу, импортты алыштырыу һәм илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләләрен хәл итеү - беренсе проект.

Икенсе стратегик проект "Хайуандарҙы селекциялауҙа һәм генотиплауҙа һанлы трансформация" тип атала. Өсөнсө стратпроекттың маҡсаты - уҡыусыларҙың һанлы компетенцияларын һәм әүҙем граждандыҡ позицияһын формалаштырып, ауыл хужалығы белемен биреүҙе үҙгәртеү, әүҙем граждандыҡ позицияһын формалаштырыу, һөнәрилекте арттырыу.

"Юғары уҡыу йорттарының "Өҫтөнлөк-2030" программаһында ҡатнашыуының төп шарттарының береһе - индустриаль партнерҙар менән көйләнгән эш һәм төбәктең ҡатнашыуы", - тигәйне Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы етәксеһе Валерий Фальков. Проектты тәҡдим итеү һәм яҡлау барышында Башҡортостан дәүләт аграр университеты командаһы тап ошоно иҫбатлай алды ла инде. "Өҫтөнлөк - 2030" программаһы - университетҡа партнерҙарҙың мөһим дәүләт бурыстарын ышанып тапшырыуын күрһәтә. Ул уҡыу йортон үҫтереүҙә ҙур роль уйнаясаҡ, яңы стандарттар булдырыу мөмкинлеген бирәсәк.

## ҮҘЕБЕҘ ТАҘАРТАЙЫҠ!

**Өфө халҡы март аҙағында уҡ ҡала биләмәләрендә тәртип урынлаштыра башланы - аҙна һайын санитар йомалар үткәрелә. Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәренә ярашлы, санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү айлығы 1 апрелдән 26 майға тиклем бара. Өс дөйөм ҡала өмәһе ойошторола. Беренсеһе 6 апрелдә булды.**

"Хәҙер тәү сираттағы бурыстар - ҡалған ҡарҙы таратыу һәм сүп-сарҙы йыйып алыу. Өмәләр ваҡытында ҡаланың ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигоны барлыҡ предприятиеларҙан һәм ойошмаларҙан сүп-сарҙы бушлай ҡабул итәсәк", - тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтендә. Билдәләнеүенсә, төрлө объекттарҙы ҡуртымға алыусылар һәм милекселәр эргә-тирәләге биләмәләрҙе, бигерәк тә "ҡыҙыл һыҙат"тағы участкаларҙы таҙа тоторға бурыслы. "Һәр кем үҙ ихатаһында, яҡындағы урамда, скверҙа өмәләргә ҡушыла ала. Халыҡты, эшҡыуарҙарҙы ошо эштән ситтә ҡалмаҫҡа саҡырабыҙ. Күмәк көс менән ҡалабыҙҙы, урамдарҙы һәм ихаталарҙы тағы ла күркәмерәк итә алабыҙ", - тип белдерҙеләр Өфө мэрияһында.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Һаҙ еләге

Һаҙ еләге, йәки русса "морошка" күп йыллыҡ үҫемлек. Май-июнь айында аҡ сәскә ата, ҡурай еләгенә оҡшаған һарғылт-ҡыҙыл емеше июль-августа өлгәрә. Һаҙ еләгендә аскорбин кислотаһы, ҡуҙәнәклек, шәкәрҙәр күп. Фитонцидтар, пектин һәм дуплау матдәләре, органик кислоталар, минераль матдәләр - магний, кальций, тимер, кремний, фосфор һ.б. бар. Дауаланғанда бешкән емеше һәм сәскә атҡанда йыйылған япрағы ҡулланыла. Зәңгегә ҡаршы, иммунитетты яҡшыртыу, ҡанды туҡтатыу, елһенеүҙе баҫыу, бөйөл ҡыуҙырыу, бактерияларға ҡаршы сифаттарға эйә. Әммә ашҡаҙан һәм бөйән эсәк сей яраһы булғанда һаҙ еләген ҡулланыу ҡәтғи тыйыла.

❖ Тире яман шешенән һаҙ еләгенең һутын файҙалы. Емешен ашарға, уны иҙеп тиренең зыян күргән урынына һөртергә лә була. Һутын әҙерләү өсөн емеште иләктән үткәреп, 2:1 нисбәтендә шәкәр ҡушырға. Һаҙ еләгенең һутын подагра, бөйөрҙәң ҡайһы бер ауырыуҙары булғанда ҡулланмаҫҡа: аллергия ҡалҡыуы ихтимал.

❖ Зәңге, нефрит ауырыуҙарынан көнөнә 1 стакан һаҙ еләге һутын эсергә.

❖ Цистит булғанда 1 ҡалаҡ ваҡланған һаҙ еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Йүнәлгәнсе көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан эсергә.

### Мандарин

❖ Бронхиттан, уҡшытҡанда 2 мандариндың киптерелгән ҡабығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябып 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был ҡытай халыҡ дауаһында ҡулланылған ысул.

❖ Йүтәлләгәндә 50 грамм мандарин ҡабығына 1 стакан араҡы ҡойорға. 1 аҙна ҡараңғы урында төнәтергә. Йүткеректе йомшартыу өсөн ашағандан һуң 1 ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Көсөргән, дала бөркөтө**

**(Могильник)**



Көсөргәндең русса атамаһы курган, ҡәберлектәр кеүек юғарылыҡҡа ҡунырға яратҡаны өсөн бирелгән. Ул бөркөттәр араһында төҫө буйынса иң ҡараһы. Яурынында ғына аҡһыл таптар - "эполет"тар булыуы ихтимал, шулай уҡ башында аҡһыл "башлыҡ". Әммә 4 йәшкә тиклемге йәш көсөргәндең түшендә аҡһыл-ҡыҙғылт арҡыры һыҙыҡтары була. Суҡышы, тырнаҡтары ҡара, тәпәйҙәре, суҡышы тирәһендәге тиреһе һәм күҙҙәре - һары.

Бөркөткә ҡарағанда бәләкәйерәк, кәүҙәһенең оҙонлоғо 72-84 см, ҡанаты йәйелгән килеш 200 см.

Башҡортостанда Хәйбулла районында, Ҡаҫмарт йылғаһы үрендә (Йылайыр платоһы), Башҡортостан ҡурсаулығында, Көйөргәҙе районында, Ирәмәлдә бар. Көндөҙгө йәшәү рәүеше алып бара, япраҡлы ағастар үҫкән һәм ҡатнаш урмандарҙың киң яландарында үҙенә аҙыҡ таба. Вағыраҡ йәнлек, ҡоштар менән туҡлана. Ҡор, сел, торна, йорт ҡаҙы, күгәрсен, һайыҫҡан, шулай уҡ кеҫәртке һәм йыланға һөжүм итә. Емтек тә ашай.

4 йәшлек көсөргән ҡышлаған урындарынан уҡ үҙенә пар һайлап, бергәләп оҫоп ҡайталар. Ике аҙна дауамында оя ҡороп, йәки иҫкеһен йүнәтеп алалар. Ояны 2 метрҙан алып 25 метр бейеклеккә тиклем ҡороуҙары ихтимал. Апрелдә инә ҡош 2, һирәгерәк 1 йәки 3 йомортҡа һала һәм 43-45 көн дауамында баҫа, уға ата ҡош та ярҙам итә. Көсөргәндәр бик хәстәрлекле ата-әсә, ояла бәпкәләрен ҡалдырып китергә тура килгәндә уларҙы йәшел ботаҡтар менән ҡаплайҙар. Уларҙы эҫенән һаҡлау өсөн дә ошо ысул ҡулланыла. 2 айлыҡ бәпкә оса башлай. Ошо мәлдән улар тәрлә урындарға күсенеп йөрөйҙәр. Сентябрь-октябрҙә ҡышлай торған ерҙәренә осоп китәләр.

Уларҙың һирәгәйә барыуы урмандарҙы ауыһыҙ ҡырыу менән бәйле. Шуға ла яҡын киләсәктә көсөргәндең артыуына өмөт итергә ярамай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

**Эйе, кешене көн һайын, аҙым һайын хәүеф-хәтәр һағалай. Бөгөн генә түгел, һәр ваҡыт, һәр заманда йәнәшәлә йөшәй төрлө бәлә-ҡазалар. Балаларҙы элек атай-әсәйҙәр: "Эт тешләмәһен, машинанан тапалып ҡуйма, яуыз әҙәмдәргә тарыма",- тип иҫкәртеп кенә тора тине. Был хәүефтәргә бөгөн тағы ла хәтәрерәктәре өҫтәлде: интернет яман эштәргә саҡырыусылар менән тулды, мутлашыусылар кемдәрҙеңдер хәләл көс менән тапҡан аҡсаһын үҙләштерә, һауабыҙҙа пилотһыҙ осоу аппараттары үлем ташый һ.б. Был шарттарҙа хоҡуҡ һаҡлау органдарына ғына түгел, атай-әсәйҙәргә лә, уҡытыусыларға ла, һәр ябай гражданға абай булыу, үҙең белгәнде башҡаларға ла аңлатыу, иҫкәртеү мөһим**

# ҺАҠЛАНҒАНДАР ИМЕН ҠАЛЫР

## Балаларға аңлатығыҙ!

**Рәсәй Эске эштәр министрлығы провокаторҙарҙың граждандарҙы социаль селтәрҙәрҙә һәм мессенджерҙарҙа террористик эшмәкәрлеккә һәм башҡа етди енәйәттәргә әтәрә алыуы тураһында иҫкәртә. Был айырыуса үҫмерҙәр һәм йәштәргә ҡағыла.**

"Йәш граждандарҙы экстремистик һәм террористик эшмәкәрлеккә йәлеп итеү өсөн енәйәтселәр социаль селтәрҙәргә һәм мессенджерҙарға таяна, уларҙың төп аудиторияһы - йәштәр. Интернет селтәре провокаторҙарға үҫмерҙәрҙең мәғлүмәтте еңел йыйырға һәм шәхси биттәрен анализларға мөмкинлек бирә. Улар айырыуса үҙенең сәйәси, дини һәм башҡа ҡараштарын әүҙем белдергән, әммә аныҡ ҡына позицияһы булмағандарҙы һайлай", - тиелә полицияның рәсми белдереүендә.

Рәсәй Эске эштәр министрлығы балаларҙы ошондай зарарлы йоғонтонан һаҡларға ярҙам итеүсе бер нисә тәкдим әҙерләне. Ата-әсәләргә:

- балаларға һәм үҫмерҙәргә интернет селтәрендәге хәүефтәр тураһында алдан хәбәр итеү;
- баланы социаль селтәрҙәрҙәге шикле тәкдимдәргә һәм хәбәрҙәргә яуап бирмәҫкә өйрәтеү;
- баланың кем менән яҙышыуын һорау йәки белдермәй генә тикшереү;
- баланың тәртибенә һәм яңы ҡыҙыҡһыныуҙарына иғтибар итеү;
- баланың "челленджи" тип аталған, һаулыҡ өсөн хәүефле гәмәлдәрҙе үҙ эсенә алған заданиеларҙы үтәүенә иғтибар итеү;
- баланың дуҫтары һәм класташтары, шулай уҡ уларҙың ата-әсәләре менән бәйләнеш булдырыу мөһим.

Ә үҫмерҙәр ниндәй ҙә булһа шикле тәкдим һәм яңы таныштар тураһында ата-әсәгә, педагогтарға, хоҡуҡ һаҡлау органдарына хәбәр итергә тейеш.

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә Рәсәй Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәре 18 йәшлек әс егеттең элемтә объекттарында диверсия ҡылыуына юл ҡуймаған. Ведомстоның матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, әс дуҫ өҫтәмә аҡса эшләргә уйлаған. Телеграм-каналда улар билдәһеҙҙәр менән аралаша башлаған, тегеләре иһә элемтә объектына ут төртҡәндән һуң аҡса түләргә вәғәҙәләгән. Егеттәр ризалашҡан. "Янғын сығарырға торғанда өсәһе лә Федераль именлек хеҙмәте идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан ҡулға алынды. Ваҡиға урынын тикшергәндә енәйәт ҡылыу өсөн әҙерләнгән ҡоралдар һәм матдәләр табылды. Уларға ҡарата "диверсия" статьяһы буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылды", - тип хәбәр иттеләр Федераль именлек хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығында. Киров районы суды уларҙы һаҡ аҫтына алыу тураһында ҡарар сығарҙы.




## Һөжүм була ҡалһа...

**Хәбәр ителеүенсә, ошо көндәрҙә Татарстанда пилотһыҙ аппараттар "Алабуға" махсус иҡтисади зонаһы территорияһына, Алабуға һәм Түбәнге Кама предприятиеларына һөжүм итте.**

Әйтеүҙәренсә, пилотһыҙ осоу аппараттары НАТО илдәренең ҡорамалдары менән йыһазландырылған. Зыян күреүселәр бар. Әлеге ваҡытта 14 яралы, шул иҫәптән ике балиғ булмаған үҫмер тураһында билдәле. Алты кеше - Алабуға үҙәк район дауаханаһында, ҡалғандары өйҙә дауалана. Яраланган йәштәрҙең һәммәһе лә "Алабуға Политех" колледжына уҡый.

Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүм иткәндә үҙеңде нисек тотоу тураһында кәңәштәр баҫтырып сығарҙы.

- Әгәр кеше бинала булһа, аҫҡы ҡатҡа, подвалға йәки паркингка төшергә кәрәк. Лифт менән файҙаланырға ярамай, ул туктап ҡалырға мөмкин.
- Фатирҙа булғанда терәк стеналар араһында тәҙрәһеҙ урын табырға кәрәк. Ғәҙәттә, был - ванна бүлмәһе, иҙәнгә ултырырға кәрәк. Тәҙрәгә яҡын килергә ярамай.
- Урамда ҡалһағыҙ, яҡындағы бинаға, ер аҫты үткәүеленә йәки паркингҡа инергә, ә транспортта булғанда уны шунда уҡ ташлап, йәшенергә кәрәк.
- Һөжүмдән һуң пилотһыҙ осоу аппаратына ҡағылмағыҙ, ул урындан тиҙерәк китегеҙ. Табыш тураһында 112-гә хәбәр итегеҙ. Операторға үҙегеҙҙең исемде һәм пилотһыҙ аппаратты табыу урынын әйтегеҙ.

## Мутлашыусылар ҙа әүҙемләшә

**Рәсәй Банкының матбуғат хеҙмәте: кешеләрҙе алдауҙың яңы схемаһы асыҡланған: енәйәтселәр һылтанма буйынса һалым декларацияһын тапшырырға тәкдим итә.**

Мутлашыусылар электрон почтаға хат ебәрә, унда үҙҙәрен һалым хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре итеп күрһәтә һәм килемгә декларация биреүҙе талап итәбының өсөн һылтанма буйынса күсергә кәрәк.

Асылған биттә кешегә һалым түләүсене идентификациялау өсөн шәхси мәғлүмәттәр һәм банк картаһы реквизиттарын (уның номеры, карта эйәһенең исеме һәм фамилияһы, артҡы яҡтан өс һанлы код) индереүҙе һорайҙар.

Шулай итеп улар аҡса урлау өсөн мәғлүмәт йыя, ә алынған шәхси мәғлүмәттәрҙе алдашыу өсөн файҙаланырға мөмкиндәр.

Нимә эшләргә? Бындай хаттарға яуап бирмәгеҙ: хаттағы һылтанмалар буйынса үтмәгеҙ һәм шәхси һәм финанс мәғлүмәттәрен бирмәгеҙ.

Һалым органдары бурысты онлайн түләү тураһында электрон хәбәр ебәрмәй. 2024 йылдың 1 ғинуарынан 2 майға тиклем кампания барышында граждандарға һалым органына уҙған йыл өсөн килемгә, шул иҫәптән мөлкәтте (фатирҙар һәм йорттар, ер участкалары, транспорт саралары), акцияларҙы һатыуҙан, мөлкәтте ҡуртымға биреүҙән килгән килемгә декларация тапшырырға кәрәк.

Һәм тағы бер алдау төрө тураһында хәбәр итәләр. Белорет ҡалаһында йәшәгән 22 йәшлек ҡыҙ полицияға мөрәжәғәт иткән. Ул аҡса эшләү ниәте менән аферистар тоҙағына эләгеүе хаҡында һөйләй. Мессенджерҙарҙың береһенә өҫтәмә килем тәкдим итеп билдәһеҙ кешенән хәбәр килә. Ҡыҙ махсус сайтта үҙ аҡсаһына отель бронләргә тейеш була. Һәр брондән процент бирергә, түләгән аҡсаһын ҡайтарырға вәғәҙә итәләр. Һөҙөмтәлә ҡыҙ шәхси кабинет булдыра һәм эшкә тотона.

Уның ышаныуын яулау өсөн тәүҙә мутлашыусылар эш хаҡы бирә, артабан 30 урынды бронләргә кәрәклеген хәбәр итә. Был эш өсөн килемен күтәрергә вәғәҙә итәләр. Аҡсаһын күсергәндән һуң ҡыҙ уны кире ҡайтарырға уйлай. Әммә мутлашыусылар сумма ҙур булыу сәбәпле түләй алмауын әйтә. Ҡыҙ шунан һуң аферистар ҡулына эләгеүен аңлап ҡала һәм полицияға мөрәжәғәт итә. Шулай итеп, зыян күреүсе мутлашыусыларҙы 1 миллиондан ашыу һумға "бағыта".

Ҡыйғы районында ла шундай хәл була. Күлмәт ауылында йәшәүсе 52 йәшлек иргә "инвестиция компанияһы вәкиле"нән өҫтәмә эш хаҡы алыу өсөн аҡса һалырға, артабан уны арттырырға тәкдим итәләр. Ир уға ышанып, 1,5 миллиондан ашыу һумға кредит ала һәм уны махсус иҫәпкә күсерә. Тик вәғәҙә ителгән килемде ала алмай.

Был факттар буйынса Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексы буйынса енәйәт эше асылған.

**"Башинформ" материалдары файҙаланылды.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Алтынсы бүлек. Башҡорт - урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы.



**Өфө-II ҡаласығы - Көньяҡ Уралдың иң ҙур ҡәлғәһе. Өйрәнеү тарихы.**

Өҫтәрәк иҫкә алынған тирихи-архитектура комплексынан Өфө-II ҡаласығы барыһынан да яҡшыраҡ һаҡланған. Уның ҡуләмлелегенә һәм оҙайлы ваҡыт буйына йәшәүенә 4 м тәрәнлегенә тиклем еткән күп ҡатламлы мәҙәни ҡалдыҡтар, башлыса, V-XV быуаттарға ҡараған табылдыҡтар (өҫкө ҡатламдағы XVI-XX быуаттарға ҡарағандарын иҫәпкә алмайынса) дәлил булып тора. Ҡомартҡының ҡайһы бер урындарында киң һәм тәрән йырын, бейек ер валы эҙҙәре һаҡланып ҡалған, улар хәүефле мәлдәрҙә ҡәлғәлә йәшәүселәрҙе ҡурсалау өсөн булдырылған. Әйткәндәй, профессор В. А. Иванов Өфө ҡалаһының 1745 йылғы топографик планын тапҡан, унда Өфө-II ҡаласығының контурҙары бик асыҡ күренә. Ҡаласыҡ урынлашҡан морон уртаһынан ҡалын өс, урыны менән дүрт һыҙыҡ үтә, улар, моғайын, йырын һәм вал билдәләре булғандыр. Был һыҙыҡтар һаҡланып ҡалған йырын һәм вал ҡалдыҡтарына яҡынса тура килә. Тополан буйынса ҡаласыҡ ҡәлғәһе стенаһының (вал) зигзаг формаһында булғаны күренә, йәғни, валдың алға сығып торған мөйөштәрендә башнялар булған, улар оборона тотоу өсөн уңайлыраҡ була. Тикшеренеүселәр ҡәлғә стеналарының ошондай формаһын бик ҡатмарлы һәм камилыраҡ, тип баһалай. Планда йәнә ике аҙ ғына беленеп торған ике ҡара һыҙыҡ бар, улар, моғайын, ҡәлғәнең икенсе һәм өсөнсө оборона һыҙыҡтарын аңлатҡандыр.

Өфө-II ҡаласығы фәнгә 1956 йылдан бирле билдәле. Ошоға тиклем тыуған яҡты өйрәнеүсе П. Ф. Ищериков Өфө-II һәм Өфө-III ҡаласыҡтарында б.э. I мең йыллыҡтары уртаһына ҡараған 176 керамика ярсыҡтарынан торған ҙур коллекция йыйып ала. Н.А. Мәжитов 1957-1958 йылдарҙа табылдыҡтарҙың ҡайҙа ятыуы стратиграфияһын асыҡлау маҡсатында ҡаласыҡтың ике урынында ҡаҙып разведкалау эшен башлай, улар мәҙәни ҡалдыҡтарҙың 4 м тәрәнлеккә тиклем ятыуын асыҡлай. Ҡаҙыу эштәре материалдары тулыһынса баҫылып сыға. Ошо нигеҙҙә Н.А. Мәжитов ҡаласыҡтың йәшәү ваҡытын уртаса б.э. V-X быуаттары менән билдәләй. Ул үҙенең күп һанлы хеҙмәттәрендә ҡаланың урта быуаттар тарихының база тарихи-археологик ҡомартҡыһы сифатында Өфө-II ҡаласығын күрһәтте. Был фараздарҙы хәҙер өр-яңы тикшеренеүҙәр раҫланы.

Өфө-II ҡаласығының Башҡортостандың һәм Өфө ҡалаһының ижтимағи-сәйәси тарихын өйрәнеү ягынан үтә мөһим булыуын иҫәпкә алып, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте 2006 йылда Өфө-II ҡаласығын киң форматта ғилми өйрәнә башлау хаҡында махсус ҡарар ҡабул итте. Археологик ҡаҙыу эштәре 2006 йылда башланды һәм 2007-2009 йылдарҙа алып барылды. Ҡаҙыу эштәре һөҙөмтәләре беҙ көткәндәрҙән дә артығыраҡ булды. Мәҫәлән, һары материк балсығынан эшләнгән ҡәлғә стенаһы детале табылды. Ул емерелмәһен өсөн стена эске һәм тышҡы яҡтан вертикаль ҡуйылған бүрәнәләр менән нығытылған. Стена бик бейек булып, ҡаҙып асылған өлөшөндә ремонт эшләү эҙҙәре күренә. Был стенаның өҫтөндә вертикаль рәүештә теҙеп ултыртылған бүрәнәләрҙән яһалған ҡойма булған, моғайын, унда имән ағасы ҡулланылғандыр. Бында башҡорттарҙа әлегә тиклем һаҡланып ҡалған бер риүәйәтте иҫкә алыу урынлы булыр: Өфө билөмһендәге ҡала XVI быуатҡа тиклем "Имән ҡала" тип аталып йөрөтөлгән. Күрәһең, был атама үрҙәрәк иҫкә алынған имән стеналар ерлегендә барлыҡҡа килгән.

Төрлө составлы һәм төрлө төҫтәге балсыҡ ҡатламдары табылыуы ҡаҙыу эштәрен алып барғандар өсөн һис бер көтөлмәгән хәл булды: балсыҡ ҡатламдары иҙелмәнән ҡойоп яһалған. Был ҡатламдар һәр урында ла бер ҡалынлыҡта тигеҙ итеп һалынған һәм ер өҫтөн киң арауыҡта ҡаплап яткан. Улар шыйыҡ балсыҡ ҡатламын таҡта ҡалып менән уратып алынған майҙанға түшәгәндә хасил була. Мәғлүмәтле ғалимдар билдәләүенсә, ошо бик боронғо төҙөләш техникаһын иң тәүҙә Азияның көньяҡ далаларында йәшәүсе халыҡтары ҡулланған, ул хәҙерге ваҡытта ла бар.

Балсыҡ ҡатламдары ағас ҡатламдары менән сиратлашып килә. Был шартлы рәүештә ҡаланты тип аталған нәмәнең тәғәйенләнешен әлегә аңлатыуы ауыр, әммә һис шикһеҙ, ул монументаль ҡоролманың бер өлөшө, Көнсығыш Европаның ошондай ҡомартҡыларының береһендә лә осрамай. Торлаҡ иҙәндәренең йә иһә ҡәлғә майҙанының шыйыҡ балсыҡ һәм ҡара ер иҙелмәһе менән ҡапланып, ул кипкәс өҫкө яҡтан ағас иҙән түшәлеүе хаҡында фараз итеп була.

Ҡаласыҡта йыйып алынған төп әйбер материалы V-XIV быуаттарға ҡараған предметтарҙан тора. Улар - бахмут, турбаҫлы, кушнаренко, ҡараяҡуп мәҙәниәттәренең керамика ярсыҡтары. Табылдыҡтарҙың ошондай составы был ҡомартҡы халҡының этник яҡтан ҡатнаш булып, унда һан яғынан турбаҫлы ҡәбиләләренең өҫтөнлөк итеүенә дәлил. Ҡаласыҡтың башҡа материалдары араһында алтын ялатылған көмөш ҡайыш осон, көмөш алҡаны айырым күрһәтеп үтергә мөмкин, улар б.э. VII-VIII быуаттарға ҡарай. Ювелир әйберҙәрен яһау өсөн сеймал булған 10 алтын сыбыҡ киҫәген шулай уҡ ошо ваҡытҡа ҡарағандыр, тип әйтеп була. Ошо алтын киҫәктәренең ҡаласыҡтың иртә этабы менән бәйле булыуы ышаныслы рәүештә раҫланды.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"ата - атай".**
**"ана - әсә".**
**"ача - әкә һүҙе менән бер үк - "оло апай". [Бында] джимкяф менән алмаштырылған, ошолай уҡ [фарсыса] "чарм" һәм "гарм" - йылы, "чунбад" йә иһә "гундбад" - көмбәҙ тип һөйләшәләр".**

Күрәһегеҙ, төрки телдәрендә "ата" һүҙе үҙгәрешһеҙ һаҡланып ҡалған, әммә байтаҡ ҡына төрки ҡәүемдәре телдәрендә "ата" һүҙенә йәнәш шул уҡ мәғәнәләге "баба" һүҙе лә ҡулланыла (мәҫәлән, төрөктәрҙә һәм ҡаҙаҡтарҙа). Йыш ҡына юғары дин әһелдәре хаҡындағы яҙмаларҙа, мәҫәлән, Ғайса, Ибраһим, Нух һәм башҡа пәйғәмбәрҙәр табынған Аллаһы Тәғәлә шулай уҡ "Ата" тип атала. Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡаҙаҡтарҙа ата мәғәнәһендә "әке", төркмәндәрҙә - "кака", "деде", әзербайжандарҙа - "дәдә" һүҙҙәре ҡулланылһа, үзбәктәр оло ағаларына, йә иһә башҡа оло кешеләргә "акә", ата-әсәһенән оло ағаларына "бува" тип өндәшә (өйлә башҡорттары һөйләшендә "бабай" һүҙе урынына "быуай" тиҙәр). Бында оло апайға ҡарата ҡулланылған боронғо "ача", "әкә" һүҙҙәренең ҡайһы бер төрки ҡәүемдәрендә бөтөнләйгә икенсе, хатта ҡаршы мәғәнәлә ҡулланыла башлауына әлегә ниндәйҙер ышаныслы аңлатма биреүе ҡыйын. Ҡашғариҙың Барғсан төркиҙәренең бынан мең йыл әүәл ҡарт әбейҙәрҙе "ачи" һүҙе менән атауы хаҡында элегерәк яҙып үткәйнек.

Йәнә тағы ла бер ҡыҙыҡлы фонетик һәм семантик күренеш: Ҡашғари билдәләүенсә, фарсыларҙың "чунбад" йә иһә "гундбад" һүҙҙәре көмбәҙҙе аңлата икән. Бында берҙәренеһән һүҙ башындағы тәүге өндәре менән генә айырылып торған һүҙҙәрҙең хәҙерге башҡорт телендәге "көмбәҙ" һүҙенә үтә оҡшаш булыуы күҙгә салынып тора. Был һүҙҙең килеп сығышы үтә ҡыҙыҡлы. Һинд халҡы телендә "гумбһаһ" тигән һүҙ филдең йоморайыбыраҡ торған башы тигәндә белдерә. Көмбәҙ тип биналарҙың, беренсе сиратта, дини ҡорамдарҙың кеше башына оҡшатыбыраҡ төҙөлөп, түңәрәк-йоморо башы хаҡында әйтәбеҙ. Татар телендә бәшмәктең ни өсөн "гөмбә" тип аталыуын аңлағанһығыҙҙыр, тим. Хатта урыҫ һөйләштәрендә йыш ҡына "купол" һүҙен аҙ ғына үҙгәртеп, "кумпол" тип әйтәләр. Бынан бер мөһим һығымта эшләү фараз: һис шикһеҙ, боронғо кешелектең тәү теле тамырҙарын хәҙерге телдәрҙән эҙләй башлаһаң, халҡыбыҙ әйткән "тел асҡыстары"н да табып була.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

18 ғинуар таңында корпустың төп көстәре Пилица йылғаһына сыға һәм, Людвиново, Смардзевице районында яуға инеп, йылға аша сыға башлай. Пилица йылғаһын иң тәүҙә 14-се гв. атлы дивизияһының 114-се танк полкы кисеп сыға. Улар артынса 14-се һәм 16-сы гв. атлы дивизиялары полктары, йылға аша сығып, Томашув-Мазовецки ҡалаһының төньяҡ ҡырыйына бәреп инә. 60-сы гв. атлы полкы йылғаны Томашувтың көнсығыш тарафынан кисә. Гв. капитаны Иван Разволяевтың эскадроны, ҡайҙа боҙ өҫтөнән шыуышып, ҡайҙа үҙҙәре тапҡан саралырҙы ҡулланып, Пилица аша сыға һәм Томашувтың көнсығыш яғынан атаҡаға ташлана. Эскадрон, шоссе юлына сығып, Едлец һәм Голухов тораҡ пункттарын ала. Артабан беҙҙең яугирҙар, Варшава шоссеһын киҫеп, дошмандың сигенеү юлын өҙә. Эскадрон 150-нән артыҡ немец һалдатын һәм офицерын юҡ итә, уларҙың 30 автомашинаһын ҡулға төшөрә. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 27 февралендәге ҡарары менән И. П. Разволяевҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә (ул Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районында тыуып үҫкән).

Гв. старшинаһы Иван Чернухин взводы һәм гв. өлкән сержанты Иван Николаенко отделениеһы ҡыйыу алыша. Николаенконың яугирҙары, йылға буйындағы урмандан оҙон һайғауҙар киҫеп алып, боҙ киҫәктәрен этә-этә, улар өҫтөндә йылға аша тиҙ генә сыға ла, дошман траншеяһын баҫып ала. Немецтар беҙҙең яугирҙарҙы ҡыҫырыҡлап сығарыу маҡсатында атака башлай. Отделение дошмандың бер взводҡа тиклем һалдатын сафтан сығара, уның алты көбәкле миномотын юҡ итә.

И.Ф. Чернухин взводы тиҙ арала ярҙамға килә, улар муйынға тиклем еткән һалҡын һыуҙы кисеп сыға. Ҡул һуғышы башлана. Был тиңһеҙ бәрелештә гв. старшинаһы И.Ф. Свеженцевтың отделениеһы немецтарҙың бер взводҡа тиклем пехотаһын ҡырып һала, ике пулеметы һәм дүрт миномоты расчетын юҡ итә. Яугирҙәр дошмандың беренсе траншеяһын 200 метр дауамында үҙ ҡулдарында тота. Дошман, юғалтыуҙарға ҡарамай, атакаларын дауам итә. И.Ф. Чернухин взводында станоклы пулемет расчеты сафтан сыға. Гв. старшинаһы Чернухин, үҙе пулемет артына ятып, дошманды утҡа тота, улар атакаларын туҡтатырға мәжбүр була. Беҙҙең башҡа взводтар килеп еткәнсе, эскадрон дошманды үткәрмәй.

58-се һәм 62-се полктарҙың участкаларында ла ҡыҙыу алыштар бара. 62-се гв. полкының боевой хәрәкәттәре журналынан: "Полкҡа бурыс ҡуйылды: 58-се гв. полкы менән бәйләнештә Томашув-Мазовецки ҡалаһының көнсығыш өлөшөн биләргә... Дошман траншеяларына иң беренсе булып гв. капитаны Платонов Георгий Федоровичтың 4-се эскадроны бәреп инде (Г.Ф. Платонов - Советтар Союзы Геройы, һуғыштан һуң Һарытау өлкәһенеү Хвалынск ҡалаһында йәшәй. - **Ред. иҫк.**). 15 сәғәтҡә дошмандың 4 оборона һыҙығы ла өҙөлдө, эскадрондар, туҡтап тормайынса, ҡалаға бәреп инде, урам һуғыштары башланды. 1-се һәм 4-се эскадрондар ҡаланың үҙәк майҙанын алды, 2-се һәм 3-сө эскадрондар - үҙәккә йәнәш башҡа урамдарҙы таҙартты. Полк ҡаланың көнбайыш ҡырыйына сыҡты. 1945 йылдың 19 ғинуарында полк Евцин, Воля, Тушин, Поддембленa маршруты буйынса хәрәкәт итте".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Һин төҙөмәгәнде һин емермә! Яуаплылыҡ - шәп сифат бит ул! Тәбиғәтте, тимәк, донъяны яҡларға, һаҡларға биләгән вазифаңмы, ҡушылған бурысыңмы ҡушмаһа ла, той шул яуаплылыҡты.***



# ДОНЪЯ МЕНӘН, АҢЫҢ

**Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты, танылған радиожурналист, яҙыусы һәм тәржемәсе Рәсүл Хәсән улы СӘҒИТОВ тураһында "Йөрәгендә ут йөрөткән шәхес", тип кенә әйтергә була. Ниндәй генә эшкә тотонһа ла уны аҙағына алып барып еткергән, ниндәй мәсьәлә күтәрһә лә төбөнә төшмәйенсә туктамаған киң ҡарашлы журналист ул. Тел маһирлығы, кинәйәле һүҙ йөрөтөү оҫталығы, һүҙҙе тапҡыр уйната белеүе айырыуса хикәйәләрендә асыҡ сағыла. Хеҙмәткә булған һөйөү Рәсүл Хәсән улының булмышын сағылдыра. Әңгәмәбеҙ уның менән.**

**Журналист булыу теләге ҡасан уянды? Бала саҡта иң шәп һөнәр һинең өсөн нимә ине, уға ҡарашың үҙгәрмәнеме?**

- Иҫ белгәнемдән бирле күңелдә Һүрәтләүсе образы йәшәгәнен тойҙом. Донъя тиккә генә тап ошолай түгел дәһә, тип уйлана торғайным. Ваҡыт тигән нәмә донъяны секунд һайын үҙгәртәлер бит, һәм мин әлеге мәлдәрҙе һүрәтләп өлгөрөргә тейешмен, тигәнерәк уйҙар урала ине башымда. Башта бының сағыштырмаса еңелерәк ысулдарын күҙ алдыма килтерә инем. Мәҫәлән, Ваҡытты фотоға төшөрөп ҡалдырыу. Биш-алты йәшлек балаҡайҙың шуларҙы уйлағанына бөгөн аптырап, һиҫкәнеп китәм. Фотоаппарат ҡайҙан ғына эләкһен инде! Ауылда, булһа ла, бер-ике кешелә генә...

Минең өсөн иң шәп һөнәр мәсьәләһе тураһында һүҙ сыҡҡанда, хәбәрсе, теш табибы, юрист, офицер, йөк машинаһы йөрөтөүсе, йырсы тип теҙеп китәм, ғәҙәттә. Киномеханиклыҡты ла өҫтәп ҡуяйым әле ошонда. Ауылда, колхоз йәйләүҙәрендә был мөғжизәүи күренештең нисек тормошҡа ашҡаны тураһында үҙебеҙҙең матбуғатта ла, Мәскәү журналдарында ла, китаптарымда ла күп тасуирланым, ҡабатлап тормайым. Ваҡытты туҡтата алмаһа ла, уның ниндәйҙер мәлдәрен тотоп ҡала алған техник ысулдар улар - фотография менән синематография. Бала саҡта түгел, үҫкәс иһә кино режиссеры булынһасы, тип тә ҡуйғаным бар. Күп сериялы телевизион документаль фильмдар эшләгәйнек бер заман, бына унда донъяға әлеге шәп һөнәр күҙлегенән дә ҡараным. Етенселә уҡығанда фотоаппаратлы, фотоҙурайтҡыслы һәм башҡа кәрәк-яраҡлы булдым барыбер ҙә. Ваҡыт ағышын таҫмаға төшөрҙөм дә төшөрҙөм.

Кинокамерам да булһасы, тип һыҙылды үҫмер генә күңелем. Булманы. Һатыуҙа юҡ нәмә ине шул. Күңел үҙе лә - һүрәтләүсе бит ул. Әллә тарихты һаҡлағыс һандыҡмы? Ул - Ваҡытты, мәлде, хәлде фотография, кино, театр, әҙәбиәт, хәбәриәттән дә ғәйре теркәүселәр. Бөгөн гаджеттар һәр кемдең кеҫәһендә, әммә, бына ғәжәп, видео тип атлығып тормайым. Ул ғынамы, ғәфү итһендәр инде, аш-һыу мәжлестәрендә иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ төшөрә башлаһалар, килештермәйем. Үҙем сығыш яһағанда хатта фотоға төшөрмәүҙәрен ҡәтғи үтенәм. Ҡулланыу йәһәтенән дә ябай булғанғалыр инде әлеге мөнәсәбәтем. Кеше зыҡ ҡубып эркелешкән ерҙән ситтә ҡалыуҙы хуп күрәм мин, бәлки, ошоғалыр ҙа. Мыжғыу мыжыуға тиң булып китә, юғиһә. Видеооператорлыҡ та бит хайран ижади һөнәр! Телерадиокомпанияла эшләүем арҡаһында кәпәс сисеп маҡтарлыҡ әллә күпме шундай ижадсы менән танышмын. Шуға ла видеоны бөтөнләй инҡар итмәйем. Мәҫәлән, гармун уйнап йырлағанда аудионан бигерәк видео арыуыраҡтыр. Концерттарҙа үҙем йырсынан да алда музыкантты тыңлайым. Бармаҡтар нимәләр ҡыла, импровизация тигән ғәжәйеп ғәмәл мөғжизә тыуҙыра. Ишетеүгә күреү өҫтәлеүе бөтөнләк бирә.

Фотографияның мәғлүмәтте видеонан да былай күрһәткән осраҡтар ҙа юҡ түгел. Шулай булғанда ҡуш ҡуллап сәпәкәйләйем. Сөнки әлеге лә баяғы ижадилыҡ тантанаһы был. Радиола тура эфирҙа ошоно - хәрәкәтте, дәүмәлдәрҙе, ғәмәлдәрҙе, төҫтө, еҫте һүҙ менән еткерергә тырышам. Хатта ымлыҡтар ярҙамында. Тын алыш менән. Күпмелер мәлгә шым ҡалып. Ижадилыҡ идара итә донъя менән. Ул юҡта алтын да - баҡыр, батыр ҙа- бахыр.

**Башҡорт теленә һөйөү тигәндә, кемдең, нимәнең роле ҙурыраҡ: һине ураҡҡан мөхиттеңме, уҡытыусыныңмы, ғаиләнеңме, китаптарҙыңмы?**

- Туған телем ул минең. Ошоноң менән бөтәһе лә әйтелә. Тарих, Ваҡыт, донъя шулай аҡҡан. Башҡорт теле быуат-быуаттар аша миңә лә килеп еткән. Туған телем тыуған еремдең йөрәгенән яралған. Тәбиғи тормошҡа ашҡан был. Мин үҙем дә - шул тел ул. Минең арҡылы, һүҙҙәр булып, ташҡа баҫыла ул, эфирға сыға. Уға ярҙамсы булырға тейешмен. Һәр кемдең шәхси яуаплылығы ла был.

Икенсенән, эйе, мөхит. Шул уратмыш - бик бөйөк нәмә. Әҙәм балаһы сиктәр эсендә ҡалмаҫҡа күпме генә тырышмаһын, уның йоғонтоһонда.

Уҡытыусымы? Бөйөктәрҙән бөйөк вазифа! Әҙҙәргә генә бирелгән мөғжизәүи көс эйәһе! Дәрессе генә түгел, ижадсы икәнһең, баяғы мөхитте лә тыуҙыраһың.

Балаларым, Өфөлә тыуып үҫһәләр ҙә, әле лә бында йәшәһәләр ҙә, башҡортса бик иркен һөйләшәләр. Үпкәләнелмәһен, бәғзе ауыл ерендәгенән күпкә яҡшыраҡ уларҙың һөйләше. Үҙегеҙҙе кеше алдында тоторға өйрәнегеҙ, тип тәрбиәләнем кескәй саҡтарынан. Әсәйем әйткәндәрҙе еткерә килдем. Ә үҙеңде тота белеү - телмәр ҙә ул. Балаларҙың оло лар йыйылған ерҙә лә ҡыҫҡа ғына итеп, үҙ һүҙҙәре менән ҡотлап ебәреүе, ана, ҡайһылай һәйбәт! Берҙән, телде нығытыуға шәп, икенсенән, кеше алдында сығыш яһау - ҡыйыулыҡ та. Улым менән ҡыҙым ҡайһы ваҡыт, минә ҡушылыпмы, ниндәйҙер танауға яҡынлатам. О-о-о, был е-е-ç!.. Балалар ҙа иң беренсе шулайта бит.

**Тәбиғәт һәм кешенең яуаплылығы? Бөгөн нимәләр борсоуға һала?**

- Борсолоу ғына түгел был, күңел һыҙланыуы, йөрәкһеү, хатта үрһәләнеү. Донъяның, Ваҡыттың үҙағышына аяуһыҙ ҡыҫылыуға шаһитлыҡ шулайттыра. Сөнки уларҙың мәлдәрен һүрәтләп өлгөрмәгәнмен, тарихта ҡалдырмағанмын. Һин төҙөмәгәнде һин емермә! Яуаплылыҡ - шәп сифат бит ул! Тәбиғәтте, тимәк, донъяны яҡларға, һаҡларға биләгән вазифаңмы, ҡушылған бурысыңмы ҡушмаһа ла, той шул яуаплылыҡты. Күңелеңдә шул ятһын да, матди файҙа ни тиклем генә ылыҡтырмаһын, тыйыл!

**Иҫән булһа, ҡыуаныр ине шул әсәйең һинең өсөн дә. Әйҙә, артыҡ тыйнаҡланмай, ауылдаштарыңдың, райондаштарыңдың да ғорурлығы икәнеңде лә, әйтәйек.**

- Әйҙә һуң. Быны ҡысҡырып хәбәр итеү булмаһа ла, нисектер белдереү бар. Үҙеңде үҙең күтәрҙең, тигәндәрен дә йәшермәйем, инде алтмышҡа еткәндә мөмкиндер. Ниндәйбын тулҡынындамы, башҡортса йырҙар йырлай. Ретроларҙы. Ҡайҙан беләһең, тиһәм, ғүмер буйы үҙең йырлайһың бит, тиҙәр. Йәғни ғаиләлә шәхси өлгөнөң емеше мул. Башҡортса һөйләшегеҙ, тип туҡып ултырғаным, ышанһағыҙ ышанығыҙ, ышанмаһағыҙ ҙа ышанығыҙ, бер тапҡыр ҙа булманы. Атай өлгөһө был. Һүҙ - тере телдә булһа ғына һүҙ ул. Шунда ул айырыуса йәмле, айырым бер тәмле.

**Рәсүл, ташҡа баҫылған тәүге китапты ҡулға алыу күңелдә ниндәй кисерештәр уятты?**

- Һәйбәт нәмәләрҙе беренсегә күргәндә ниндәй тойғоло булаһың - шуны. Иң ҡәҙерлеһелер ҙә. "Ятаҡ" формаһында ине ул - дүрт кеше әҫәрҙәре индерелгәйне. "Ятаҡ" бүлмәһенә дүртебеҙ урынлаштырылһаҡ та, һәр беребеҙҙең үҙ, үҙаллы мөйөшөбөҙ бар. Хатта айырым бүленгән. "Танышайыҡ - тәүге китабым" серияһында ине. Китап эсендә китапсыҡтар. Сабир ағай Шәрипов сығарҙы. Еңел генә нәшерләнде, тупһа тапаманым. Көтөлмәгән бүләк булып килеп тә төштө өҫтән ҡулыма.

Әлеге "Ятаҡ"ты ла ҡушып һанағанда 14-кә етте бөгөн йыйынтыҡтарым. Бөтәһе лә ошолай еңел эшләнде, тиеүҙән ситтәмен. Һәр эшкә етди ҡарайым, ентекле тотонам. Яҙғандарымды нәшриәткә тапшырыр алдынан мең тапҡыр уҡыйым, сығып килгәндә биш йөҙ тапҡыр тикшерәм. Фотоһүрәт, автор тураһында мәғлүмәтте лә үҙемдән һорап алалар. Рәссам да тәҡдимдәр һорай. Ҡыҫҡаһы, китапты ҡулға алғанда минең өсөн яңылыҡ бөтөнләй булмай. Шуға ҡарамаҫтан, урта тошон асып, таҙер ҡаҙаныштарға арҡанан этеүме, ҡулдан тартып алыуымы арҡаһында түгел, ә көндәлек фиҙаҡәр хеҙмәт менән өлгәшеү күҙҙә тотола бында. Хәйер, барыбыҙ ҙа шулайбыҙ инде, айырыуса ауылдан сыҡҡандар, бигерәк тә ижади йәндәр. Ана шул ижадилыҡтың Бөрйәндә мотлаҡ булырға тейешлеген дә йыш тәкрарлайҙар, һәм бының менән килешәм. Әҙәбиәтсе, сәнғәтсе булмаһа ла, барыбер ҙә ижади ул бөрйәндәр. Сөнки ижадилыҡ - ҡулланыу, Аллаһы Тәғәлә хасил ҡылдырғанды файҙаланыу түгел, ә уны үҫтереү, һаҡлау, яҡлау, тыуҙырыу. Эсеңдә ошо илһамлылыҡ ултыра икән, һин дә ижадсыһың.

Бөрйәндең ябай йәшәү урыны ғына булмауы "Урал батыр"ҙа, ана, артабан да раҫлана бит:

*- Донъя-маҙар йыймаған,*
*Ҡашығаяҡ тотмаған,*
*Ҡаҙан аҫып, ут яғып*
*Улар донъя көтмәгән.*
*Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,*
*Үлем барын белмәгән...*

> ***Туған телем ул минең. Ошоноң менән бөтәһе лә әйтелә. Тарих, Ваҡыт, донъя шулай аҡҡан. Башҡорт теле быуат-быуаттар аша миңә лә килеп еткән. Туған телем тыуған еремдең йөрәгенән яралған. Тәбиғи тормошҡа ашҡан был. Мин үҙем дә - шул тел ул. Минең арҡылы, һүҙҙәр булып, ташҡа баҫыла ул, эфирға сыға. Уға ярҙамсы булырға тейешмен. Һәр кемдең шәхси яуаплылығы ла был. Икенсенән, эйе, мөхит. Шул уратмыш - бик бөйөк нәмә. Әҙәм балаһы сиктәр эсендә ҡалмаҫҡа күпме генә тырышмаһын, уның йоғонтоһонда.***

## ижадилыҡ

**Илһамлы күңел, тигән саҡта күҙ алдына ҡулына гармун тотҡан Рәсүл баҫа. Йыр-моң, гармун телдәре... Был талантың менән асылып китеүең күптәр өсөн көтөлмәгәнсә булды...**

- Һәр нәмә камил башҡарылырға тейеш. Әсәйем йыш ҡабатлағанса, урын-еренә еткереп. Бөрйәндәрем "нөғәтләү" ти быны. Диалектта - нөғәттәү. Айырыуса әҙәбиәт менән сәнғәттә. Ҙур юғарылыҡҡа өлгәшмәйенсә, кеше алдында күренмәйерәк тор. Гармунды әҙәмсә итеп уйнарға өйрәнеү барышы оҙаҡҡа һуҙылып китте миндә. 1975 йылдың нисәнселер февралендә башланғайны, бөгөн дә дауам итә. Шул йылы әсәйем "Аҡсарлаҡ" тигән гармун алып бирҙе. Гүйә, Айҙымы, берәй йондоҙҙомо алып тотторҙо! Ләкин һикертеп ебәреп, ритмлы итеп бейеү көйҙәрен уйнап ебәрмәнем. Ә ысын гармунсы тип барыбер ҙә сатан кешене лә майҙанға сығарырлыҡ шундай оҫталар атала бит! Ябай ғына көйҙәр, әммә ана ниндәйҙәр! Йөкмәткеләре бар. Ҡайһыларының эстәлеге хатта текслы йырҙыҡынан былайыраҡ. Сөнки бейеүсе ҡушыла. Ана нисек өйөрөлә, айҡай, таусирлай, оса, һыҙлана. Ә инде таҡмағы ла булып, кемдер һамаҡлап та ебәрһә - тотош бер роман!

Социаль селтәрҙәрҙә өлкәнерәк йәштәге берәй оҫтаның уйнағанын һалһалар, ҡабат-ҡабат ҡарайым, тыңлайым. Сөнки был да, интервьюның тәүге һорауына яуабымда әйткәнемсә, донъяның, етмешенсе, һикһәненсе йылдарындағы күренештең, һүрәтләнеүе.

*✓ Хәбәрсе хәбәр итеүсе генә түгел, йәмғиәттең рухын тотоусы ла ул. Әйткәнең мәлле, урынлы, ихлас булһын. Йөрәгеңдән сыҡһын. Һәр һүҙең генә түгел, ымың, тының өсөн яуаплылыҡ той. Инаныуым шул.*

**Моң донъяһы һинең булмышыңды биләп алған. Киләсәктә беҙҙе аптыратыр, һоҡландырыр мәлдәр күп булыр әле, тип уйлайым. Рәсүл Хәсән улы күңелендә серле хыял йөрөмәй түгелдер?**

- Баянды ныҡ хөрмәт итәм. Хоҙай насип итһә, унда ла, бәлки, өйрәнермен, тигән серле хыялдамын. Сөнки мөмкинлектәре күп. Кәрәкле тоналлекте табаһың да, йыр менән үҙең дә ҡушыла алаһың, башҡалар ҙа. Гармун - олатай бит инде ул. Ҡайһы бер йырҙар менән ҡушылып булмай уға. 1822 йылда Германияла эшләнгән икән. Гармоника тип аталған. 1830-ҙа гармоника Рәсәйгә килеп еткән. Баян - уның камиллаштырылған формаһы. Интернетта ҡарап ултырғайным: 1897 йылда Италияла гармониканы күпләп етештереүгә нигеҙ һалған Пасло Сопрани тигән оҫта уйлап сығарған, баҡтиһәң. Башҡортса "гармун" тибеҙ һәм быуат-быуат телебеҙҙә булған һымаҡ йылы, еңел, уңайлы

# МЕНӘН...

## идара итә

әйтелә. Баяғы "колхоз" һүҙе ише. Яратыуыбыҙҙандыр инде. Гармун тотоп фотоға төшөү ҙә - интернетта үҙе бер ваҡиға.

Һәр кем донъяға, эйе, үҙ яҙмышы менән килә. Шул яҙмышты үтер өсөн уға тәбиғәттән нимәләрҙер бирелә, үлсәп-үлсәп һалына. Быны менән бәхәсләшеп булмай, ялыу яҙыуҙан да файҙа юҡ. Һөнәр һайлау тиһәк тә, беҙ уны түгел, ул беҙҙе һайлай. Дөрөҫөрәге, эстә - күңелдәге, ниндәйҙер процессорҙағы, карталағы мөмкинлектәр, өҫтөнлөктәр ирек даулай һәм бер көн килеп яулай - ҡайҙалыр уҡырға инәбеҙ. Ләкин күңел тартҡан төп йүнәлештән тыш, бәләкәйерәктәре лә була. Иҙел үрендә тыуып үҫкән кеше булараҡ, уның менән сағыштырайым. Башта ул тар ғына, әммә аҙым һайын тигәндәй киңәйә. Сөнки ваҡ йылғалар ҡушыла ла ҡушыла. Минеңсә, улар быны сараһыҙҙан эшләмәй, теләп башҡара.

**Тимәк, гармун телдең эске моңон, рифмаһын тойорға ла ярҙам итә...**

- Гармун - ул күңелде баҫыусы ла, асыусы ла. Һүҙҙе тере йән итеп күргәнемде яҙғаным да, һөйләгәнем дә бар. Үлсәме, холҡо, төҫө, хатта еҫе бар уның. Һүҙҙәр ярҙамында ғына түгел, һүҙҙәрҙең үҙҙәре менән дә һөйләшәм мин. Был, ғәҙәттә, һөйләм төҙөлөшө яңылыш булып, улар үҙҙәре теләмәгән, йәнәш булырға тейеш булмаған һүҙҙәр менән күршеләш тура килгәндә. Алмаштыр, тип мөрәжәғәт иткәндәйҙәр. Үтенестәрен үтәһәм, балҡып китәләр, мониторҙа ҡыбырлап ҡуйып рәхмәт әйтәләр. Автомобиль дә ҡайһы саҡ йүнләп тартмай. Бензин һәйбәт, май кисә генә яңынан ҡойолдо, яндырыу шәмдәре лә һәйбәт, әммә юртыуы хөрт инде, ығыша. Кәйефтән шикелле был, сөнки төшкә ҡайҙалыр барғанында саба ғына. Гармун менән дә шул хәл. Төймәләре йүнләп баҫылмамыш булып китә. Өр-яңы булһа ла. Баҫылһа ла, моңо әҙ. Һөйләшеп алһаң, йылмайып ебәрә. Быға са ишетеп тә, өйрәнеп тә өлгөрмәгән берәй көйҙө тәҡдим итә. Бармаҡтарҙы үҙе тоҫҡай.

"Гармун ҡапыл ошо йырҙы көйләне лә ебәрҙе, - тигән инеш һүҙ ҡуйҙым бер көн социаль селтәрҙәрҙең береһендәге сәхифәмдә. - Ҡолаҡҡа ғына һүҙҙәрен дә һөйләне. Тап үҙе уйнаны, быға са тотонған көйөм түгел ине. Тиҙ башҡарылғандың сифатһыҙ булыуы ла бар, шулай ҙа һалам".

Йырҙар ҙа ерҙәр һайлаусан. Күктәр ҡөҙрәтенән хасил мөғжизәүи күренештәрҙе күреүгә күңелдә ҡапыл килеп тулышалар. Бигерәк тә йәнтөйәгемдә. Гармун да урман юлында һелкенгәндән түгел, ә башлап ебәрергә алҡынып ауаз бирә. Камиллыҡ һәр нәмәлә кәрәк, йырҙа моң мөһим, гармун һайрарға тейеш. Ошондай иҫ киткес уратымда семтем генә булһа ла улар ҙа килеп сыҡҡандай, булғаны арта төшкәндәй. Һүҙҙәре лә тәү урында булмай ҡайһы саҡ.

Халҡыбыҙ ретро йырҙарға мөкиббән. Хатта йәштәр ҙә. Телебеҙ, ундағы китаптарға һыйып бөткөһөҙ һүҙҙәребеҙ кеүек, улар ҙа, элек гәзиттәрҙә яҙылғанса, "ваҡыт һынауын үткән", юғалмаған, онотоуға юл алмаған. Шундай ҡайһылыр боронғоно уйнап-йырлап интернетҡа һалыуым була, йәшлекте иҫкә төшөрҙөң, Рәсүл, тип рәхмәттәр яуырға тотона. Минең үҙемдә - иҫкә төшөрөү, һағыныу түгел, сөнки һәр йәштең үҙ өҫтөнлөгө. Бер көн шуны асыҡ яҙҙым да: "Бөгөн дә, бына - йәшлекте һағынғандан түгел, шул моңмо, моңсоҡмо ҡабынғандан", - тинем.

**Ләкин төп шөғөлөң - журналистика бит инде...**

- Эйе, төп шөғөләм журналистика, әммә уға ошолай музыка менән шөғөлләнеү ҙә ярҙам, тигән фекерҙәмен. Сәсән барҙа телеңде тыйыу дөрөҫтөр бит, тип уйлағаным да бар. Әммә, берҙән, уйна, Рәсүл, профессионалдар үҙенсә, һин үҙеңсә, тиҙәр. Икенсенән, хәбәриәт, әҙәбиәткә был ысынлап та булышлыҡ итә. Музыканың ритмы, мәҫәлән, бик үтемле. Шиғриәтте шиғриәт иткән нәмә рифма түгел, ә тап ритм тип беләм һәм ул сәсмә текста ла булырға тейеш үк булмаһа ла, булғаны яҡшы. Радиола тапшырыуҙарыма сценарийҙар яҙғанда эстән уҡып, һөйләп, хатта көйләп ултырам. Ритмы тура килмәһә, йә ҡыҫҡартам, йә оҙайтам, йә бүләм, йә икенсе һүҙҙәр менән алмаштырам. Шулай тура эфирҙа ла еңелерәк. Тыңлаусыға ла һәйбәт. Һүҙ ҡайҙа ғына яңғырамаһын, бигерәк тә күмәк алдына сыҡҡаны байрам булһын, вайран булмаһын.

Хәбәрсе хәбәр итеүсе генә түгел, йәмғиәттең рухын тотоусы ла ул. Әйткәнең мәлле, урынлы, ихлас булһын. Йөрәгеңдән сыҡһын. Һәр һүҙең генә түгел, ымың, тының өсөн яуаплылыҡ той. Инаныуым шул.

Бер үк һүҙҙәр менән дә төрлөсә яҙып була, ғәҙәтилектән әҙ генә булһа ла тайпылыу иғтибарҙы шундуҡ йәлеп итә. Ә тапалған тәртиптәге, тыумаҫ борон юҡҡа сыҡҡан һөйләмдәр диҡҡәтһеҙ ҡала, урын ғына биләй. Кәрәктә мәҡәл-әйтемдәр ҙә үҙгәртелеп ебәрелһен хатта, шиғырҙар яңыртылһын, атамалар башҡалатылһын - был да тексҡа үҙенсәлекте ҡуйы мана, сағыуландыра.

Һине ишеткәндәрҙең күңеле ҡылт итһен, быға са телде яҙа-йоҙа аралашыу сараһы ғына тип ҡарағандарға тиклем, һутлы, ҡотло телдә үҙе лә һөйләшергә ҡанатланһын. Һутлы, ҡотло, тик татлы түгел, быныһын айырып ҡуяйыҡ.

Ҡайһы саҡта русса ла яҙам мин. Рус әҙәбиәтен уҡып алһам, шулай була шикелле. Һүҙҙең нимә икәнен, ниндәй мөғжизә, алтын булыуын тағы ла тәрәнерәк төшөнөүгә килтерә мине ошо. Әйткәнем дә бар - шулай ике телдә яҙыуым арҡаһындалыр ҙа һүҙҙәрҙе эстән дә күрә башланым хәҙер.

Рифмалап һөйләшәһең дә тиҙәр миңә. Иң мөһиме тип ҡарамаһам да, радиолағы сығыштарымда уны ла үгәйһетмәйем. Хатта яҡын күрәм. Рифма юлға гел генә сығып тормай. Айырыуса - тапалмағаны. Юғиһә, "күңел" менән "түгел" ярайһы ялҡытҡан. Иғтибарҙы улар менән йәлеп итеп тә булмай хәҙер. Рифмалап ҡуйыуҙан телмәр йәнләнеп-йәмләнеп китә. Быға миҫалдар миндә - гәзит биттәре еткеһеҙ.



**Радиохәбәрселек нимә ул һинең өсөн?**

- Урынымды табыу. Быны үҙемдән сығарып ҡына әйтмәйем, бик күптәрҙән тура ла, һүҙ ыңғайында ла белдерелгәнгә лә таянам. Һәм был - ҙур бәхет! Сөнки әллә ни саҡлы кешенең йәмғиәттә оя тибә алмай йонсоғанын беләм. Эшкә барғы килеп торорға тейеш. Ялдарҙа ла, ҡайһы саҡ рәттән икеһендә лә, килеп ултырам. Радионың төп өҫтөнлөгө - йәһәтлек бит, һәм был һәйбәт, ләкин шул арҡала бәғзе ҙурыраҡ эштәр, яйлабыраҡ башҡара торғандар ситтә ҡалып китә, ана шулар менән булышам. Ғөмүмән, журналисҡа туҡтауһыҙ уҡыу, үҫеү фарыз. Сценарий тиҙ яҙылырға мөмкин, миндә был, әйткәндәй, гел оҙаҡ процесс, ләкин эҙмә-эҙлекле барған әҙерлекһеҙ, ғилемһеҙ уның тоҡос сығыуы ихтимал.

Радионың тағы ла бер шәп яғы - үҙең яҙғанды үҙ тауышың менән еткерә алыу. Был - ифрат бөйөк мөмкинлек. Телдең тәү нәүбәттә өндәрҙән торғанына шигем булғаны юҡ, хәрефтәр - уларҙың шартлы график билдәләре генә. Ә тауышым менән, етмәһә, тура эфирға сыҡҡанымда - өндәр өсөн байрам. Ҡайһы бер өндәрҙең алфавитта билдәләре юҡ, ана шуларға ла. Ә баҫма матбуғатта телдең бөтә терелеген, йәнен, йәмен хәрефтәр менән бирергә кәрәк. Беҙгә еңелерәк, тиемме икән... Йәнә лә микрофон аша тыңлаусыңдың рухын күтәрәһең. Уны ишетәһең дә. Эйе-эйе, ниндәйҙер техник ысулдар аша аралашмаһаң да ишетәһең, хатта күрәһең. Миндә бына шулай.

Ижадилыҡ тантанаһы ул беҙҙең "Юлдаш" радиоһы! Яңынан-яңы проекттар уйлана. Үҙгәреп тороу хас уға. Коллективымдағы ошо шәп хәл-күренеш йәшәртә мине хатта. Радио күптән инде киң мәғлүмәт сараһы ғына түгел. Үҙенә бер йәмәғәт институтына әйләнде ул. Шулай тигәндә, эфирҙан тыш башҡарылған әллә күпме күмәк саралар күҙҙә тотола: райондарҙа халыҡ менән осрашыуҙар, концерттар, төрлө акциялар. Социаль селтәрҙәрҙәге даими, минут һайын тигәндәй яҙылған сәләмдәрҙән генә сығып та "Юлдаш"тың да, әле йәш булыуына ҡарамаҫтан, йәмғиәттә үҙенең алтын урынлы икәнен ныҡлы раҫларлыҡ.

**Бөрйән - мәшһүр легендалар ижад ителгән төбәк. Ошо үҙенсәлектең тормошҡа ҡараш формалаштырыуҙа ниндәйҙер йоғонтоһо барҙыр бит?**

- Шикһеҙ бар һәм сикһеҙ ҙур! Бөрйәнде айырым күк есемеләй күргәнемде ҡабатлауҙан туҡтамайым. Тәпәй йөрөй башлағанымдан тиерлек шуны аңланым һымаҡмын. Үҙебеҙҙең ауылдан башҡаны белмәһәм дә шулай тойолғандыр, тимен бөгөн. Моғайын ғына, шулайҙыр. Ҡобайырҙарҙы уҡымағанмын әле, сөнки уҡый-яҙа белмәйем, телдән һөйләнгәнде ишетмәгәнмен, шулай ҙа Бөрйәнемдең, ғәҙәттәге төбәктәрҙәгесә тормош көтә торған, көнкүреш алып барыу урыны ғына түгеллеген самалау булғандыр.

"Урал батыр" ҡобайырының:

*- Борон-борон заманда,*
*Кеше-маҙар килмәгән,*
*Килеп аяҡ баҫмаған,*
*Ул тирәлә ҡоро ер*
*Барлығын һис кем белмәгән,*
*Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан*
*Булған, ти, бер урын...* - тип башланғанын да аҙаҡ ҡына күрермен.

...Ә Бөрйәнде белер өсөн тауҙарына уның мен! Бар донъяны күрергә лә уларға үрмәлә. Былтыр йәй, ниһайәт, иң бейек түбәһе Мәсемгә менергә яй сыҡты. Тауҙарыма үҙем генә түгел, гармун да тартыла ла тора. Көйҙәр көйләнек, һүҙҙәр һөйләнек, йырҙар йырланыҡ. Болоттарға баш терәнек, донъяларға именлек теләнек. Өҫ менән аҫ күңелдә, мейелә урындары менән алмаша тауҙарҙа, тиемме икән. Күккә яҡынайған һайын, фекер тәрәнәйә.

Ғөмүмән дә, уйсанлыҡ хас инде ул миңә, хас. Шул тышҡы ҡиәфәтемә лә сыҡмай ҡалмай. Йылмайыбыраҡ йөрө, донъя матур бит, тиҙәр йыш ҡына. Былай тип яҙғаным да бар: "Ҡайҙа киттең былай, уйланып?" - тигәндәрен ишетәм. "Булмышым шулай", - яуабым ошо була. Шунан: "Булмыштан уҙмыш юҡ, - тип өҫтәйем. - Яҙмыштан, бәлки, барҙыр, булмыштан юҡ..."

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

***✓ Джон Хайцман үҙ ғүмерендә төүге тапҡыр изгелек энергияһын тойҙо, кешеләрҙең күңелендәге һөйөү, ихлас һоҡланыу уға ла ҡағылды. Был энергия бар ауырыуҙарға дауа һымаҡ. Сәхнәнән сыҡҡанда ул аҡһамай ине.***



Владимир МЕГРЕ

# БАЙҘАР ҘА ИЛАЙ

(Кинәйәле хикәйәт)

Ул бит Саллиға, улына, ейән-ейәнсәрҙәренә яҡшылыҡ эшләргә уйлағайны, улар ожмахҡа тиң урында матур күршеләре менән татыу йәшәүен теләгәйне. Шуға бит ул сап-сарға әйләнә барған ерҙәрҙе һатып алып, ипкә килтереп, үлән сәстергәйне. Матур кешеләр йәшәгән ерҙә генә ер ҙә матураясаҡ - быны ул яҡшы аңлай. Тик уны аңламанылар, залды ташлап таралыша башланылар. Нисек ышандырырға һуң уларҙы? Туҡта! Хайцмандың башына ҡапыл бер уй килде: улар бит бер нәмә лә белмәй, шуға ышанмайҙар! Әгәр дөрөҫөн һөйләп биргәндә... Джон Хайцман аяғүрә баҫты һәм тыныс тауыш менән ышаныслы итеп һөйләй башланы:

- Тороп торогоҙ. Мин аңланым. Һеҙгә ни өсөн компания былдай юлға барғанын аңлатырға кәрәк. Әммә быны аңлатып булмай. Бер нисек тә. Сөнки мин... Беләһегеҙме, нимә этәрҙе... Был контракттар шәхсән минең теләккә ҡағыла. Дөрөҫөрәге...

Хайцман буталды һәм артабан ни әйтергә белмәй туҡтап ҡалды. Кешеләр уға әйләнеп баҡтылар. Улар Хайцманды иғтибар менән тыңлай ине. Әммә ул һүҙен ялғай алмай, шым тора бирҙе. Шулай ҙа бар көсөн туплап, дауам итте:

- Мин бала саҡта... Үҫмер сағымда... Бер ҡыҙҙы оҡшаттым. Әммә мин уға ғашиҡ булғанымды аңламағанмын. Уға өйләнмәй, башҡаларҙы кәләш итеп алдым. Бизнес менән шөғөлләндем. Ул ҡыҙ менән беҙ илле йыл осрашманыҡ. Мин уны онотҡанмын. Күптән түгел уны иҫемә төшөрҙөм. Был донъяла мине шул тиклем ихлас яратҡан башҡа кеше юҡлығын аңланым. Ул мине әле лә ярата. Тик мин был турала белмәгәнмен, хатта ике ятып бер төшөмә лә инмәгән. Хәҙер аңлайым: ҡабат унан башҡа бер кемде лә ярата алмаясаҡмын. Ул ҡыҙ менән яңынан осраштым. Әлбиттә, ул хәҙер өлкән йәштәге кеше. Әммә ул минең өсөн нисек булған, шулай ҡалған. Ул баҡса үҫтерергә ярата. Ул быны бик матур итеп эшләй белә. Мин уның эргәһендә лә матур баҡсалар үҫеүен теләнем. Һәйбәт күршеләре булыуын да теләйем. Эргәһендә матур, бәхетле кешеләр йәшәһен, тим. Тик быны нисек эшләргә һуң? Бизнес менән шөғөлләнеп, был теләгемде тормошҡа ашырғандай аҡса туплағанмын. Әле шул ерҙәрҙе һатып алып, участкаларға бүлдем, быны ошо контракттарҙы уйлап таптым. Быны мин һөйгәнемдең бәхете өсөн эшләнем. Бәлки, быны мин үҙем өсөн эшләгәнмендер? - Һуңғы һүҙҙәрҙе Джон Хайцман үҙенә төбәп әйтте һәм уға төбәлгән ҡараштарҙы тоймайынса, үҙ алдына һөйләй башланы. - Беҙ ни өсөндөр йәшәйбеҙ - тик ни өсөн? Нимәгәләр ынтылабыҙ - тик нимәгә? Мин тиҙҙән үлермен, минән һуң нимә ҡалыр? Ҡоро тупраҡмы? Әммә әлеге мәлдә мин ошо проектымды тормошҡа ашырмайынса үлергә йыйынмайым. Минән һуң һөйгәнемдең мәңге йәшел баҡсаһы ҡалыуын теләйем. Күршеләренең матур баҡсалары менән бергә. Башта мин ландшафт дизайны менән шөғөлләнгән берәй ҙур фирманы ялларға уйланым. Контракт буйынса, әйҙә, эшселәр ҡараһын баҡсаларҙы, тинем. Әммә аҙаҡ аңланым: баҡсаның шәхси хужаһы булмайынса, уның йәне булмай. Шулай хәл иттем, һәр баҡсаның үҙ хужаһы булырға тейеш. Шуға ла өйҙәрҙе, участкаларҙы бушлай бирәм, һөйгәнемдең тирә-яғында матурлыҡ булһын, тим. Һеҙ контрактта тәҡдим ителгән шарттарҙың ысын булыуына ышанманығыҙ. Был эштең ниндәй маҡсат менән атҡарылыуын аңламанығыҙ. Хәҙер һеҙ бөтәһен дә беләһегеҙ...

Джон Хайцман шымды. Залдағы кешеләр ҙә шым тора бирҙе. Тынлыҡты башта беренсе булып яңъял ҡуптарған ҡатын боҙҙо. Сәхнә янындағы өҫтәлдәрҙең береһе эргәһенә барып, үҙенең фамилияһын контрактҡа яҙҙырҙы ла, уҡып та тормайынса, ҡағыҙға ҡул ҡуйҙы, залдағыларға ҡарап өндәште:

- Эйе, мин ҡул ҡуйҙым. Беренсе булып мин ҡул ҡуйҙым. Тарихҡа шулай инермен. Сөнки мин беренсе. Уйлап ҡарағыҙ әле: бер ир ҙә, минә тиһә, иң бай ир булмаһын, һөйгәненә былдай бүләк эшләгәне юҡ. Ҡабат эшләй ҙә алмаҫ.

- Быға тиклем берәү ҙә былдайҙы уйлап таба алмаған. Тарихта юҡ былдай хәл, - тип ҡысҡырҙы икенсе бер ҡатын.

- Мин һеҙҙе яратам, - тип өҫтәне өсөнсөһө.

- Мин участканы һеҙҙең һөйгәнегеҙ эргәһенән алғым килә, исеме кем уның? - тип һораны дүртенсеһе.

- Уның исеме... - тине лә, Хайцман туктап ҡалды: - Бәлки, ул был турала белмәһә яҡшыраҡ булыр. Яҙмыш ҡушҡан, тип уйлаһын.

Залдағы кешеләр сәхнә эргәһендәге өҫтәлдәр янына ағылды. Сират барлыҡҡа килде. Кешеләр, шатланышып, бер-береһенә, күрше, тип өндәшә башланы. Ҡатын-ҡыҙҙар сәхнә баҫып торған кешегә һөйөү тулы ҡараштарын төбәне. Джон Хайцман үҙ ғүмерендә төүге тапҡыр изгелек энергияһын тойҙо, кешеләрҙең күңелендәге һөйөү, ихлас һоҡланыу уға ла ҡағылды. Был энергия бар ауырыуҙарға дауа һымаҡ. Сәхнәнән сыҡҡанда ул аҡһамай ине. Бер нисә ай дауамында ул биләмәләге эштәр менән үҙе идара итте.

Бер йылдан Саллиҙың виллаһы эргәһенә килгәндә, тирә-яҡ йәшел баҡсаға әйләнә башлағайны. Һөйгәне уның килерен алдан тойоп, ҡаршыһына йүгереп сыҡты.

- Джон, ҡалай һәйбәт килдең әле! Һаумы!

Салли, йәш ҡыҙҙай, эргәһенә осоп тигәндәй килде. Джондың ҡулдарынан тотоп, сәй эсергә саҡырҙы, үҙе бер туҡтауһыҙ шатлыҡтарын бүлешә:

- Беләһеңме, Джон! Тирә-яҡта иҫ китәрлек нәмәләр булып ята! Мин шул хәтлем бәхетлемен! Был тирәлә сүплек булмаясаҡ. Эргәбеҙгә изге күңелле күршеләр килеп йәшәй башланы. Тормош ҡайнай бында! Бизнесыңда берәй уңайһыҙлыҡтар килеп сыҡһа, иҫең китмәһен, Джон. Төкөр барына, бында йәшә лә ҡуй. Беҙ хәҙер аҡсаһыҙ түгел, улыбыҙ бик табышлы контракт төҙөгән. Беләһеңме, былдағы төҙөкләндереү менән ул идара итә. Беҙ тағы бер участка алдыҡ, улыбыҙ унда үҙенең өйөн төҙөйәсәк. Ә беҙ ошонда йәшәйек, теләһәң, әлбиттә.

- Бик теләйем, - тип яуапланы Джон Хайцман һәм өҫтәп ҡуйҙы: - Рәхмәт һиңә, Салли, изгелегең өсөн.

- Ә нинә һеҙ иҫке өйҙә йәшәргә тейеш? - Джон Хайцман тауыш килгән яҡҡа әйләнеп ҡараны һәм үҙ улын күрҙе. Күрмәне, был ирҙең улы икәнен күңеле менән тойҙо. Йәш кеше һүҙен дауам итте: - Аңлауымса, һеҙ минең атайым булаһығыҙ? Әлегә әсәйем кеүек һеҙгә ҡарата йылы тойғоларым юҡ, әммә һеҙ икәүҙең бәхете өсөн яңы коттедж төҙөргә әҙермен.

- Рәхмәт, улым, - тине Джон Хайцман ҡарлыҡҡаныраҡ тауыш менән. Улын ҡосағына алғыһы килде, әммә баҙнат итмәне. Йәш ир үҙе ҡаршы атланы, ҡулын һуҙҙы: - Джон.

- Бына ҡалай һәйбәт! Бер-берегеҙҙе күрҙегеҙ, таныштығыҙ. Яҡындан белгәс, бер-берегеҙҙе оҡшатырһығыҙ, ә әлегә, әйҙәгеҙ, сәй эсергә, - тине Салли.

Өҫтәл артында ул тағы ла һуңғы айҙарҙағы иҫ киткес үҙгәрештәр тураһында һөйләүен дауам итте.

- Күҙ алдына килтер әле, Джон. Ышанаһыңмы-юҡмы, бында бөтәһе лә әкиәттәгеләй бер ваҡиғаны һөйләйҙәр. Бер кеше ошо тирәләге бөтә ерҙәрҙе лә һатып алған. Шунан иң шәп дизайнерҙарҙы, агрономдарҙы, баҡсасыларҙы саҡырып, уларға ғүмерлеккә бушлай участкалар бүлеп биргән. Был ерҙәрҙе ожмахтағылай баҡсаларға әйләндерер өсөн үҫентеләрҙе лә, орлоҡтарҙы ла бушлай таратҡандар. Етмәһә, бының өсөн биш йыл буйы уларға үҙе аҡса түләйәсәк. Был бит ышанмаслыҡ хәл. Ул үҙенең бөтөн капиталын ошоға тыҡҡан, тиҙәр.

- Бәлки, бөтөн капиталын түгелдер, - тип ҡаршы килде Хайцман.

- Һуң, кешеләр бөтәһен дә, тиҙәр. Беләһеңме, ни өсөн эшләгән ул быны?

- Ни өсөн? - тип тыныс ҡына һораны Джон Хайцман.

- Бөтөн ғилләһе бына шунда ла инде. Ул быны һөйгәне ошо матурлыҡ араһында йәшәһен өсөн эшләгән. Әйтеүҙәренсә, ул ҡатын үҙе лә ландшафт дизайны менән шөғөлләнә, ти. Уның виллаһы ҡайҙалыр ошонда була икән. Тик ул ҡатындың кем икәнен берәү ҙә белмәй. Уның кем икәне билдәле булғас, бында ни булырын күҙ алдына килтерәһеңме, Джонни?

- Нимә буласаҡ?

- Нисек инде, нимә буласаҡ? Бөтәһе лә ул ҡатынды күреп танышҡылары, гүзәллек алиһәһен тотоп ҡарағылары киләсәк. Мин, мәҫәлән, бик тә тотоп ҡарағым килә. Бик тә ғәҙәти булмаған ҡатындыр ул. Бәлки, тышҡы ҡиәфәте матурҙыр, йә күңеле сафтыр. "Донъялағы бер ҡатын да ир кешене шундай көтөлмәгән аҙымға этәрә алмай", - тиҙәр бөтәһе лә.

- Эйе, ысынлап та, - тип килеште Джон Хайцман һәм өҫтәп ҡуйҙы: - Былай булғас, нимә эшләйбеҙ, Салли?

- Нисек нимә эшләйбеҙ? - тип аптыраны Салли.

- Сөнки ул бөтәһен дә аптыратҡан ҡатын һин бит, Салли.

Салли телһеҙ ҡалып, Джонға текләйҙе, сөнки ишеткәненә ышанғыһы килмәй ине. Ҡулындағы сынаяғы төшөп ватылды, әммә быға берәү ҙә иғтибар итмәне. Улы ҡапыл һикереп торҙо, атаһы эргәһенә килеп, тулҡынланған тауыш менән өндәште:

- Атай! Атай! Кил, ҡосаҡлайым үҙеңде!

Джон Хайцман улын күкрәгенә ҡыҫты һәм уның йөрәге тибешен ишетте. Бәләкәй Джон, атаһын ҡосаҡлап, һоҡланып шыбырланы:

- Донъяла әле бер кем дә һөйгәненә мөхәббәтен улай аңлатмағандыр. Мин һинең менән ғорурланам! Мин һиңә һоҡланам, атай!

Атай менән ул Саллиға боролоп ҡарағанда, ул ни булғанын һаман да аңлап бөтмәгән ине. Ҡапыл сикәләре алланды, битендәге йыйырсыҡтары юҡҡа сыҡты, күҙҙәренән йәш бөрсөктәре килеп сыҡты. Салли уңайһыҙланып китте, тиҙ генә ире янына килде, ҡулдарынан тотоп, тышҡа алып сыҡты. Бәләкәй Джон атаһы менән әсәһенең акациялар араһындағы бәләкәй өйгә табан йәш үҫмерҙәр кеүек етәкләшеп атлауҙарын ҡыҙыҡһынып күҙәтте.

Ун йылдан йәшәреп киткән Джон Хайцман башҡа ирҙәр менән кафела ултырғанда, шат йылмайып, уларға үҙ хәбәрен һөйләй ине:

- Көсләмәгеҙ ҙә хатта, президентлыҡҡа үҙ кандидатурамды ҡуйыу тураһында уйлап та ҡарағаным юҡ. Ил менән президент булмайынса ла идара итеп була. Үҙ баҡсаңдан ғына. Бына бит һеҙ шәхси өлгөгеҙҙә нисек итеп матур тормош төҙөргә була икәнен иҫбат иттегеҙ ҙә баһа, бөтөн Америка гөл баҡсаһына әйләнеп бара түгелме? Эш былайға барһа, тиҙҙән Рәсәйҙе лә ҡыуып етербеҙ.

- Етербеҙ! Етербеҙ, - тип раҫланы уның һүҙҙәрен Салли, - тик, зинһар, әйҙә, өйгә ҡайттыҡ, Джонни. Балабыҙ һинһеҙ йоҡлай алмай, - ҡолағына ғына шыбырланы: - Һәм мин дә...

Артыҡ оло булмаған ике кеше ҡултыҡлашып, өйҙәренә ҡайтып бара - Джон Хайцман һәм Салли. Яҙ етһә, тормош яңынан башланған кеүек тойола уларға.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН тәржемәһе.**

**(Аҙағы. Башы 10-13-сө һандарҙа).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ҠУШҺОНДОҒОМ - ҠӘРТНӘЙЕМ...

**Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ойоштурған "Заман ауазы" конкурсында БР, РФ Яҙыусылар союздары ағзаһы Мәүлиҙә ӘХМӘТЙӘНОВА "Ҙур проза" номинацияһында 1-се урын яуланы. Уға был урын әле "Ағиҙел" журналында һандан-һанға баҫылып килгән "Мәскәү ҡыҙы" романы өсөн бирелде. Мәүлиҙәне оло еңеүе менән ҡотлап, өс һорау бирҙек.**

➔ **Мәүлиҙә, һәр яҙыусы үҙе тураһында яҙа, тиҙәр. "Мәскәү ҡыҙы" романында шәхси биографияң әҫәрҙең нисә процентын тәшкил итә? Художество уйҙырмаң миҡдары күпме?**

- "Мәскәү ҡыҙы" әле "Ағиҙел" журналының өс һанында ғына сыҡты. Яҙғанда уҡыусыларымдың кемдәр булыуын күҙ алдына килтерә алмай инем, оололармы, балалармы тигәндәй, сөнки уның күп биттәре балалар тормошона арналған, ә оололар тормошо бала күҙлеге аша сағылған. Әҫәрҙә төп геройҙарға ҡағылмаған, ситкә китеүҙәр тип ҡабул ителә торған нәмәләр ҙә күп. Был һөйкәлмә сюжеттар, фәлсәфә ҡороуҙар, әйбер-ҡара, донъя, рус әҙәбиәтенә ҡағылышлы биттәр - балаға икһеҙсикһеҙ йыһандай ишелеп төшкән донъя...

Ниңә автор ғаилә тарихын әҙмә-әҙлекле генә итеп һөйләп сыҡыр урынға, быларҙы бирҙе икән, тип уҡыусының аңламауын, ҡәнәғәтһеҙлеген дә күҙалларға була. Әммә тәү ҡарашҡа "артыҡ" тойолғандай был юлдар - йән эйәһе тәпәйләп йөрөй башлаған көндән алып, уны уратып алған тормош сағылышы. Ошо багаж менән әҙәм балаһы оло юлға сыға, ғүмеренең һуңғы сәғәтенә тиклем бала сағын хәтерләп, шунда тойоп, аңлап ҡабул иткән тәғлимәттәр менән йәшәй.

Һәм бына көтөлмәгән хәл. Журнал уҡыусылар шатландырҙы, әҫәр мин һыҙған сиктәрҙән ситкә китеп бара һымаҡ, уны ололар ҙа, йәштәр ҙә уҡый, төрлө яҡтарҙан, төрлө хәбәрҙәр килә: оҡшаталар. Әҫәр бер күренеш булып үҙ тормошо менән йәшәй башланы, тип әйтергә була. Бер уҡыған тағы уҡыйҙар, бер тыңлағанды тағы тыңлайҙар. Тәүге мәртәбә ишеткәндә музыканы ла һаҡ ҡына ҡабул итәһең: күңелгә ятырмы, юҡмы. Ул тыңлаусыныҡы булып киткәнсе ваҡыт кәрәк. Шуға журнал варианты менән аҙ ғына булһа ла танышҡан уҡыусылар, трилогия китап булып сыҡҡас, уға ҡабат әйләнеп ҡайтыр, әҫәр А нөктәһенән Б нөктәһенә туп-тура ғына алып бармаһа ла, был лабиринтка шатланып инеп китерҙәр тиғән өмөттәмен.

Ә биографияға килгәндә, беҙҙең быуынға сағыштырмаса тыныс заман тура килде: үткәндәрҙең хәтәре ололар ауыҙынан ишеткәне, киләсәк - планда ғына, бөтмәҫтөкәнмәҫ хәҙерге заман, осһоҙ-ҡырыйһыҙ оҙон бер көн, һәм мәңгелек Брежнев бабай - былары етмешенсе йылдар. Улар үтеп, һикһәненселәр башланһа ла, был донъяға мәңгелек булып килгәндәй тойолған ил башлығының яҡты донъяны ҡалдырып китеүен иҫәпләмәгәндә (улар ҙа ябай ғына аҙәми заттар), иҫ китерлек үҙгәрештәр булманы, әммә ниндәйҙер йәнлелек һиҙелә башланы. Оҙон бер көн үтте, уны алыштырып килгән көндәр төрләләнде. Билдәле бер әҫәрҙә әйтелгәнсә, әфәнделәр, боҙ ҡуҙғалды. Шуныһы ла башҡа барып етте: киләсәк тә, үткәндәр ҙә бар, һәм улар бер сыңйырҙың дүңгәләктәре шикелле, бер өлөшөнә генә тейһәң дә, бер юлы зыңлай башлай. Беҙ талондарға аҙыҡ-түлек алыу менән бер рәттән, саҡ күҙе асылған кешеләй, элек тыйылған китаптар уҡырға тотондоҡ, саҡ ишетә башлағандай, яңы тәр музыка әҫәрҙәре тыңланыҡ, картиналар ҡарарға теләүселәр артынан оҙон сиратка баҫтыҡ. Егерменсе быуаттың һуңғы ун йылы ғына ҡараңғы Урта быуаттарҙың ауазы булып хәтерҙә ҡалды. Әммә шундай саҡта ла әҙәбиәт, музыка, һынлы сәнғәт беҙҙең күңелдә байыты, китап магазиндары ишегә алдындағы сират эсемлектәр һатыла торғанынан кәм булманы.



Ниндәй заман тура килһә лә, яҡшымы ул, яманмы, кеше үҙ тормошо менән йәшәй, тарих китаптарында яҡтыртылған ҡайһы бер ваҡиғалар уның тормошонда сағылыш тапмауы ла мөмкин. Бына мин дә ошо йәшкә етеп, күберәк шәхси тормош менән йәшәгәнмен, заман тарихында әһәмиәтле булып тойолған ҡайһы бер нәмәләр мине урап үткән тип әйтә алам. Идеология һәр нәмәнән өҫтөн ҡуйылһа, быныһ нимәгә алып килерен аңланыҡ, беҙ, совет кешеләре, уға артыҡ ҙур урын биреп яңылышҡаныбыҙ ҙа башҡа барып етте.

Был оҙон яуап, ә ҡыҫҡаса ғына әйтеп, проценттарға килһәк, ғөмүмән, математика менән дуҫ түгелмен, яҙғанда төп геройҙың тыуһа, уның "башына инеп" артынан эйәрәһең, ә инде донъяны аңлауын, тормош тәжрибәһе ниндәйҙер дәрәжәлә биографиянан да киләләр, тик был ғына бик аҙ. Нимә тураһында һөйләйһең, замандың, тарихи ваҡиғаларҙы яҡшы белергә кәрәк. Әгәр әҫәрҙе ағас итеп күҙ алдына килтерһәк, уҡыусыға бары олоно, япраҡтары ғына күренә, ә тамырының тәрәнлеген, ниндәй ҡатламдарҙа ятҡанын үҙең генә беләһең. Ҡараламалар менән уҡыусыға һиҙылып сыҡҡанын үлсәү тәрлинкәләренә һалһаң, һуңғыһы шалт итеп өҫкә күтәреләсәк.

➔ **Әҫәрҙәреңдең уҡыусыны ышаныдырыу сифаты ҡайҙан килә тип уйлайһың?**

- Әҙәби әҫәр уҡыусының телен байытырға, аңын үҫтерергә, ҡайһы бер ҡыҙыҡлы тарихтар халыҡ араһына таралырға, уҡығанда һәр һөйләмә аңлашылып ҡына торорға тейеш. "Тейеш"тәр бында бик күп. Ә кем алдында ул шул тиклем бурысҡа батҡан? Уҡыусы алдындалыр. Китаптар киләсәк өсөн яҙыла, тимәк, ул хәҙер йәшәүселәр өсөн киләсәктән килә, алдан яҙыла, шуға уларҙы уҡыуы ла, һөйләп сығыуы ла, иҫтә тотоуы ла бик еңел түгелдер.

Был йөнәттән уҡыусының китап уҡыусы булараҡ төп эше - бар булмышынан югарыраҡ күтәрелергә тырышыу, үҫеү, егерме-утыҙ йылдан һуң уҡыған һымаҡ уҡырға өйрәнеү. Уҡыусы ла, китап та бизмәндә тигеҙ тартырға тейеш, улайһа, кем ишетер, кем аңлар. Уҡыусы автор менән бер өҫтәл артында ултырып, ашыҡмай ғына әңгәмә алып бара. Автор ҡуҙғатҡан һорауҙар уҡыусыны ла борсорға, уйға ҡалдырырға тейеш, кире хәлдә, асыҡтанасыҡ барған әңгәмә килеп сыҡмаясаҡ.

Бына XX быуаттың бөйөк шағирҙарының береһе Осип Мандельштамдың ижадын замандаштары бик аңламаған, ул тәнҡитселәргә: "Я мыслю опущенными звеньями", - тип әйтә торған булған. Ә бөгөн уның шиғырҙары киң таралған, ижады сит илдә лә, Рәсәйҙә лә тәрән өйрәнелә, ғалимдар, бер кем дә уны аша "һикерә алмаған" әле, тиҙәр. Ниндәй шиғырын ғына алма, ул бөгөнгө көн менән ауаздаш. Бына: "Мы живем под собою не чуя страны, наши речи за десять шагов не слышны". Тимәк, тәшөп ҡалған сынйыр быуындарының артында нимә йәшеренгәнен аңлар дәрәжәгә еткән уҡыусылар үҫеп өлгөргән. Шағир кем булһа ла әйтергә тейешле дөрөҫлөктө ярып һалған, аҙаҡ нимә булырын аңлаһа ла әйткән. Был юлдарҙағы халыҡ һәм хөкүмәт араһында барған мөнәсәбәткә бирелгән билдәне беҙҙең класс журналына ла шартлатып ҡуйырға була, сталинизм "халыҡтар атаһы " менән табут эсенә инеп ятмаған, дөпөлдәтә баҫып арала йөрөй.

Был хаҡта башҡорт әҙәбиәтенән дә миҫалдар килтерергә булыр ине. М. Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһында автор Аҡъегет аша бына ниндәй һүҙҙәр еткерә: "Ах шул ҡоллоҡ! Бәндә - бәндә ҡоло, ҡанун ҡоло, йола ҡоло! Үҙҙәренә ҡанун яһайҙар ҙа шул ҡанундың ҡоло булалар!" Ҡомға башын тыҡҡан ҡош кеүек арт һаныңды күтәреп, озаҡ торһаң, ҡолға әйләнеүе оҙаҡ түгел. Шағирҙы үткән заман түгел, әлбиттә, бөгөнгө көндә урынлашҡан тәртиптәр тулҡынландырған, ул шул турала фекерләгән.

Ялған менән һуғарылмаһа, бына ошонда инде һүҙҙең, әҙәбиәттең көсө. Ышандырыһын килә икән, дөрөҫөн ярып һал. Үткән быуат башында халыҡ башынан үткән киҫкен ваҡиғаларға, замана ҡанундарына яраҡлашып, партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарына таянып яҙылған әҙәбиәт өҫкә күтәрелде. Улар замана талабына тура килә, әммә киләсәк өсөн яҙылмаған, шуға бөгөн туҙанға батып ята. Шул уҡ ваҡытта Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәп Биишева, Янибай Хамматов кеүек бөйөк талант эйәләре тыуҙырған, халыҡ тарихы дөрөҫ итеп һүрәтләнгән әҫәрҙәрҙе бөгөн дә ярата уҡыйҙар.

➔ **Һеҙҙең яҡтың мәшһүр шәхесе Рәшит Әхтәри тарихты, тормошто күп белеүен "ҡартнәһенең ҡушһондоғона" (ҡуш һандыҡ, йәғни ике бүлкәтле һандыҡ) бәйләп аңлата ине. Ә бына һинең зиһенеңдә формалаштырыуҙа кемдең йоғонтоһо көслө булды, "ҡушһондоғоң" бармы?**

- Рәшит ағайҙың исеме сыҡҡас, уны иҫкә төшөрөп китәйек, лайыҡ ине ул иғтибарға. Яҡташым, ысынлап та, тәбиғәттән килгән ҙур һәләт эйәһе ине, тик был һәләт сәскә ата алманы, тип әйтергә була. Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә барҙыр, тип ҡотолайыҡ. Һәләт - әле уны "егә" белеү түгел. Атҡа барып төртөлгәс, былай тип тә дауам итергә була, уны тәүҙә йүгәнләйҙәр, һыбай өйрәтәләр, аҙаҡ көн-төн егәләр.

Рәшит Минһаж улының бер шиғыры иҫкә төшә: "Эй, замандар, замандар, /Булды яҡшы, ямандар, /Бер ваҡыт та булмағандыр /Теләктәргә тамандар..." Был юлдар аныҡ кешегә бағышланып яҙылған шиғырҙан алынһа ла, лирик герой шағир үҙе булғанын иҫтә тотайыҡ. Ошондай фекер ҙә тыуа: шағир ғүмеренә, теләгәнә таман заман тыумаған. Ундай заман юҡ, булмаҫ та.

Ысынлап та, трагик яҙмышлы ижад әһелдәре тураһында һүҙ барғанда, фәләнфәлән иртәрәк тыуған, һуңыраҡ донъяға килһә, уның иненә быңдай һынауҙар төшмәҫ ине, тиҙәр. Быңдай һынауҙар булмаһа, икенселәре килеп сығыр, улары енелерәк булыр инеме икән? Йәшлектәре, баласаҡтары Бөйөк Ватан һуғышына тура килгән ҡартиңәйҙәр, атай-инәйҙәр, һуғыш ҡына булмаһын, беҙ күргәнде, һеҙ күрмәгеҙ, бер телем әпәйгә зар булып үҫтек, тинеләр. Барыһына булмаһа ла, беҙҙең быуын ир-егеттәренә лә табылып торҙо: Чернобыль фажиғәһе, Тоцк, Ырымбур, Семипалатинск полигондары, Афғанстан... Был бәләләрҙе өҫтә ултырған бер яуыз көс ойоштурған тиһәләр, уларҙы кисереүе еңелерәк булыр ине. Юҡ шул, бөтә бәләләр ҙә кешенән, ябай кешенән килә.

Ә һүрәт яһау дәресендә күгәрсендәр төшөрөп үҫкән беҙҙең балалар иненә яткаһы бигерәк тә яман, сөнки уларҙы ҡырылыштар артта ҡалды, һине бары бәхетле, тыныс тормош ҡына көтә тип тәрбиәләнек. Әммә улай килеп сыҡманы, беркатлылығыбыҙға тағы бер мәртәбә инандыҡ.

Ваҡыт кешене һынай, алдына үтеп сыҡмаҫлыҡ кәртәләр ҡуя, әммә кеше теләй икән, уға бәхетле итеп йәшәргә бер төрлө партия ла ҡамасаулай алмай. Тик был Рәшит ағайға ҡағылған осраҡта ижади тормошҡа аяҡ сала алған икән. Уның башына төшкән һынауҙар күп булға: үҫмер сағында ана шул һандыҡта яткан, иҫкелек ҡалдығы тип табылған, боронғо китаптарҙы илап-илап яндырырға тура килә, әрме хеҙмәтендә махсус тәғәйенешле частар составында Кореяла барған һуғышта ҡатнаша, ә алда уны тағы ла яманыраҡ һынауҙар көтөп торған икән. Байрам көндәре тура килеп, Рәшит ағай бөтә республикаға таралаһы гәзитте үҙе типографияға ебәрә, был һанда милли мәсьәләләр күтәргән мәҡәләһен баҫтыра. Шағир халҡының теҙгене бушаңҡыраҡ, уйламайыраҡ баҫылған был мәҡәлә уны бейеккә үрләп барған баҫҡыстан бәреп төшөрә, нәшриәттә инде баҫтырырға йыйылған шиғыр китабы тарҡатыла.

Рәшит Минһаж улы тыуған мәктәбендә уҡытыусы булып, хеҙмәт хаҡы алып (колхозсыларға йүнләп түләмәйҙәр ине) эшләй. Ағай ғаилә ҡороп, өй һалып, балалар үҫтереп, бына тигән йәшәй. Ижад та итә бит, гәзит- журналдарҙа уның мәҡәлә, фельетондары, шиғырҙары баҫылып тора. Тик улар ҡайһы бер шағирҙарҙыҡы кеүек, ҡулдан-ҡулға күсерелеп йөрөтөлмәне, шиғыр юлдары халыҡ араһына таралманы. Рәшит ағайҙың һәләте, әлбиттә, гәзит ҡағыҙында, бер йыйынтығы йәш шағирҙар менән "дөйөм атаҡта" баҫылған, йәки ғына, ус яҫыуындай өс китапка торорлоҡ түгел ине. Әммә нимә ҡалған, шул бар, юғы - юҡ. Был тормоштоң һынауҙарын үтергә Рәшит ағайға ҡушһондоҡ та ярҙам итә алмаған.

Һораузың икенсе өлөшөнә күсер алдынан шуны әйтеп ҡуям, үҙең тураһында һөйләүе енел түгел. Беҙ урамда үҫкән балалар. Ауылда балалар баҡсалары асылыу менән маҡтанырға ярат һаҡ та, беҙҙең заманда уларҙың булмауы беҙгә файҙаға ғына булған. Улар шәп булһа ла, баланы ғаиләнән айыра, әрһеҙлеккә өйрәтә, баланың теле боҙола. Ә өйҙәге бала ата-инәһе, ҡартинәһе мөхәббәтенә сорналып, йыр, әкиәттәр, йомаҡтар тыңлап үҫә. Ғаиләләрҙә быуындар бәйләнеше өҙәлөү, ул баланы бик күп нәмәнән буш ҡалдыра. Уҙаллы тормошҡа тәпәйләп киткәнсе, ҡулдарым ҡартинәйемдең йылы усында йөрөмәһә, мин фәҡир бер бәндә булыр инем. Беҙҙең ҡартинәйҙәр үҙҙәре бер ҡушһондоҡ булды.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ Баймөхәмәте һуғыштан ҡаты яраланып ҡайта. Ғәйшә дарыу үләндәре эсереп, гел үләнгә урап, ирен аяҡҡа баҫтыра. Тағы ике балаға ғүмер биреп, арыу ғына йәшәй башлағанда, 1947 йылда ире фажиғәле һәләк була.



ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҠМАС - ЯРАТҠАН АШ

■ Рәсәй халҡының иң яратҡан ашы булып туҡмаслы аш тора икән. Икенсе урында борсаҡ ашы тора, тигән фекерҙә тикшеренеүселәр, өсөнсө урынға бәшмәктән бешкән аш сыҡҡан. Ә бына борщ дүртенсе урында ғына. Быға тиклем Рәсәйҙә иң популяр аш борщ тигән фекер нығынғайны. Ә бына рассольник, щи, солянка был рейтингта иң аҙаҡҡы урындарҙа.

■ Йоҡо туймау һәм арыу иммуниттетты ҡаҡшата, тигән фекерҙә Скандинавия һаулыҡ һаҡлау үҙәге табибы Ольга Чистик, тип яҙа "Известия" гәзите. Белгес әйтеүенсә, сәләмәтлеккә иғтибар йыл әйләнәһенә булырға тейеш. Вирустарға бирешмәҫ өсөн йоҡо һәм ял режимын күҙәтергә кәрәк, шул саҡта ғына бер туктауһыҙ һалҡын тейҙереп ауырыуҙан туҡтарһығыҙ. Шулай уҡ витаминдар һәм микроэлементтарға ҡытлыҡ булмаҫҡа тейеш һәм дөрөҫ туҡланыу ҙа, әүҙем тормош алып барыу ҙа мөһим. Миҙгелгә ҡарамайынса, тимер кимәлен тикшереп торорға, иммунитетҡа йоғонто яһаусы Д3 витаминын ҡабул итергә, кәңәш итә Ольга Чистик.

■ Юғары ҡан баҫымы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен арттыра. Элегерәк гипертония өлкән быуын сире тип иҫәпләнә ине, әммә хәҙер ул "йәшәрә" һәм 50 йәшкә тиклем пациенттар күбәйә, ти табип Надежда Подкорытова. Гипертония мәлендә даими рәүештә артериаль баҫым күтәрелә. Ҡан тамырҙары гел баҫым кисерә, йөрәккә ҡанды ҡыуыу ауырға төшә. Бынан тыш, юғары ҡан баҫымы йөрәк-ҡан тамырҙары менән бәйле төрлө ҡатмарлыҡтар тыуҙыра, артабан баш мейеһе, бөйөрҙәр, башҡа ағзалар зыян күреүе ихтимал. Подкорытова билдәләүенсә, артыҡ тән ауырлығы менән яфаланғандарҙа, тоҙҙо күп ҡулланғанда, алкоголь менән "дуҫ" булғандарҙа был сир 60-ты үткәс барлыҡҡа килеүсән. Уның нәҫелдән күсеүе лә билдәле. Рәсәйҙә хәҙерге мәлдә өлкәндәрҙең 30-45 процентында гипертония осрай, ҡарттарҙың 60 проценты даими рәүештә юғары ҡан баҫымынан дауаланырға мәжбүр, ти табип. Ә бына йәштәр ҡан баҫымы күтәрелеүен өлкәндәргә ҡарағанда ла ауырыраҡ кисерә. Уларҙа был сир тәмәке тартыу, артыҡ ауырлыҡ, гормональ тайпылыштар, климакс, стресс менән бәйле.

■ Стилист һәм Senec компанияһының креатив директоры Слава Рябоконь әйтеүенсә, крандан аҡҡан һыуҙа сәс йыуыу уларға ныҡ зыян килтерә. Был һыуҙа һелте юғары кимәлдә, шуға ла сәстәргә бер нисә этаптан торған ҡарау кәрәк буласаҡ. Кондиционер сәстәрҙең pH кимәлен нормаға килтерә, улар ялтырап, йомшаҡ булып ҡаласаҡ. Башта сәсте ике тапҡыр шампунь менән йыуырға, һуңынан маска һәм шунан ғына кондиционер ҡулланырға кәңәш ителә. "Маска менән кондиционерҙы еүеш сәстәргә бар оҙонлоғо буйынса һөртергә, ә сәс төптәренә теймәскә", - тип аңлата Рябоконь. Шулай уҡ шампунь һәм кондиционерҙарҙың ҡабына яҙылған ҡулланыу буйынса кәңәштәргә лә мотлаҡ ҡолаҡ һалырға кәрәк, ти стилист, сөнки уларҙың үҙенең нескәлектәре булыуы ихтимал. Мәҫәлән, кондиционерҙың сәстәрҙә тотоу ваҡыты унда мотлаҡ яҙыла. Шулай уҡ кондиционерҙы сәстәрҙән тулыһынса йыуырға тырышырға ла кәрәкмәй, уның бер аҙ толомдарҙа ҡалыуы, кирәһенсә, яҡшыраҡ та.

ХӘТЕРКИТАП

# ДУХТЫР ҒӘЙШӘ

**Беҙ бала саҡта ауылыбыҙҙа Ғәйшә, Фатима, Мәрйәм исемле ҡатындар күп булды. Һәр берeһе бишәр-алтышар инде. Халыҡ уларҙы бутамаҫ өсөн ирҙәренең исемдәрен ҡушамат итеп алып атап йөрөттө: Мансур Мәрйәме, Йосоп Ғәйшәһе, Зәкир Фатимаһы һ.б. Мин һөйләйәсәк Ғәйшә инәйҙең бер үҙенә өс исем: Баймөхәмәт Ғәйшәһе, оҙон Ғәйшә, малдарҙы, кешеләрҙе тәрбиәләгән өсөн "духтыр" Ғәйшә тип йөрөттөләр.**



Ҡайғыны ла, ауырыуҙы ла күп күргән был инәй мәрәкәселлеге, кешеләрҙе көлдөрөп, күңелдәрен күтәреп йөрөүе менән хәтерҙә уйылып ҡалған.

Таҡмаҡ сығарырға ла бик оҫта ине ул. Бер кеше таҡмаҡ әйтһә, уға ҡаршы тиҙ генә яуабын да таба торғайны. Атайымдың яҡын ғына ағаһының ҡатыны булараҡ, ул беҙгә йыш ҡына килеп йөрөнө.

Ғәйшә инәй 1907 йылдың 16 ноябрендә Ишембай районы Ҡолғона ауылының уҡымышлы кешеләре Хәмзә һәм Зөлҡәғиҙә Дилмөхәмәтовтарҙың ишле ғаиләһендә донъяға килә. Дүрт-биш йәштәр тирәһендә бик ҡаты ауырып китә ул. "Бер мулла ғына йәнемә керә алды, бауыр ашатырға ҡушты, гел мәте балсыҡты һурып ашап йөрөй торғайным",- тип хәтерләр ине.

Илдә граждандар һуғышы бара. Ауылға берсә ҡыҙылдар, берсә аҡтар баҫып килеп керәләр ҙә, халыҡты талап, ас-яланғас итеп, миктәтеп китәләр. Ғәбделвәхит ағаһын, олораҡ булғас, үҙҙәре менән һуғышҡа алып китәләр. Атаһы, Хәмзә олатай, ғаиләһен ҡурсып, уларҙы йә баҙ аҫтында, йә һарай башында йәшереп ҡуя торған була. Граждандар һуғышынан һуң аслыҡ башлана. 1921 йылда Ғәйшәнең атаһы ҡапыл ғына вафат була. Етем балалар өсөн Иҫке Һәйеттә приют асалар, бик күп бала-сағаны шунда алып киләләр, араларында ололар ҙа була. Күп кенә балалар аслыҡтан шешенеп үлә. Ғәйшәнең Фаиза апаһы, аяғына саңғы кейеп, балаларға йөкмәп аҙыҡ-түлек ташый. Хәлһеҙ, ас бала-сағаға тимер мейестә ҡар иретеп эсерәләр, иретелгән һыуҙа ризыҡ бешереп ашаталар. Ғәйшә Фатима исемле һеңлеһен тураһында: "Тимер мейес өҫтөндәге өҫтә ябылмаған һыуҙы эсеп үлде", - тип һөйләй торғайны. Шуға ла: "Кис булһа, ризығығыҙ өҫтөн "бисмилла" итеп ябығыҙ", - тип иҫкәртеп торор ине.

Ун алты йәше тулғас, Ғәйшәне бер муллаға көсләп, икенсе бисәлеккә кейәүгә бирәләр. Әсәһе лә: "Бар ҙа ҡуй, ҡыҙым, мулла кеше бит, аслыҡтан интекмәҫһең, туҡ булырһың", - ти. Совет власы урынлашҡас, муллаһы саҡ төрмәгә ултыртмайҙар. Уны төрмәнән алып ҡалыу өсөн ауыл кешеләре Ғәйшәгә: "Көн итеүҙәре үтә лә ауыр булғанлыҡтан, туғандарҙы аслыҡтан алып ҡалыу зарурәтынан уға кейәүгә барҙым, тип әйт", - тип аҡыл бирәләр. Шулай итеп, мулла төрмәгә ултырыуҙан ҡотолоп ҡала.

1929 йылда Ғәйшә Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылы кешеһе Йомағолов Баймөхәмәткә тормошҡа сыға. Тәүге балаһы, Әлмөхәмәт исемле улы, туғыҙ айлыҡ ҡына сағында үлеп ҡала. 1932 йылда - Әхтәм, 1936 йылда Ғәбиҙә исемле ҡыҙы донъяға килә. Ғәбиҙәһенә ике йәш булғанда Ғәйшә ҡаты ауырыуға һабыша. "Ике-өс ай больницала ятҡандан һуң ғына өйгә ҡайтарҙылар. Абдрахман мәзин етe тапҡыр Ҡөрьән сыҡты, шунан һуң ғына арыуланып, аяғыма баҫтым", - тип хәтерләр ине инәй.

Ире Баймөхәмәт 1941 йылда һуғышҡа киткәндә өсөнсө балаһы Байрамғәлигә ни бары бер генә йәш була. Ҡолғонанан әсәһе балаларҙы ҡарашырға ярҙамға килә. Ғәйшәнең әсәһе халыҡ ижадын, гөрөф - ғәҙәттәрен яҡшы белгән, боронғо йырҙарҙы матур итеп башҡарған ағинәй була. Халыҡ медицинаһын бик яҡшы белә. Ғәйшә инәй әсәһенең теләнең бер яғына еп, икенсе яғына энә һалып, теле менән энә һаплағанын һөйләп аптырата торғайны.

Ире яуға киткәс, бөтә ауырлыҡтарҙы үҙ иңендә күтәрергә тура килә Ғәйшәгә: өс баланы ҡарау, хөкүмәткә ҡап, септә һуғыу, арҡан үреү, һалабаш төшөрөү, һал ағыҙыу һ.б. Аттары булмағас, күпселек осраҡта утынын да, бесәнен дә ҡатын-ҡыҙҙарҙың, бала-сағаларҙың үҙҙәренә һөйрәп ташырға тура килә. 1943 йылда, Үмәр ыҙмаһында, йыла һыҙырып, мал аҫрап ятҡан ваҡытта Баймөхәмәте һуғыштан ҡаты яраланып ҡайта. Ғәйшә дарыу үләндәре эсереп, гел үләнгә урап, ирен аяҡҡа баҫтыра. Тағы ике балаға ғүмер биреп, арыу ғына йәшәй башлағанда, 1947 йылда ире фажиғәле һәләк була. Күп тә үтмәй, әсәһе лә был яҡты донъя менән бәхилләшә...

Ауыл халҡы юҡҡа ғына "Духтыр Ғәйшә" тигән ҡушамат таҡмай уға. Ул совет власы йылдарында традицион булмаған дауалау алымдары тыйылһа ла, мал хаҡы, бала хаҡы, уларҙың гонаһы юҡ бит, тип, кешеләргә ярҙамға ашығыр ине. Мәҫәлән, С. ағайҙың тәнен экзема баҫа. Уны нисек шәбәйттен, ауырыуы ҡурҡыныс бит, тиҙәр уға: "Мин уны ҡулым менән дауаламайым бит, кеше үҙен-үҙе дауалай". Тал ҡайыры алып, уны ҡайнатып, мунсала йыуынырға, ҡатыҡ һыуына тоҙ һалып сайҡанырға ҡуштым, унан май өшкөрөп бирҙем. Ә Сәлимгәрәйгә әсегән ҡаймаҡ өшкөрөп бирҙем", - тип яуаплай.

Ғәйшә инәйҙең кешеләрҙе дауалағанда артыш, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, ҡарағат япраҡтары, бәгәнәш, әлморон тамыры, емеше, йөмшегән емешен, бөрөләрен, һарыҡтың эс майын, имән бәшмәген ҡуллана торғайны. Имән бәшмәген ҡуҙ тейеүҙән быҫҡытыр ине, һыҙлаған ерҙәргә һөртөргә балауыҙлы майҙы ҡулланғаны иҫтә. Әлморондо ҡуҙ тейеүҙән ҡайнатып эсерер ине, баланы ҡойондорорға һәйбәт, ти торғайны.

Ғәйшә инәйҙең әллә ҡасанғы хәл-ваҡиғаларҙы, кешеләрҙең исемдәрен хәтерләүенә аптыраһаҡ, ул: "Мин бала саҡта ҡуҙғалаҡты күп ашаным, ул хәтерҙе яҡшырта. Ҡөрьәнде лә бер-ике тапҡыр уҡыһам, ятлап алам", - ти торғайны. Йөйен үҙе һымаҡ фронтовик ҡатыны Дәғиә инәй менән иҡәүләп, май үләнөнә - таҡыябаш, ҡайын, йүкә япрағына; ҡом бешкәс, ҡомға ятырҙар ине.

Ғәйшә инәйгә Өфөнән бер профессор килеп, ауырыуҙарҙы нисек тәрбиәләүе, нимәләр ҡулланыуы тураһында һораша. Золом шауҡымы кешеләр аңында уналмаҫлыҡ тәрән эҙ ҡалдырған шул, ул йылдарҙа бер йыр, таҡмаҡ өсөн дә кешене төрмәгә ултыртҡандар бит. Үҙ ғүмерендә күпте күргән, күпте кисергән инәй ул профессорға бик асылып китмәй, кешеләрҙе өшкөрөп дауалауы тураһында өндәшмәй, төрлө үләндәр менән дауалауы тураһында ғына әйтә.

Ауылда бик күп балаларҙың кендек әбейе лә булды Ғәйшә инәй. Бала-сағаны бик ярата ине, әкиәт һөйләр, кәнфиттәр таратыр, уйындар өйрәтер ине. Һуғыштан һуң тыуған кесе балалары Рамаҙан ағай, Фәйрүзә апай үҫкәндә уларҙың өйөнән бала-саға өҙөлмәне. Балаларҙың өҫтәре бысранһа, әсәйегеҙ әрләп ҡуймаһын, тип, кейемдәрен йыуып, киптереп, сәйҙәр эсереп ҡайтарыр ине. Һыуҙың сауабы ҙур, тип, ҡыҙҙарҙан оло кешеләргә һыу ташыта торғайны. Ғәйшә инәйҙән: "Кешегә яҡшы, изгелекле булығыҙ. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара. Кешенең әйберенә теймәгеҙ. Үлгәс, төймә урлаһаң - төймә аша сығырһың, энә урлаһаң - энә аша сығырһың. Үлсәүгә кермә, ғәйбәткә кермә, етем ризығын ашама, шунан да ҙур гонаһ юҡ", - тип балаларға әйтеп ултырғаны хәтерҙә.

Уйлайһың да, хайран ҡалам: шул тиклем дә көслө ихтыярлы ысын ағинәй булған икән ул Ғәйшә инәй. Һуғыш ваҡытында аслыҡта ла ураҙаларын ҡалдырмай, әсе ҡатыҡ эсеп, билен һыға быуып, план-нормаларын да үтәгән, хатта кәбән һалғанда, бүсере килеп сығып, яулыҡ менән эсен бәйләп йөрөгән. Ғәйшә инәй тик ултырырға яратманы, хәрәкәттә-бәрәкәт тип, гел йәйәү йөрөнө. Ни хәтлем ауыр эштәрҙә эшләһә лә, шөкөр, 88 йәшкә тиклем йәшәне инәйебеҙ. Бына шундай инәйҙәр булды элекке замандарҙа. Улар өлгөһөн, тәжрибәһен ысын тәрбиә мәктәбе һабаҡтары итеп һөйләргә лә һөйләргә кәрәк.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**

СӘХИФӘНӘН

**Йәнтүрә тигән ниндәйҙер яугирҙың башҡорт булғанын, француздар менән ниндәйҙер һуғышта ҡатнашҡанын белеү түгел, үҙ атайымдың Бөйөк Ватан һуғышында йөрөп ҡайтҡанын да белмәй инем әле бала саҡта. Мәктәптә уҡый башлағас, нисәнселер класта Йәнтүрә тураһында хикәйә уҡығайныҡ та, бик төшөнөп етмәнем, тасуирланған ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтыра ла алманым. Тик "бисә, бисәм" тигән һүҙҙәр өсөн оялып ултырғаным иҫемдә ҡалған.**

# БАШҠОРТ ЙӘНТҮРӘ ҺӘМ...

## һөлөк терапияһы

Ә һөлөктәрҙе күргәнем бар ине. Күршеләребеҙ Фазила һәм Хәшиә инәйҙәрҙең тәҙрә төптәрендә һыулы банка эсендә була торғайны улар. Банкаларының ауыҙын марля ҡатлап ябалар ҙа, эрзинкә менән бәйләп ҡуялар ине инәйҙәр.

- Сығып ҡасмайҙармы? - тип һорайым Фазила инәйҙән.

- Сығып ҡайҙа барһындар, һыуһыҙ үлә бит улар. Сыҡһа ни, тотоп алып, кире һалаң аны иҙән ярығына төшөп китмәҫ борон.

Аҡса бирәм, тотоп бир әле, тиһә, антым -шинтым, тотмаҫ инем!

Ямаҡай, дөм-ҡара, әшәке нәмәкәйҙәр. Ни күҙҙәре юҡ, ни йөҙгәс һымаҡ нәмәләре. Банка быялаһына йәбешеп торалар шунда. Ҡымшанмайҙар ҙа, исмаһам. Банканы ҡыбырлатып, һыуын сайҡалтып та ҡарайым, ысҡынһындар, тип. Шунан Хәшиә инәйҙән һорайым:

- Нимештәп йөҙмәйҙәр ул?

Инәйҙең яуабы бала ғына башыма бөтөнләй һыймай:

- Тамаҡтары туҡ буғанға.

Һыуҙары ҡайһы саҡта бысрап китә, бурьяҡланып. Тағы һорайым:

- Анау ҡара нәмәкәйҙәре нимә ул?

- Эстәрен таҙарталар, - ти Хәшиә инәй иҫе китмәй генә. Һөлөктәрен таҙа һыуға һала ла банка ауыҙын тағы бәйләп ҡуя. Һөлөктәре был юлы нисектер нәҙегәйгән, теремекләнгән, йөҙәләр, банкаға йәбешеп торғандары теге саҡтағы һымаҡ йоп-йоморо түгелдәр.

- Нимештәп ябыҡҡандар?



- Асыҡҡандар, ызнашит.

Һы. Төпсөнмәйем башҡаса. Күңеле килмәһә:

- Әйҙә, ыступай, далуй дамуй, башты ҡаңғыртма, - тип сығара ла ебәрә ул Һәшөләс ( йәғни, Хәшиә өләс).

...Мәктәптә уҡыта башлағас ҡына белдем һөлөктөң нимә икәнен. "Һаман да аңламайһығыҙ! Һеҙгә өйрәтә торғас, үҙем дә белеп бөттөм инде", - тигән ти бер уҡытыусы. Мин дә шулай булдым. Йәнтүрәне лә, француз яуын да, башҡорттарҙың тормош-көнкүрешен, тарихын өйрәнгән, йырҙарын, риүәйәттәрен һ.б. яҙып алған рус тикшеренеүселәре яҙмалары аша байтаҡ һорауларыма яуап алдым. Һөлөк тураһында ла шул иҫәптән.

Һөлөк менән дауалау - гирудотерапия - хәҙер киң таралыу алды. Ә мин эстән генә ғорурланып алам. Һии, тием, ауыҙ һыуҙарығыҙ ҡороп, миңә һөйләмәһәгеҙ ҙә беләм мин. Бына һеҙ беләһегеҙ микән әле Йәнтүрә тигән башҡорттоң бынан теүәл 210 йыл элек, поход мәлендә, үҙендә һөлөк менән эксперимент үткәреп, юғары ҡан баҫымынан арыныуын? Организмының әкәл сиккә сығып, арыуынан, йонсоуынан һөлөктәр ярҙамында ҡотолоуын?

...Шул саҡтағы тарихи ваҡиғалар, Парижғаса барып етеүе тураһында инде ологайған Йәнтүрә бер йәйҙә башҡорт старшинаһына ҡымыҙ менән дауаланырға килгән рус кешеһе Василий Зефировҡа үҙ тирмәһендә үҙе һөйләй. Йәнтүрәнең дә, бисәһенең дә батырлыҡтары өсөн миҙалдары була, тирмәлә Йәнтүрәнең тимер кейеме лә, яу ҡоралдары ла элеүле тора. Быларға ҡарап, Зефиров хайран ҡала.

Бына Йәнтүрә башҡорттоң француз яуы тураһындағы хикәйәләренән һөлөк хаҡындағы өҙөгө:

- Беҙҙәң ғәскәр Дрезденға бик ҡыҙыу барҙы. Беҙ өс көн, өс төн ат өҫтөнән төшмәнек. Ул ваҡытта ауғыс урталары ине. Эҫе һауа тындарҙы ҡура. Мин дә, арығанлыҡтан, ат өҫтөндә көскә-көскә бара инем. Ахырҙа, бөтөнләй хәлдән тайып, атымды урман ситенә борҙом да үләнгә йығылдым. Бер ҡасан да тыуған яҡтарымды ҡайтып күрә алмам инде, тип уйланым. Минә бик ҡыйын ине. Бисәм буҫығып-буҫығып иланы. Ҡапыл һыу эскем килде. Шул саҡ күҙем юлдан алыҫ булмаған ерҙә күтерле соҡорға оҫҡашған бер күлгә төштө. Бисәм ярҙамында көс-хәл менән шунда шыуышып барып еттем. Сисенеп, һыуға төшөп яттым...

Бер сәғәттәй ятҡас, һыуҙан сыға Йәнтүрә. Ҡатынының ҡото оса! Йәнтүрәне муйынынан алып табанына тиклем һөлөк һырып алған! Өсөнсө тапҡыр һыуҙа ятып сыҡҡанда, һөлөктәр тамам туйынып, үҙҙәре төшөп бөткән була.

- Тәнемдәге ауырлыҡ ҡул менән һыпырып алғандай булды. Атыма һикереп мендем дә, бисәм менән үҙебеҙҙекеләрҙе ҡыуып еттек.

Бына шулай, дуҫтар! Гирудотерапияны, бәлки, башҡорт Йәнтүрә асҡандыр ҙа әле... Юҡ, тип әйтеп булмай.

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА.**

**(В. Зефировтың "Рассказы башкирца Джантюри" тигән яҙмалары файҙаланылды).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Аңдың уныштка алып килгән дүрт торошон ҡулланыу һәләтен үҫтерегеҙ. Һәр тема: тикшереү, интуиция, дүрт йәшлек бала самимилығы һәм пуля ла үтеп инә алмаҫлыҡ менталлек буйынса күнекмәләр эшләүгә бәрәр аҙна ваҡыт бүлегеҙ.

Уңыш дошмандарын алышҡа саҡырығыҙ һәм үҙегеҙҙең көсһеҙлөгөгөҙҙө танырға, уңыштың өс союздашын: ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, елбәҙәклек, тормоштағы үҙ ролегеҙҙе ҡулланырға өйрәнегеҙ. Ролегеҙгә килгәндә, был тормошта үҙегеҙҙе тиҙерәк табырға һәм ошо ролдә башҡарып ҡарарға тырышығыҙ. Парашютһыҙ ғына.

Юл күрһәтеүсе һәр йондоҙ категорияһында теләктәрегеҙҙе һайлағыҙ.

Мейегеҙҙе лазер кеүек эшләргә өйрәтегеҙ, әммә энергияғыҙҙы тулыһынса туплау өсөн теләктәр һанын сикләргә кәрәклеген онотмағыҙ.

Хыялығыҙ ниндәй юл менән тормошҡа ашҡанын асыҡлар өсөн һорауҙар һәм раҫлауҙар ысулын ҡулланығыҙ.

Беҙ юлдың бына ошо өлөшөн үттек. Был материалдың асылы: "Һорағыҙ - алырһығыҙ" тигән ябай принципҡа ҡоролған. Бик ябай күрһәтмә һәм уны тап һеҙ уҡынығыҙ.

Әлбиттә, үҙендә ышаныс булдырыу өсөн ҡайһы берҙә тирләп-бешеп эшләргә лә кәрәк, шуға күрә форсаж тоҡандырырҙан алда тағы бер нисә кәңәш ҡамасауламаҫ.

### Телегеҙҙе тешләп торогоҙ!

Хыялдарығыҙ тураһында башҡаларға һөйләһәгеҙ, бер нәмәгә лә эйә булмаясаҡһығыҙ һәм күпте юғалтасаҡһығыҙ, сөнки һәр уйығыҙ, тулҡын кеүек икән, кемдеңдер хыялығыҙҙы юҡҡа сығарырлыҡ йоғонто яһаған тулҡын ебәреүе кәрәкмәй. Әгәр өй тураһында хыялланһағыҙ, бер кем менән дә был хаҡта кәңәшләшмәгеҙ. "Нимәгә һиңә ул, башың хәстәрҙә сумыр. Ҡайҙалыр барам тиһең, кемдәләр үләнен сабып, күршеләреңде өйөңдә ҡарап, почтаңды алып һ.б. торорға һөйләшеп килешергә кәрәк. Кәрәкмәй..." - тиһә, шунда уҡ башығыҙҙа шик тыуасаҡ. Әгәр теләк мискәһенә бер тамсы ғына шик эләкһә лә, хыял тулҡыныгыҙ менән хушлашырға тура киләсәк, хыялығыҙҙы шунда уҡ ерләһәгеҙ ҙә була! Шуға уй-хыялдарығыҙҙы үҙегеҙҙә генә тотоғоҙ.

### Тормошоғоҙҙоң өс ҡыры

Һәр нәмәгә иғтибар итеп, күҙегеҙ күргәндең барыһына ла аңлатма табырға тырышығыҙ. Хәҙер, ғәҙәти булмаған ваҡиғалар яуап биреп, тура юл күрһәтеүе тураһында белгәс, һәр ваҡыт әҙер булырға кәрәк. Хәҙерге ваҡытта йәшәгеҙ, яу булығыҙ.

Бер нәмәне хәтерегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: күҙегеҙ күргән һәр нәмә - ул һеҙҙең уйҙарығыҙҙың сағылышы.

Әгәр коллегағыҙ һәр саҡ аҡса әҙ булыуына зарлана икән, һеҙҙе лә шул уҡ һорау борсомаймы? Үҙегеҙ ҙә финанс тотороҡһоҙлоғонан ыҙаламайһығыҙмы - хис-тойғоларығыҙҙы ентекле тикшерегеҙ. Үҙегеҙгә, әгәр аҡса менән бер ниндәй проблема булмаһа, тышҡы йыһаным мине финанслауҙы туктатыр ине, тип әйтегеҙ. Һеҙгә барыһын да эске хис-тойғолар ағзалары хәбәр итеп тора - ул һеҙҙең шәхси инаныуҙарығыҙ, уйҙарығыҙ, ҡурҡыуығыҙ сағылышы. Һәр нәмәгә ошо күҙлектән ҡарарға өйрәнһәгеҙ, бик тиҙ алға китерһегеҙ, сөнки тормошоғоҙҙа ҡабатланып торған ваҡиғалар үтелгән юлды һәм үтеләсәген дөрөҫ баһаларға ярҙам итә.

**Пьер МОРАНСИ.**

ШУНДАЙ ТӘРТИП

# ТЕЛЕФОНДАН НИСЕК АРАЛАШАҺЫҢ?



**Телефон күптән инде көндәлек тормоштоң айырылғыһыҙ атрибутына әйләнде. Телефондан матур итеп һөйләшә белеү - заман талабы, шуға күрә был өлкәгә ҡағылышлы этикет ҡағиҙәләре менән таныш булыу һәр кем өсөн мөһим.**

- Ашаған-эскән саҡта, яныҡыҙҙағы кеше менән һөйләшкән саҡта телефонды алмау хәйерле.
- Телефон аша аралашҡанда икенсе кешегә иғтибарығыҙҙы бүлмәгеҙ. Ындай аҙым шылтыратыусыға ҡарата ихтирамһыҙлыҡ булараҡ ҡабул ителәсәк.
- Аныҡ ситуацияға ҡарап, һөйләшеү темпын һайлағыҙ. Яҡындарығыҙ менән аралашыу ай, ышанысны тонда булһа, эшлекле һөйләшеү тиҙ, аныҡ һәм асыҡ булырға тейеш. Шуға күрә әйтергә теләгәнде алдан уҡ уйлап, һорауҙар әҙерләп, яҙыр өсөн ҡағыҙ-ҡәләм хәстәрләп ҡуйыу мөһим.
- Эшлекле шылтыратыуҙар өсөн уңайлы ваҡыт һайлағыҙ. Ғәҙәттә, бындай һөйләшеүҙәр иртә таң һәм кискеһен алып барылмай.
- Телефон ярҙамында аралашҡанда һеҙҙең уй-фекерегеҙҙе сағылдырыусы берҙән-бер ысул - ул тауыш. Телефон, ғәҙәттә, тауышты боҙоп ишеттерә һәм һеҙҙең телмәр сымдың икенсе осондағы кеше өсөн мәләйем яңғырамаҫҡа мөмкин. Шуға күрә, үҙегеҙҙең тауышты аҙҙырып тыңлап ҡарарға һәм кәрәк урында яңғырашын үҙгәртеү тураһында ҡайғыртырға кәрәк.
- Телефон аша һөйләшеүгә хас үҙенсәлек - күҙгә эффекты тураһында онотмағыҙ. Әгәр ҙә сымдың бер осонда шым ғына һөйләһәләр, икенсе оста ла яуапты ошондай уҡ тон менән яуап бирәсәктәр. Һәм, тәбиғи, ҡысҡырып һөйләгәндә күтәренке тауыш менән бирелгән яуапты ишетәсәкһегеҙ. Шуға күрә, тыныслыҡ һаҡлап, тауышығыҙҙың көсләнгән арттырмай һәм кәметмәй генә һөйләшеүегеҙ һәйбәт әңгәмәгә булышлыҡ итер.
- Һөйләшеү барышында әңгәмәләшегеҙгә мотлаҡ исеме (рәсми осраҡтарҙа исеме һәм атаһының исеме) менән өндәшегеҙ. Кемгәләр шылтыратыр алдынан уның исемен белегеҙ, онотмаҫ өсөн яҙып ҡуйығыҙ. Ошо бәләкәй генә ҡағиҙәләрҙе онотмау һеҙҙең турала яҡшы тәьсораттар ҡалдырыр.
- Шылтыратыуға сәбәпсе булған эштән тыш башҡа ваҡ әйберҙәргә ҡағылышлы һөйләшеүгә күсмәгеҙ. Әгәр ҙә үҙегеҙҙә бындай ҡатлыҡлы тоймаһағыҙ, һөйләшеүҙе туктатыу өсөн уңайлы (мәҫәлән, "етәксем саҡыра" йәки "телефонды бушатыуҙа һорайҙар") ғына берәй сәбәпте алдан уйлап ҡуйығыҙ.
- Телефон трубкаһын һаубуллашҡандан һуң, ғәҙәттә, шылтыратыусы һала.
- Хеҙмәт урынында телефон трубкаһын күтәргәс, ойошманың исемен әйтергә онотмағыҙ. Был шылтыратыусының үҙенә тейешле урынға эләгеүен аныҡлаясаҡ.
- Әгәр ҙә һөйләшеү барышында бәйләнеш өҙөлһә, беренсе булып шылтыратыусы кире шылтыратырға тейеш.

✓ **Боронғолар уны өҙгән кешенең ғүмере ҡыҫҡа, заяға була тип ышанған. Шулай ҙа бындай тыйыуҙарға ҡолаҡ һалмағандар байтаҡ, шуға бөгөн умрызаяның барлыҡ төрҙәре лә юғалып барған үҫемлектәр исемлегендә.**



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 19 АПРЕЛЬ - УМЫРЗАЯ КӨНӨ

**Был матур яҙғы байрам 1984 йылдан Бөйөк Британияла билдәләнә башлай һәм донъя илдәренә лә тарала. Һәр төбәктә умырзая төрҙәре айырыла һәм сәскә атыу осоро ла төрлөсә: ғинуарҙан апрель айына тиклем. Ә Англияла был сәскәне айырыуса яраталар, сөнки инглиздәр өй тирәләй ултыртылған умырзаялар хужаны яман көстәрҙән һаҡлай тип ышана. Әлбиттә, был сәскә яҙ символы, йылылыҡ, өмөт билдәһе лә.**

Латинса умырзая "галянтус" (Galanthus), йәғни "һөт сәскәһе" тип атала. Уны кешелек 1-се меңйыллыҡтан алып белә, сафлыҡ билдәһе тип ҡабул иткәндәр. Ер йөҙөндә умырзаяның 20 тирәһе төрө үҫә, әммә бөтәһе лә тиерлек Ҡыҙыл Китапҡа индерелгән.

Англияла был сәскәне ҡар тамсыһы йәки ҡар алҡаһы тип, чехтар ҡар бөртөгө, немецтар ҡар ҡыңғырауы, урыҫтар подснежник тип йөрөтә. Шуныһы ҡыҙыҡ, һәр төбәктә иң беренсе атҡан сәскәне умырзая тип атағандар. Мәҫәлән, Рәсәйҙең Нижегородка өлкәһендә, Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында йоҡо үләнен (прострел раскрытый) умырзая тип йөрөтәләр. Ә бына республикабыҙҙың Архангел, Өфө тирәһендә үҫкәне аҡ сәскә ата һәм ғилми атамаһы "Алтай елбәгәйе" икән.

Ҡайһы бер халыҡтарҙа умырзая - яҡшылыҡҡа өмөт билдәһе. Күптәрендә уға бәйле риүәйәттәр бар. Рустә Ҡыш әбей, Һыуыҡ һәм Ел ергә Яҙ килмәһен өсөн тырышҡандар, әммә умырзая һынын төҙәйтеп баҫып торғас, Ҡояш уны күреп, Яҙға юл ярған, тигәнерәк риүәйәт йәшәгән. Башҡорт халҡында ла умырзая тураһында матур риүәйәт бар: егет менән ҡыҙ ҡауыша алмай, егеттең атаһының ҡарғышы төшөп, береһе ҡарбоҙға, икенсеһе сәскәгә әүерелгән, имеш. Беҙҙә был сәскәгә ҡағылырға ярамаған, боронғолар уны өҙгән кешенең ғүмере ҡыҫҡа, заяға була тип ышанған. Шулай ҙа бындай тыйыуҙарға ҡолаҡ һалмағандар байтаҡ, шуға бөгөн умрызаяның барлыҡ төрҙәре лә юғалып барған үҫемлектәр исемлегендә. Ҡайһы бер илдәрҙә хатта уны төбө-тамыры менән йолҡоп һатып та бөтөргәндәр. Умырзая көнө хозур тәбиғәтебеҙгә һаҡсыл ҡарарға, беҙҙе уратҡан матурлыҡҡа аяуһыҙ йоғонмаҫҡа, умырзая сәскәләренә ситтән ҡарап ҡына һоҡланырға кәрәк, тигән ябай хәҡиҡәтте хәтергә төшөргән бер матур дата.

Башватҡыста "умырзаялы" шиғырҙарҙың авторҙарын белерһегеҙ, моғайын.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**12-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Саған. Болид. Варшава. Юлсы. Хазина. Таба. Дим. Афәт. Ҡын. Оракул. Әҙибә. Орлов. Ихата. Әйт. Бура. Глюкоза. Аҡыҡ. Әмер. Ырым. Зыян. Оя. Моэм.

**Вертикаль буйынса:** Тәгәрмәс. Юлбарисов. Әсә. Выждан. Юнысов. Ит. Ғабдрахманов. Зәмзәм. Аулаҡ. Урам. Абдрахманов. Астроном. Ашхана. Иртәк. Ареал. Арыҡ.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 апрель "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16.00, 19.00 16+

**17 апрель "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**20 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 апрель "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 16+

**19 апрель "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 12.00 6+

**"Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**16 апрель "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), спектакль-синестезия. 18.00 6+

**17 апрель "Каменный гость"** (А. Пушкин). 18.00 12+

**18 апрель "Коза-дереза"** (М. Супонин). 18.00 0+

**19 апрель "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). 16+

**20 апрель "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 14.00 0+

**"Терем-теремок"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 0+

**21 апрель "Красная шапочка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 апрель Жуй Мин,** Ҡытай фортепианосыһы. 6+

**16 апрель Әлиә Исҡужинаның** концерты. 6+

**19 апрель Филармонияның 85 йыллығына юбилей кисәһе.** 6+

**21 апрель "Уикэнд с органом"** ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты. 15.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**17-19 апрель Премьера! "Как избежать зла?"** (Д. Синдерос), мәктәп драмаһы. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 апрель "Музыка - душа моя"** концерт. 6+

**20 апрель "Не сыграть ли свадьбу?"** (А. Тарасов), комедияһы менән К. Иванов исемендәге сыуаш дәүләт театры гастролдә. 12+

## БР Милли музейы

**16 апрель "Урал менән Шүлгән"** командалы интеллектуаль уйын. 11.00 12+

**18 апрель "Парижды ла күрҙек беҙ!"** экскурсия. 11.00 6+

**19 апрель "Башҡорт бейеүе легендаһы - Рәшиҙә Туйсина"** күргәҙмәһе асыла. 11.00 6+

**"Милләт көсө"** Л. Камневаның фотокүргәҙмәһе. 15.00 6+

**"Этно стилендә бер көн"** акция. 11.00 6+

**"Тейелмәй торған тәбиғәт донъяһы"** сара. 6+

**20 апрель "Искусница-кружевница"** сара. 12.00 0+

**"Башҡорт аш-һыуы"** сара. 15.00 6+

**21 апрель "Билбау үрәбеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+

*Әгәр ҙә һәр беренсе осраған кеше тарафынан көс ҡулланыуға, мыҫҡыллаҡланыуға дусар ителә ала икән, ул милләткә аҡланыу юҡ.*

*(Карл Маркс).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЗАТЛЫ ШӘХЕС...

## ғаиләнән башлана



**Ошо көндәрҙә Әлшәй районында баланы төрлө яҡлап үҫтереүгә йүнәлтелгән бик файҙалы сара - "Башҡортостан ынйылары" конкурс-фестиваленең финалы булып үтте.**

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан 16-сы тапҡыр үткәрелгән быйылғы фестиваль Рәсәй Федерацияһында иғлан ителгән Ғаилә йылына арналып, "Затлы шәхес ғаиләнән башлана" тигән бик яуаплы ла, абруйлы ла тема аҫтында үтте. Фестиваль хәҙер Әлшәй район хакимиәтенең һәм мәғариф бүлегенең төп мәҙәни сараларының береһенә әйләнгән, шуға ла улар уны ойоштороуға, үткәреүгә һәр саҡ ҙур көс һала. Был юлы ла шулай булды. Бигерәк тә Раевка ауылының Пионерҙар һәм уҡыусылар һарайы директоры Надежда Александровна Самойлованың тырышлығын билдәләп китергә кәрәк. Бөтә ойоштороу эштәрен үҙ иңенә алып, эшләгән эшенең йәш быуын өсөн бик файҙалы, фәһемле икәнен бөтә йөрәге менән тойоп башҡара ул был республика күләмендәге ҙур эште.

Быйыл фестивалгә республиканың төрлө төбәктәренән 29 заявка ебәрелде. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Зөһрә Бураҡаева етәкләгән абруйлы баһалама комиссияһы иң яҡшы тип иҫәпләнгән 17 коллективты финалға үткәрҙе. Ярыш бик көсөргәнешле барҙы, йәш артистар тыуған яғының данлыҡлы шәхестәренең тормош юлын, эшмәкәрлеген бөтә тулылығында бирергә тырышып, бирелеп уйнаны. Фестивалгә әҙерлек эшенә уҡыусылар ғына түгел, ата-әсәләрҙең дә йәлеп ителеүе унын бәҫен бермә-бер арттырҙы. Сәхнә бутафорияһы, спектаклдең геройы йәшәгән осорға хас костюмдар - барыһы ла уҡыусылар һәм ата-әсәләр ярҙамы менән эшләнә. Шулай итеп тыуған ерҙең, тыуған яҡтың быға тиклем асылмаған биттәрен балалар менән бергә атай-әсәйҙәр ҙә өйрәнә. Патриотик тойғолар, тыуған ергә һөйөү һәм уны үҫтереү өсөн арымай-талмай эшләү кәрәклеген аңлау ошондай, тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән эштәрҙән башлана ла инде.

Фестиваль-конкурс булғас, унда еңеүселәр ҙә була, әлбиттә. Фестивалдең иң юғары бүләгенә - Гран-приға Әлшәй районының Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге Башҡорт лицейы базаһындағы "Аманат" коллективы лайыҡ булды. Беренсе урында - Баймаҡ ҡалаһы Балалар ижады йортоноң "Йәншишмә" фольклор коллективы, икенсе урында - Ҡыйғы районы Иҫке Мөхәмәт ауылы мәктәбенең "Аҡйондоҙ" коллективы, өсөнсө урында - Белорет районы Инйәр ауылының 2-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең "Самрау" балалар театры коллективы. Ойоштороусылар тарафынан төрлө номинациялар ҙа булдырылғайны: "Иң яҡшы эҙләнеү эше" номинацияһында Балтас районы Балалар ижады үҙәгенең "Тамсылар" коллективы, "Ғаилә традицияларына тоғролоҡ" номинацияһында Федоровка районы Балалар һәм үсмерҙәр ижадын үҫтереү үҙәгенең "Йәш таланттар" коллективы, "Халыҡ традицияларын һаҡлаусылар" номинацияһында Архангел районы Терекле мәктәбенең "Дарман" коллективы, "Батырҙар образы өлгөһөндә патриотизм тәрбиәләү" номинацияһында Дыуан районы Иҫке Хәлил мәктәбенең "Ынйыҡай" театр коллективы еңеүселәр тип табылды.

Шуныһы әһәмиәтле: фестиваль бөгөн "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге ғәмәлгә ашырған "Урал батыр мәктәбе" проектының (авторы - М.С. Бураҡаева) 10-сы "Үлгәндәрҙе терелтер өсөн тыуған батырмын" йүнәлешенә тап килә. Элек-электән, беҙҙә генә түгел, башҡа халыҡтарҙа ла йәш быуын тыуған ил, тыуған ер, халыҡ бәхете өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булған батырҙар, данлыҡлы кешеләр өлгөһөндә тәрбиәләнгән. Үҙҙәре өсөн генә йәшәгән, бөтә иғтибарын тик үҙ шәхесен үҫтереүгә генә йүнәлткән индивидуалистар тәрбиәләүҙең йәмғиәт өсөн бик үк яҡшы түгел икәнен беҙ Көнбайыш илдәре миҫалында күрә башланыҡ та инде. Шуның өсөн дә "Башҡортостан ынйылары" фестивале бөгөн үтә лә актуаль сараларҙың береһелер тигән фекерҙәбеҙ.

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА,**
**"Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# УТЫҠ ШИШМӘЛӘР

**Ҡояшта упа ҡар емелдәп ята. Упа ҡарҙа бер генә эҙ ҙә юҡ. Аҡ ҡарға шул "упа" һүҙен яҙһаң, ул шунда уҡ юғаласаҡ. Сөнки.... Ә уныһын асыҡлар кәрәк.**

**Упа: упа ҡар.** Әле генә яуған, күпереп ятҡан йомшаҡ, еңел ҡар. Алдағы миҫалдарға яңыларын да өҫтәге килеп тора: *Балалар упа ҡарҙа аунап уйнай. Ҡайһылары упа ҡарҙа саңғы, сана шыуырға сыҡҡан. Упа ҡарҙы ел өйөрөлтә.*

**Улъя.** Улъя - "табыш" тигән мәғәнәгә тура килгән һүҙ. Мәҫәлән: *Һунарсылар урмандан яҡшы улъя менән ҡайтты. Улъяны уртаҡлап бүлештеләр.* Улъяның икенсе мәғәнәһе - яумал, йәғни, трофей. Миҫал: *Партизандар дошмандың байтаҡ ҡоралын улъяға төшөргән.*

**Урамал.** Яулыҡтың нимә икәне һәр кемгә билдәле. Был әйберҙе диалекттарҙа "Урамал" тип тә йөрөтәләр икән. Мәҫәлән: *Биҙәкле урамал. Башты урамалға урау.* "Урамал" шулай уҡ таҫтамалға ҡарата ла әйтелә. Миҫалға: *Бүләккә сигелгән урамал әҙерләү. Мунса урамалы.*

**Урышҡал.** Ылыҫлы урмандар төбәгендә йәшәгәндәргә, моғайын, был һүҙ ят түгелдер. Улар ҡарағас сайырын урышҡал тип тә атай. Миҫал: *Ҡарағастан урышҡал аға. Урышҡал йыйыу. Урышҡал ҡайнатыу.*

**Утыҡ. 1.** "Тулы һыулы, ҡеүәтле" тигәнде белдергән һүҙ. Миҫал өсөн: *Тауҙарҙан утыҡ шишмәләр ағып төшә. Утыҡ йылғаларҙан һал ҡыуғандар.* **2.** Һөйләштәрҙә "Утыҡ" һүҙе "ныҡ, сәләмәт" тигән мәғәнәлә лә осрай. Миҫал: *Утыҡ кәүҙәле егет. Малай утыҡ булып үҫеп килә.*

**Шулай итеп, һәр сығарылыштың улъяһы - яңы отҡан иҫке һүҙҙәр. Әйҙә улар арта ғына барһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИНӘҺЕ НИНДӘЙ,

## ҡыҙы шундай

Ахырызаман килһә, атаһы тороп - улы һөйләр; инәһе тороп- ҡыҙы һөйләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Фәҡирлек ҡурҡыныс түгел ул. Фәҡирлектең яманлығы шунда: уны башҡалар күҙенән йәшереп булмай.

**(Джером).**

Телмәренең торошона ҡарап был телдә һөйләшкән халыҡтың нисек йәшәүе тураһында фекер йөрөтөп була.

**(Хулио Кортасар).**

Йәшәү менән үлем йәнәш кенә йөрөй, әммә бер-береһе тураһында белмәйҙәр.

**(Эмиль Кроткий).**

Әгәр ҙә һәр беренсе осраған кеше тарафынан көс ҡулланыуға, мыҫҡыллаҡланыуға дусар ителә ала икән, ул милләткә аҡланыу юҡ.

**(Карл Маркс).**

Һәр кем үҙ тормошонда осратырға тейешле кешеһен осрата.

**(Натан Эйдельман).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәхәбәләре араһында, уның бер сөхбәттәрен дә ҡалдырмай, гел янында йөрөгән бер сәхәбәһе булған. Ул Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡайҙа барһа ла уға эйәргән һәм алдына бәләкәй сабыйын ултыртып, уның телмәрҙәрен тыңлаған.**

**Тик бер көндө сәхәбәнең малайы үлеп ҡалған. Оло ҡайғыға ҡалған ата кеше, үҙенең уңалып бөтмәгән күңел яраһы менән башҡаларҙың тыныслығын боҙоуҙан һаҡланып, бер нисә көн Мөхәммәт бәйғәмбәр янына килмәгән. Мөхәммәт ғәләйһис сәләм был кешенең юҡлығын һиҙеп ҡалған һәм уның тураһында һорашҡан. Һәм сәхәбәнең яратҡан малайы үлеп ҡалғаны тураһында белгән. Шунан Мөхәммәт бәйғәмбәр уның ҡайғыһы тураһында сәхәбәнең үҙ ауыҙынан ишетер өсөн уны эҙләп киткән. Сәхәбәнең ысынлап та малайын юғалтҡанын белгәс, ҡайғыһын уртаҡлашҡан һәм уның күңелен ошо һүҙҙәр менән йыуатҡан: "Әйт әле миңә, һин баландың ерҙәге тормошонда гел һинең менән бергә булыуынмы, әллә иртәгә, һин ожмахтың үҙең теләгән ишегенә барған саҡта уның йүгереп килеп "Рәхим ит, атаҡайым!" тигән һүҙҙәр менән ишек асыуын теләр инеңме?"**

**Шул ваҡыт сәхәбәнең иңенән тау төшкәндәй була. "Эй, Аллаһтың илсеһе! Әлбиттә, мин улымдың миңә ожмахтың ишектәрен асыуын теләйем", - тип яуап биргән ул. Бәйғәмбәр ғәләйһис сәләм: "Һин нисек теләйһең - шулай булыр", - тип яуаплаған".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24014

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 111686


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.